ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-4 август - сентябрь (урағай - һарысай)

2020

№35 (921)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡуштау йәшәйәсәк!**



4

**Ваҡытлыса ғына...**

ситтән тороп уҡыу һәм уҡытыуҙар



5-6

**Ауылдарыбыҙ йәшәһен -**

улар бит милләт бишеге, ейәр ризығыбыҙ сығанағы, телебеҙ үә илебеҙ терәге



8-9

**Эльбрус Ниғмәтуллин менән...**

скандинавса атлайбыҙ



12

**ТВ-программа** 14

***Шул тиклем күрә алмаған дошманың бармы? Булһа, һин уға байлыҡ, тормош ләззәттәре, күңел асыуҙар, сикһеҙ власть теләп: күрерһең, ул ошолар арҡаһында һәләк буласаҡ.***

***(Жан Робине).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Үткән уҡыу йылы аҙағында дистанциянан уҡыу, уҡытыу тәжрибәһен үҙләштерҙегеҙ бит инде. Ниндәй булды ул тәжрибә һәм һабаҡтар? Уның ҡабатланыуын теләйһегеҙме?

***Гөлфиә НУРЕТДИНОВА, Учалы ҡалаһы, ике бала әсәһе:*** Дистанцияла уҡыуға, бөтә атай-әсәйҙәр һәм балалар кеүек үк, беҙ ҙә әҙер түгел инек. Был бер-ике аҙнаға ғына һуҙылыр ҙа, ғәҙәттәгесә, мәктәпкә барып уҡый башларҙар, тип уйлап, башта бик әһәмиәт бирмәнем. Шуға ла тәүҙә интернет насар эшләүенә лә иғтибар итмәнем, үҙизоляцияла булһам да, балалар быға тиклем ауырлыҡһыҙ уҡығас, дәрестәренә лә артыҡ илтифат күрһәтмәнем. Аҙаҡ ҡына онлайн форматта уҡытыу етди төҫ алыуын аңлап ҡалдым һәм балаларҙың белем алыу барышында тура-нан-тура ҡатнаштым. Бигерәк тә башланғыс класта уҡыған ҡыҙымдың, ә улымдың башҡорт теле һәм әҙәбиәте, тарих дәрестәрен көтөп ала башланым. Үҙем өсөн күп һабаҡ алдым тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Тәү сиратта, шуны аңланым: бында иң ҡыйыны уҡытыусыға. Утыҙ минутлыҡ дәрестә ул кемдең ҡатнашҡанлығын асыҡларға ла, яңы теманы аңлатырға ла, өйгә эште тикшерергә лә тейеш. Уҡыусылар менән кире бәйләнеш булмауы өсөн дә, ҡайһы бер атай-әсәйҙәр яғынан контроль булмауы йәки етмәүенә лә борсола ине улар.

Уҡытыуҙың был алымы балаларға ла, ата-әсәләргә лә үҙ эшен ойоштороrға, ваҡытты дөрөҫ бүлергә, контролдә тоторға өйрәтте, тип уйлайым. Был, әлбиттә, еңел булманы. Йыш ҡына интернеттың көсө етмәне, балаларға ярҙам итергә мәктәп программаһын бөтөнләй онотоуым да ҡамасауланы. Дистанцияла уҡыуға бер ай тулды тигәндә, артыҡ көсөргәнештән йоҡлай алмай башланым. Ҡайһы бер уҡытыусылар өйгә эште шул тиклем күп бирә, әйтерһең дә, балаларҙан профессорҙар әҙерләй. Бераүҙәре уҡытыу платформаларын йыш алмаштырып ыҙаланы. Уҡыу материалын ҡайһы папканан алырға белмәй аптыранаһың аҙаҡ. Быларҙың барыһы ла күп ваҡыт, иғтибар талап итә. Ярай ҙа өйҙә ике ноутбук булды. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә бераү ҙә булмағанын беләм. Улар көнө буйы телефонға тексәйеп ултырып, ниндәй әҙерлек алһын инде. Күҙен, һаулығын ғына бөтөрөп ултырғандыр инде.

Ике балам да мәктәпте, тиҫтерҙәрен, уҡытыусыларын ныҡ һағынды. Шундай ҡыҙыҡ, дөрөҫөрәге ҡыҙғаныс хәл дә булды. Дәрес барған ваҡытта мәктәп ҡыңғырауына оҡшаған тауыш ишетелгәйне, ҡыҙымдың күҙенә йәш тығылды. Улар беҙҙе алдайҙармы икән әллә, тип шул тиклем үпкәләне, хатта илап бөттө. Улымдың класташтары араһында ла, былай уҡығым килмәй тип, онлайн-дәрестәргә инмәгәндәр булды.

Дистанциянан уҡыу атай-әсәйҙәргә, балаларға, иң беренсе, уҡытыусының, тәрбиәселәрҙең ҡәҙерен белергә өйрәткәндер, тип уйлайым. Шулай уҡ күптәр үҙенең балаһы менән ныҒыраҡ шөғөлләнергә, уға күберәк иғтибар бирергә кәрәклеген төшөнгәндер. Шәхсән үҙем яңы уҡыу йылында өйгә бирелгән эште балаларым менән бергә эшләргә ниәтләйем. Өлкәне хәҙер үҙ аллы инде, әммә уға ла төрлө ҡыҙыҡлы материалдар табырға, ижади, эҙләнеү эштәрен тулыландырырға ярҙам итә алам бит. Улар менән үҙем дә мәктәп программаһын яңынан өйрәнәм. Элек аңламаған темаларымды аңлайым. Башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәренә ҡыҙыҡһыныуым артты. Дәреслектә бирелгәндәрен уҡып сыҡтым. Киләсәктә китапханаға яҙылып, классиктарыбыҙҙың әҫәрҙәрен тулыһынса уҡырға уйлайым. Дистанциянан уҡыуҙан алған ыңғай һабаҡтарым шул. Әммә башҡа был һынау алдына торорға яҙмаһын. Пандемияға бәйле бәләҡаза шуның менән урап үтһен. Балаларыбыҙға яраҡкан уҡытыусыларының күҙенә ҡарап, дуҫтары менән бер класта ултырып уҡырға насип булһын!

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЗАТОНДА БАР БЕР МӘКТӘП...

**Өфө ҡалаһының Затон биҫтәһендә 1966 йылда 75 кешене йәлеп итеп асылған Әҙеһәм Иҫкужин исемендәге 9-сы балалар музыка мәктәбендә хәҙер, өс ҡатлы өр-яңы бинаға күсәс, 550 уҡыусы музыкаль белем алаҫаҡ.**

Музыка мәктәбендә әлеге көндә фортепиано, халыҡ инструменттары, оркестр, теоретик фәндәр, башланғыс эстетик үҫеш бүлектәре эшләй. Уҡыусылар оло теләк менән фортепиано, скрипка, виолончель, домра, баян, аккордеон, гатара, ҡурай, думбыра, ҡыл-ҡубыҙ, кларнет, гобой, флейта, саксофон, вокал, синтезатор үҙләштерә. Был һөнәрҙәргә 6 йәш тә 6 айҙан алып 9 йәшкә тиклемге балалар ҡабул ителә. Шулай уҡ "Хореография ижады", "Рәссам" бүлегенең 5 йыллыҡ уҡытыу программаһы бар.

Данлыҡлы ҡурайсы, педагог Әҙеһәм Иҫкужин исемен йөрөткән мәктәптә һәр һөнәри йүнәлеш буйынса ансамблдәр ойошторолған. Улар араһында 2018 йылда "Халыҡ ансамбле" тигән маҡтаулы дәрәжәгә лайыҡ булған Заһир Шәғәрғазин етәкселегендәге "Тамъян" башҡорт халыҡ инструменттары ансамбле - мәктәп ғорурлығы. Ул Башҡортостан мәктәптәрендә эшләгән быңдай ансамблдәр араһында ошондай юғары исемгә лайыҡ булған берҙән-бер коллектив. Мәктәп директоры Әхиәт Ғәйетбаев әйтеүенсә, теоретик фәндәрҙе лә уҡыусылар теләп өйрәнә, бигерәк тә башҡорт музыкаһы дәресендә халыҡ фольклоры, башҡорт халыҡ уйын ҡоралдары яңғырашы, башҡорт композиторҙары ижады менән танышыу ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Ҡыҫҡаһы, был музыка мәктәбендә Башҡортостандың данын арттырыр таланттар уҡый һәм уларҙа ҙур сәхнәләрҙе яулар ҡанаттар үҫтергән оҫта педагогтар эшләй.




12+

✓ Әммә ни тиклем дистанцияла уҡыуҙы һәм уҡытыуҙы маҡтамаһындар, класта уҡыусының күҙенә ҡарап, уның нимә белергә йәки әйтергә теләгәнен белеп дәрес биреүгә етмәй.



КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘКТӘРЕБЕҘ ҺЕҘГӘ



**Билдәле сәбәптәр арҡаһында 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһын үткәреү бик үк еңелдән булманы. Ә шулай ҙа гәзитебеҙҙе кәрәкле мәғлүмәт, аҡыл, кәңәш сығанағы итеп иҫәпләгән, ҡағыҙ баҫманы төрлө башҡа мәғлүмәт сараларынан өҫтөн күргән даими уҡыусыларыбыҙҙың күбеһе "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, бәйләнеште, дуҫлыҡты дауам итеү мөмкинлеге тапты. Рәхмәт уларға.**

Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙан:

Әбйәлил районы Ҡужан ауылынан Ғәйфулла Хәйруллин, Октябрьский ҡалаһынан А. Хасаев, Белорет районы Сосновка ауылынан Р. Мөхәмәтйәрова, Баймаҡ районы Шүлкә ауылынан Юламан Раев - **"Башкиры"**;

Әбйәлил районы Салауат ауылынан М. Ноғаманова, Хәйбулла районы Байғусҡар ауылынан Минзәлә Торомтаева, Баймаҡ районы Ишмөхәмәт ауылынан Сәфәрғәле Ярмуллин - **Е.Е. Нивалоданың "Орнамент счетной вышивки башкир"**;

Межгорье ҡалаһынан З. Ғәлиева, Ишембай районы Һайран ауылынан З. Хөсәйенова, Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Ш. Нәҙерғолова, Баймаҡ районы Темәс ауылынан А. Ҡамалетдинова, Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылынан Фирүзә Килдейәрова - **Софья Нуриджанованың "Читайте полотенца"**;

Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан Р. Ғәйнуллина, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Р.Мәүлетколова, Миәкә районы Исламғол ауылынан Зәлифә Шафиҡова, Учалы районы Ураҙ ауылынан Р. Дәүләтшина - **Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үләндәре"**;

Учалы районы Озерный ауылынан Нәжиб Әйүпов, Баймаҡ районы Муллаҡай ауылынан Р. Билалов, Сибай ҡалаһынан С. Аймырҙина, - **Азат Ярмуллиндың "У истоков башкирской республики"**;

Бөрйән районы Ғәлиәкбәр ауылынан Хөснә Исламбаева, Баймаҡ районы Мерәҫ ауылынан Әхәт Әсмәндийәров, Әбйәлил районы Үрге Әбдрәш ауылынан Әнисә Ҡаһарманова - **Фәүзиә Усмpraнованың "Бөрйән йөрәге"**;

Әбйәлил районы Үрге Әбдрәш ауылынан Зифа Мәжитова - **Рәшит Шаҡурҙың "Ғүмер көҙө"**;

Учалы районы Уральск ауылынан Г. Зиннурова, Әбйәлил районы Ташбулат ауылынан Минзиә Нурғәлина - **"Башҡорт халыҡ ижады"**;

Баймаҡ районы Ишмөхәмәт ауылынан Илдар Юланов - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры"**;

Өфө ҡалаһынан Дилара Әйүпова, Күгәрсен районы Яҡшымбәт ауылынан А. Аллағыуатова, Баймаҡ районы Урғаҙа ауылынан Ф Мортазин, Хәйбулла районы Уфимский ауылынан Г. Такалова,Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылынан Зөлиә Әлмәхәмәтова, - **Гүзәл Ситдиҡованың "Мин донъяны өйрәнәм" һәм "Ана килә бәпәй" китаптарына һәм**

Ауырғазы районы Моразым ауылынан А. Ҡусҡаров, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Х. Ерьесов, Илеш районы Үрге Йәркәй ауылынан Г. Мостафина - **"Юлдаш" радиоһынан шиғри альманахына лайыҡ булды.**

**Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! Сентябрҙән 2021 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәрҙән кемдәрҙер ошондай матур китаптарға эйә була алыр, тип вәғәҙәләйбеҙ. Бергә булайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Үткән уҡыу йылы аҙағында дистанциянан уҡыу, уҡытыу тәжрибәһен үҙләштерҙегеҙ бит инде. Ниндәй булды ул тәжрибә һәм һабаҡтар? Уның ҡабатланыуын теләйһегеҙме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Айгөл ФӘЙЗУЛЛИНА, Мәләүез ҡалаһы, 4-се мәктәп директоры урынбаҫары:*** Үткән уҡыу йылы район-ҡала уҡыусыларының, уларҙың ата-әсәләренең һәм, әлбиттә, бөтә педагогия берләшмәһенең, атап әйткәндә, уҡытыусыларҙың, тәрбиәселәрҙең, учреждение директорҙары һәм урынбаҫарҙарының хәтерендә онлайн-режимда уҡып тамамланыуы менән иҫендә ҡалды.

Мәғлүм булыуынса, коронавирус инфекцияһы таралыуға бәйле, Рәсәй, шул иҫәптән республика белем биреү учреждениелары каникулдан һуң апрелдә дистанциянан уҡытыуға күсте. Һәр нәмәнең башланған ваҡытында ыңғай һәм кире яҡтары булған кеүек, онлайн-форматта белем биреүҙең дә төрлө яҡ билдәләнде. Был процеста ҡатнашыусыларҙың мәжбүри үҙгәрештәргә әҙер булмағандары ла бар ине. Улар ата-әсәләр, уҡыусылар, педагогтар араһында ла осраны.

Беҙ үҙебеҙҙең мәктәптә уҡыусыларҙың мөмкинлегенән сығып, белем биреүҙең төрлө платформаларын һайланыҡ. Уҡытыусылар дәресте ҡыҙыҡлы, фәһемле итеп ойоштороу, ҡуйылған маҡсатҡа өлгәшеү өсөн бөтә тырышлығын, ижади һәләтен һалды. Өйҙән уҡытһаҡ та, бер-беребеҙ менән тығыҙ бәйләнештә эшләнек, аралашыуҙы, тәжрибә уртаҡлашыуҙы туҡтатманыҡ. Бөтәбеҙ ҙә уҡытыуҙың был форматы ваҡытлыса тип ҡабул иттек һәм, көнө буйы компьютер артында ултырыу ни тиклем ауыр булһа ла, сабырлыҡ менән үҙебеҙгә йөкмәтелгән бурысты теләшенсә үтәнек, тип уйлайым. Уҡыу йылы йомғаҡтары буйынса башҡа йылдарҙан ҡалышмауыбыҙ ҙа шуны асыҡ дәлилләй. Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре лә шул хаҡта һөйләй.

Әммә ни тиклем дистанцияла уҡыуҙы һәм уҡытыуҙы маҡтамаһындар (һуңғы ваҡытта онлайн уҡытыуға ыңғай баһа биреүселәр ҙә барлыҡҡа килде), класта уҡыусының күҙенә ҡарап, уның нимә белергә йәки әйтергә теләгәнен белеп, дәрес биреүгә етмәй. Быға тиклем әүҙемлеге, белемгә ынтылышы, ҡыҙыҡһыныусанлығы менән айырылған балаларҙың ҡайһы берәүҙәре дистанцияла уҡығанда юғалып ҡалды. Дәрес ваҡытында бәйләнешкә сыҡмай аптыраткан уҡыусылар ҙа булды. Уларҙы, әлбиттә, иғтибарҙан ситтә ҡалдырманыҡ, ата-әсәләренә шылтыратып, хәлде асыҡланыҡ. Бәхәһ, уларға бындай уҡытыу алымы оҡшамай булып сыҡты. Уҡытыусылар, класташтары, тиҫтерҙәре менән йәнле аралашыуҙы һағынып, төшөнкөлөккә бирелгән үҫмерҙәр ҙә осраны. Шул уҡ ваҡытта быға тиклем дәрестә пассивлығы менән айырылған балаларҙың әүҙемләшеү осрағы ла күҙәтелде. Ундайҙар уҡытыусы биргән һәр күнекмәне теүәл үтәп, үҙен эҙләнеүсән, ижади эшләгән уҡыусы итеп күрһәтеп, үҙҙәрен ыңғай яҡтан иҫбатланы.

Уҡытыуҙың яңы алымы ата-әсәләр араһында ла төрлө тәьҫорат ҡалдырҙы. Улар араһында педагогтар бөтә бурысын атай-әсәйҙәр иңенә һалды, тип иҫәпләгәндәр ҙә бар. Күптәргә, айырыуса балаһы башланғыс класта уҡығандарға, дәрестә ҡатнашырға, өйгә эште бергә эшләргә тура килде. Өҫтәүенә, бөтәһенең дә өйөндә смартфон, ноутбук, компьютер юҡ. Булған хәлдә лә, икешәр-өсәр түгел. Ә мәктәптә ике, өс, хатта дүрт балаһы уҡыған ғаиләләр байтаҡ. Икенселәрҙең тәүге осрҙа интернет менән проблемалар булды. Билдәле инде, был хәл ҡайһы бер атай-әсәйҙәрҙе ысын мәғәнәһендә балалары менән күберәк шөғөлләнергә мәжбүр итте.

Уҡытыусыны, үҙенең балаһын аңлап, тынлыҫлыҡ һаҡлаған, дәресте ойошторорға ярҙам иткән атай-әсәйҙәр, өләсәй-олатайҙар ҙа булды, сөнки дистанциянан уҡытыу педагогтар өсөн дә өр-яңы уҡытыу алымы ине. Каникул ваҡытында улар махсус уҡынылар, әлбиттә. Әммә быға тиклем уларҙың береһе лә онлайн-форматта эшләп ҡарағаны булманы. Шуға ла беҙгә лә еңелдән булманы. Дәрес биреү - бер. Ә уға әҙерләнеү хәҙер бөтөнләй икенсе талап ҡуйҙы. Күргәҙмә материалдар эшләү, план яҙыу төрө үҙгәрҙе. Һәр класҡа, һәр дәрескә айырым файл, папка тултырыу - быларҙың барыһы ла педагогҡа көнө буйы, хатта төндөң яртыһына тиклем компьютер артында ултырырға мәжбүрләне. Шулай ултырһаң да өлгөрөп булмай ине әле. Уның һөҙөмтәһе, һис шикһеҙ, уҡытыусыларҙың һаулығында кире сағылмай ҡалмағандыр. Дәрестән һуң электрон документация, журналдар тултырыу, балаларҙың эшен тикшереү, баһалау, уларҙың һөҙөмтәһен кире ебәреү өсөн бер көн етмәй ҙә ҡала.

Уҡытыуҙың был төрөнөң, һис шикһеҙ, ыңғай яҡтары ла бар. Уҡытыусыға, иң беренсе, эште системаға һалырға, системалы, эҙмә-эҙлекле эшләргә өйрәтте. Шулай ҙа барыбер һәр уҡытыусы, һәр бала һәм атай-әсәй мәктәпкә йөрөп уҡыуға бер ни ҙә етмәй икәнен аңланы.

***Наҙгөл ИСЛАМОВА, медицина колледжы студенты:*** Уҡыу йылы гәҙәттәге режимда башлана тигән хәбәрҙе ҡыуанып ҡаршы алдым. Мин - буласаҡ медицина хеҙмәткәре. Кеше һаулығы һәм ғүмере өсөн яуаплылыҡ талап иткән һөнәрҙе ситтән тороп ҡына белеп, һөнәри нескәлектәргә өйрәнеп булмай бит. Уҡыу йылы дистанцияла белем алыу менән тамамланды. Билдәле инде, практикалар булманы. Ә теорияны үтеп, уны ғәмәлдә күрмәгәс, эшләп ҡарамағас, ҡайҙан беләһең? Дауаханаларға барып, ауырыуҙарҙы күреп, уларҙың хәлен аңламай, укол да һалып ҡарамай, буласаҡ һөнәреңде нисек тояһың? Тап ошо тәүге практикаларҙан һуң студент медсестра йәки фельдшер булырға дөрөҫ ҡарар ҡабул иткәнен йәки итмәгәнен аңлай. Дөрөҫ түгел тип иҫәпләһә, ваҡытын бушҡа үткәреп йөрөмәй - икенсе уҡыу йортон һайлай. Беҙгә быйыл бындай мөмкинлек булманы инде.

Онлайн уҡыу тәү ҡарамаҡҡа яҡшы ойошторолдо. Бөтә дәрестәрҙе график буйынса тулыһынса үттe. Көнө буйы компьютер алдында ултырыу, әлбиттә, эҙемтәһеҙ ҡалманы. Арҡа һәм күҙҙәр ауырта башланы. Үҙ аллы эш алымдары артты, лекциялар темаһы буйынса күберәк үҙеңә эҙләнергә тура килә. Имтиханды ла дистанцияла бирҙек. Әммә был һынау төрө бик үк етдилек талап итмәгән кеүек, минеңсә.

Ыңғай яҡтары ла булды. Айырыуса минең кеүек ситтән килеп, ятаҡта йәшәгәндәр өсөн. Ашарға бешерергә түгел. Өйҙә әсәйҙең ашы һәр ваҡыт әҙер. Юлға, аҙыҡ-түлеккә киткән сығымдарҙың булмауы ла ғаиләбюджетына ыңғай тәьҫир итте.

Шулай ҙа, төкөмдәштәремдең береһе лә артабан уҡыуҙы дистанцияла дауам итергә теләмәй. Был - шылтыратышып һөйләшеүебеҙҙең төп темаһы. Йәнле аралашыуға етмәй. Әммә пандемия ҡуйған был һынауҙы эксперимент тип ҡабул итһәк, уны унышлы үттек тип уйлайым. Кем белә, бәлки, киләсәктә белем биреү тотош ошондай форматҡа күсер? Улай булһа, уның ыңғай һәм кире яҡтарын нығлы өйрәнер өсөн был ғына етмәй әле. Уны бер нисә йыл һынарға кәрәк буласаҡ...

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓28 август мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостанда һуңғы тәүлектә 31 кеше Covid-19 йоҡторған. Пандемия башланғандан алып республикала 7698 кеше сирләгән, шуларҙың 6872-һе һауыҡҡан. Әле 798 кеше дауалана. Вафат булыусылар һаны 28, һуңғы тәүлектә яңы осраҡтар теркәлмәгән. Рәсәйҙә барлыһы 980,4 меңдән ашыу кеше коронавирус менән сирләгән, шуларҙың 798 меңдән ашыуы һауыҡҡан, һуңғы тәүлектә 4829 яңы осраҡ теркәлгән.

✓Рәсәй уҡыусыларына теүәл фәндәр буйынса ҡаҙаныштары өсөн 125 мең һумлыҡ грант биреләсәк. 2020 йылда "Цифрлы иҡтисад кадрҙары" проекты сиктәрендә 2018/2019 йылда уҙған математика, информатика һәм цифрлы технологиялар олимпиадалары, конкурстары призерҙары, патент һәм таныҡлыҡтар алған 850 уҡыусыға аҡса бүләү ҡаралған. Ғаризаларҙы 1 сентябрҙән 10 октябргә тиклем тапшырып була.

✓Өфө ҡала хакимиәте "Өфө торлаҡ-коммуналь хужалығының почетлы хеҙмәткәре" исемен биреү тураһындағы ҡарарҙы рәсланы. Награда тармаҡта 20 йылдан ашыу эшләгән һәм алдынғы хеҙмәт күрһәткәндәргә, кеше ғүмерен ҡотҡарғандарға тапшырыла. Хеҙмәткәргә почетлы исем бирелеүе тураһында таныҡлыҡ, түшкә таға торған билдә һәм бер тапҡыр 50 мең һум премия биреләсәк.

✓Башҡортостанда коронавирус пандемияны осоронда 5175 һумға тиклем күтәрелгән эшһеҙлек буйынса ярҙамдың минималь күләме 1 сентябрҙән элеккесә - 1725 һум тәшкил итәсәк. Шулай уҡ һәр балиғ булмаған бала өсөн 3 меңлек өҫтәлмә түләүҙәр ҙә туҡтатыла. 1 марттан эшен туҡтатҡан шәхси эшҡыуарҙарға һәм эшһеҙ ҡалғандарға 13949,50 һум ярҙам бирелә, эшҡыуарҙарҙың уны 3 ай алыу хоҡуғы бар. 1 марттан һуң түләү осоро үтеү сәбәпле, ярҙам алырға хоҡуғын юғалтҡан эшһеҙҙәр уны 3 айға оҙайта ала. Эшһеҙ гражданға аҡсалата ярҙам элекке күләмдә тәғәйенләнә.

✓Рәсих Хәмитов Башҡортостан Башлығының тәбиғәт сығанаҡтарын ҡулланыу һәм экологик хәүефһеҙлек мәсьәләләре буйынса советнигы итеп тәғәйенләнде. Бында ул түләүһеҙ эшләйәсәк. Рәсих Хәмитов Башҡортостандың атҡаҙанған металлургы, "Башнедра" тау-геология мираҫы, мәғариф һәм бизнесты үҫтереү фонды президенты, Башҡортостан Башлығының тәбиғәт сығанаҡтарын ҡулланыу һәм экологик хәүефһеҙлек мәсьәләләре буйынса эш төркөмө ағзаһы булып тора. Быға тиклем шиханд арҙы яҡлап сыҡҡайны.

*✓ Грамоталылыҡ - ул уҡый белеү һәм дөрөҫ яҙыу ғына түгел. Киң мәғәнәлә ул шул уҡ мәҙәнилек күрһәткесе. Мәҫәлән, тарихты, төбәктең, тыуған халҡының үткәнен белмәгән кешене нисек инде грамоталы тип әйтәһең?..*



*БЫЛ АЙҘА...*

# ҺАРЫСАЙҘЫҢ МОҢҺОУ БАЙРАМДАРЫ

**Эҫенән алып, һыуыҡҡа һалып, август буйы һибәләгән яуынында күшектереп, көҙ килеп еткәне лә һиҙелмәне. Улай тиһәң, көҙө лә әллә ни көҙгә оҡшамаҫ, ти синоптиктар. Һарысайҙа йәй уртаһы кеүек йылы, хатта эҫе көндәр ҙә булып алыр, тип күҙаллай улар. Фараздары ысынға сыҡһа, был тик файҙаға ғына: урағайҙа көн күрмәгән халыҡ тәбиғәттә, һыу буйында ял итер, ауыл хужалығы, баҡса эштәрен теүәлләр.**



Тик барыбер алдан күҙаллауҙарға өмөтләнмәҫкә лә өйрәтте беҙҙе тәбиғәт. Алтын көҙ мәленең тәүге айы һалҡынса иртәләре, ысыҡ емелдәүе, ағастарҙағы һары япраҡтар һәм тәүге ҡыңғырау, портфельбиштәрҙәрен артмаҡлаған уҡыусыларҙың мәктәпкә ашығыуы кеүек күренештәр менән күҙ алдына килә. Ошо сылбырҙың теүәллеге боҙолор, ахыры: быйылғы һынауҙар дауам итә - балаларҙың Белем көнө **(1)** мәктәптәргә юлы тағы ябылмаҡсы. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 17 августағы оператив кәңәшмәлә ошо айҡанлы борсолоуын белдерҙе: "Ни булырын яҙмыш күрһәтер, ләкин 1 сентябргә ҡағылышлы, айырыуса уның тәүге өс аҙнаһы өсөн мин бик борсолам. Әле тотороҡланмаған пандемия шарттарында бик ҡатмарлы эпидемиологик миҙгел көтөлә", - тине ул һәм медицина инспекторҙарына мәктәптәрҙе тейешле эш шарттарына әҙерләргә ҡушты. Шулай уҡ ул белем биреү учреждениеларына эпидемиологик норманы контролгә алыу өсөн медицина уҡыу йортон тамамлаусы 500-600-ләп кеше ебәреләсәген хәбәр итте. Ошоға бәйле сентябрь календарындағы тағы бер бөгөнгө көн өсөн әһәмиәтле дата - Санитар хеҙмәт көнөн **(15)** иҫкә төшөрөп китеү кәрәктер. Мәктәптәр балаларҙы ҡаршыларға әҙерләнә, вирустан һаҡланыу саралары күрә. Роспотребнадзор уҡыусылар өсөн бөтөн мәктәп күләмендә балаларҙың аралашыу мөмкинлеген сикләүсе саралар планы эшләп сығарҙы: кластағы уҡыусылар һаны 15-тән артмаҫҡа тейеш; уҡыу сәғәттәре, тәнәфестәр буйынса һәр класҡа айырым график төҙөү һәм башҡа шундай саралар. Ата-әсәләр һәм уҡытыусыларҙың күпселеге дистанцияла уҡытыуҙы хуплап бөтөрмәүен дә иҫәпкә алыу кәрәктер.

Һарысайҙа, ғөмүмән, йөкмәткеләре яғынан бер-береһенә бәйле даталар байтаҡ. Мәҫәлән, халыҡ-ара грамоталылыҡ көнө **(8)** шул уҡ Белем көнө менән ауаздаш. Хәҙер мәктәп тамамлаған балаларҙың ҡайһы берҙәре физика, математика фәндәре хаҡында әйтеп тә тормаҫтан, тарихты ла, географияны ла, әҙәбиәтте лә белмәй сыға. Ундайҙарға шундай теләк: исмаһам, башҡорт һәм рус телдәрендә грамоталы итеп яҙырға булһа ла өйрәнеп сыҡһын ине улар мәктәптән. Грамоталылыҡ - ул уҡый белеү һәм дөрөҫ яҙыу ғына түгел, әлбиттә. Киң мәғәнәлә ул шул уҡ мәҙәнилек күрһәткесе тип тә әйтергә булалыр. Мәҫәлән, тарихты, бигерәк тә үҙе йәшәгән төбәктең, туған халҡының үткәнен белмәгән, әсә телендә һөйләшмәгән йә уны боҙоп, һүҙе һайын телмәрен алама һүгенеүҙәр менән "биҙәп" һөйләшкән кешене, ул уҡый-яҙа белгән хәлдә лә, нисек инде грамоталы тип әйтәһең?..

Бер-беренә айырылғыһыҙ бәйле тағы ике мөһим датаға иғтибар йүнәлтке килә. Халыҡ-ара озон ҡатламын һаҡлау **(18)** мәсьәләләре хаҡында беҙҙең "Киске Өфө" гәзитендә лә күп яҙылды, экологтар, биологтар, географтар, урман белгестәре менән фәһемле әңгәмәләр баҫылып тора. Озон ҡатламын һаҡлау мәсьәләһе халыҡ-ара кимәлдә ғалимдарҙы һәм зыялы йәмәғәтселек вәкилдәрен бик борсой. Уның менән Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы туҡтауһыҙ шөғөлләнә. Озон ҡатламын йоҡартып, юҡҡа сығарыусы зарарлы химик матдәләр ҡулланыуҙы тыйыу хаҡында Монреаль протоколына ҡул ҡуйылған көндө БМО халыҡ-ара иҫтәлекле көн тип иғлан итә. Был ойошма тарафынан шулай уҡ углекислый газ бүленеп сығыуҙарҙы ла кәметеүсе саралар күрелә. Һәм, әлбиттә, еребеҙҙең йәшел ҡалҡаны - урмандарыбыҙ ҙа озон ҡатламын һаҡлауҙа ҙур әһәмиәткә эйә. Бына шуға ла Урман эшселәре көнө **(20)** тигән һөнәри байрамды "Урман хужалығы эшсәндәре" йәки "Урман көнө" тип кенә алыу дөрөҫ булыр һымаҡ, сөнки элекке атама бөгөн көнүҙәк булыуҙан туҡтаны: ул көн элек-электән урман ҡырҡыусылар (дөрөҫөрәге, ҡырыусылар) көнө булып иҫәпләнде. Ә урман хужалыҡтары уларҙан тороп ҡалған яланғас диләнкәләр урынына йәш үҫентеләр ултыртыу, урманды һаҡлау эштәре менән шөғөлләнде. Әлбиттә, уларҙың да төрлөһө булды. "Урман шаулап үҫә, лесник һатып эсә" тигән юлдар халыҡ араһында тикмәгә таралманы бит (намыҫлы лесниктар ғәфү итһен). Ә Башҡортостан урмандары һаман ҡырыла: аяуһыҙ ҡырҡылып, шалҡандай ағастарыбыҙ йөк-йөк ситкә оҙатыла. Урмандарыбыҙ хәҙер халыҡ байлығы түгел, ә уны ярты быуатҡа арендаға алып, аҡса һуғыусы эшҡыуарҙар ҡулында. Тиҙҙән хатта унда иркенләп йөрөп, еләк-емеш, бәшмәк-фәлән йыйыуы ла мөмкин булмаясаҡ, тиҙәр. Яңыраҡ үҙәк матбуғатта яҙылыуынса, Рәсәйҙә әҙерләнгән ағастың 15 проценты законһыҙ ҡырҡыла. Ҡайһы бер урындарҙа урмандың санитар торошон күҙәткән органдарға ришүәт биреп, бына тигән ағастар "сирле, серегән" ағас сифатында ҡырҡыла икән. Иркутск өлкәһенең урман министры С.Шеверда тәбиғи заказниктағы 120 га урманды "ҡуныҙ эйәләшкән" ағастар рәүешендә ҡырҡырға булышлыҡ итеп, 750 млн һум зыян ҡылған. Ул әҙәмде суд хөкөмө көтә, ләкин әле тотолмаған бурҙар - "ике аяҡлы" ҡуныҙҙар иҫәпһеҙ-һанһыҙ. Ә бына Алыҫ Көнсығыштағы реликт ағаслы тайга урмандарын һатып алып та, урлап та кинәнеүсе Ҡытай үҙ ҡалҡанын нисек һаҡлай! Уларҙың хөкүмәте тарафынан ағастарҙы сәнәғәт ҡырҡыуы тыйыла, ә ағас ултыртыу өсөн йыл һайын миллиондарса аҡса күсерелә. Ә беҙҙең календарҙа билдәләнгән иҫтәлекле көндәрҙең һәр береһендә - байрам урынына проблема...

Был айҙа тағы ла Рәсәй гвардияһы көнө **(2)**, Терроризм менән көрәш буйынса теләктәшлек **(3)**, Халыҡ-ара шәфҡәтлелек **(5)**, Нефть һәм газ сәнәғәте эшсәндәре **(6)**, Рәсәйҙең хәрби дан көнө. М.И. Кутузов командалығындағы рус армияһының француз яуына ҡаршы Бородино һуғышы көнө **(8 сентябрь 1812)**, Финансист, Журналистарҙың халыҡ-ара теләктәшлек **(8)**, Халыҡ-ара матурлыҡ **(9)**, Программист, Бөтөн донъя тәүге медицина ярҙамы күрһәтеү **(12)**, Танкист, Бөтөн донъя торна **(13)**, Халыҡ-ара демократия, Салауат районында Салауат Юлаевтың музейы асылыуға 55 йыл тулған көн **(15 сентябрь 1965)**, "Смайлик"тың тыуған көнө **(19)**, Халыҡ-ара тыныслыҡ **(21)**, Бөтөн донъя автомобилһеҙ көн **(22)**, Тәрбиәселәр һәм мәктәпкәсә бөтә хеҙмәткәрҙәр, Машина төҙөүселәр, Бөтөн донъя туризм **(27)**, Бөтөн донъя диңгеҙ **(28)**, Бөтөн донъя йөрәк **(29)**, Рәсәйҙә Интернет **(30)** көндәре билдәләнә.

**Һарысайҙа тыуғандар:**

**3 -** режиссер, фольклор буйынса белгес-консультант, Сибай ҡалаһында сәсәндәр мәктәбе ойоштороусы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Асия Ғәйнуллинаға - 65 йәш** (1955).

**15 -** шағирә, 1967-1975 йылдарҙа "Башҡортостан ҡыҙы" журналының баш мөхәррире, Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге премия лауреаты, "Почет билдәһе" ордены кавалеры **Кәтибә Кинйәбулатованың тыуыуына - 100 йыл** (1920 - 2012).

**20 -** эколог, БР Төбәк тикшеренеүҙәр институты директоры, Рәсәй тәбиғи фәндәр академияһы ағза-корреспонденты, биология фәндәре докторы, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Йәлил Һөйөндөковҡа - 60 йәш** (1960).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй мәғариф министрлығы яңы уҡыу йылын 1 октябргә күсермәйәсәк, тип хәбәр итә "РИА Новости". Ведомствола илдең һәр төбәгендә уҡыусыларҙың һәм уҡытыусыларҙың хәүефһеҙлеге буйынса әҙерлек эштәре үткәрелде, дәрестәр 1 сентябрҙән башлана, тип билдәләйҙәр. Мәктәптәрҙә күп кеше йыйылған саралар ойошторолмаясаҡ, температура үлсәү, дезинфекция һәм уҡыусыларҙы бер бүлмәнән икенсеһенә күсереп уҡытыуҙы сикләү мотлаҡ.

✓Әбйәлил районы Ташбулат ауылында "Ҡарабалыҡты" мәҙәниәт һәм ял итеү паркы барлыҡҡа киләсәк. Парк "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проекты һәм "Уңайлы ҡала мөхитен формалаштырыу" төбәк проекты сиктәрендә төҙөлә. Парк ауылдың ҡап уртаһында эшләнә, әле эшселәр йәйәүлеләр өсөн юлдар һалыуға тотонған. Парктың тирә-яғын кәртәләп алыу, яҡтылыҡ үткәреү, ағастар ултыртыу, эскәмйәләр һәм сәхнә урынлаштырыу ҡаралған. Эштәр август аҙағына тамамланырға тейеш.

✓Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылында яңы мәктәп төҙөлә. Әле иҫке мәктәп һүтеп ташланған. 2021 йылдың икенсе яртыһына тиклем 4 ҡатлы, 8 мең кв.м. майҙанлыҡ, 375 урынлыҡ бина һалынасаҡ. Шуға тиклем ауыл балаларын Сибай ҡалаһына уҡырға йөрөтәсәктәр.

✓"Йәшел Башҡортостан" экологик акцияһы 19 сентябрҙә үтәсәк. Шуға бәйле БР Экология министрлығы муниципалитет башлыҡтарына эре ағастар ултыртырлыҡ йәмәғәт һәм торлаҡ йорттар тирәһендә урындар билдәләргә, кәрәкле ҡорамалдар, техника менән тәьмин ителеште тикшерергә кәңәш бирә. "Йәшел Рәсәй" Бөтә Рәсәй экологик өмәһендә илдең 85 төбәге ҡатнаша, ағастар Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандар хөрмәтенә ултыртыла.

✓Башҡортостанда подъездарҙы комплекслы ремонтлау республика программаһы 20 процентҡа үтәлгән, тип хәбәр иттеләр Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығынан. Билдәләнеүенсә, проектты планға ярашлы ғәмәлгә ашырыуға пандемия ҡамасауланы - март аҙағында эштәрҙе туҡтатырға тура килде, июнь башынан улар яңынан тергеҙелде. Бөтә эш 1 октябргә тамамланырға тейеш. 2021 йылға исемлектә - 776 күп фатирлы йорттағы 2112 подъезд.

ҠЫҪҠАСА

# АҠСАҢ ЯНДА ҠАЛЫР

✓ **21 августа Рәсәйҙә туристарға путевка хаҡтарының бер өлөшөн кире ҡайтарып биреүҙе күҙаллаған эске туризмға ярҙам программаһы старт алды.** Был программа Рәсәйҙә туризмды әүҙемләштереүгә йүнәлтелә. "Коронавирус пандемияһы сәбәпле, күп илдәр хәүефһеҙлек тәьмин итеү маҡсатында туристар өсөн сиктәрен япты, - тип аңлатма бирҙе БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев. - Инфекция хәүефе һәм тышҡы сикләүҙәр фонында рәсәйҙәрҙең ил эсендәге иҫтәлекле тәбиғәт урындарына һәм курорттарына ҡыҙыҡһыныуы бермә-бер артты. Туристик юл сығымдарын өлөшләтә ҡаплау программаһы эске сәфәрҙәргә булған ҡыҙыҡһыныуҙарға булышлыҡ итәсәк". Программа шарттарына ярашлы, 21 августан 20 декабргә тиклемге ваҡытта программа партнерҙарына Рәсәйҙең теләһә ниндәй төбәгенә путевка һатып алған осраҡта сығымдарҙың бер өлөшө - 5 меңдән 15 мең һумға тиклем кире ҡайтарып бирелергә мөмкин. Компенсация алыу өсөн путевканы 21-28 августа һатып алыу мотлаҡ. Путевка һәм ҡунаҡханаға урынлашҡанда туроператорҙар йәки отелдәр сайтында "Мир" картаһы менән иҫәпләшергә кәрәк.

✓ **Тәүге сиректә Өфө мәктәптәрендә уҡыусыларҙы тақта янына сығарып яуап бирҙереү тыйыла. Ошо хаҡта баш ҡала башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова бәйән итте.** Уның һүҙҙәренсә, башланасаҡ уҡыу йылында 126 мең уҡыусы, шул иҫәптән 14 мең беренсе класс уҡыусыһы мәктәптәргә барасаҡ. Уҡыусыларҙың таралыбыраҡ йөрөүен тәьмин итеү, балалар һәм өлкәндәрҙең бер урында өймәкләшеүен булдырмаҫ өсөн уҡыу учреждениеларына бөтөн инеү урындары ла, шул иҫәптән запас ишектәр ҙә, асыҡ буласаҡ. Дистанция һаҡлау уңайлыҡтары булдырыу өсөн мәктәптәрҙә һыҙаттар билдәләнгән. Мәктәптәр эсендә балаларҙың хәрәкәт маршруттары схемаһына ҡарап, төҫлө билдәләр менән йүнәлештәр күрһәтелгән. "Дәрестәр расписаниеһы төрлө класс уҡыусыларының аралашыуын мөмкин тиклем кәметеү һәм уларҙың тәнәфестәрҙә, ашханаға барғанда осрашыуҙарын киҫәтерлек итеп төҙөлә. Дәрес оҙайлығы - 35 минут. Дөйөм мәктәп күләмендә масса-саралар үткәрелмәйәсәк", - тип һөйләне А.Сөләймәнова.

✓ **Башҡортостанда ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәргә ярҙам саралары арта. Башҡортостан Хөкүмәтенең бер юлы биш ҡарарына үҙгәрештәр пакеты индерелә.** Был турала Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фазрахманов хәбәр итте. Мәҫәлән, ит һәм һөт малсылығын, һарыҡсылыкты үҫтереүҙе дәртләндереү маҡсатарында субсидия коэффициенттары 1,2 тапҡырға арттырыласаҡ. Ауыл хужалығының нәҫел малдары, асыҡлабыраҡ әйткәндә, бал ҡорттары, эре баш мал үрсетеү маҡсатында үгеҙҙәр эмбрионы һәм орлоҡтары һатып алыуға тотонолған сығымдарын ҡаплау ҡарала. Ташламалы федераль лизинг программалар буйынса ауыл хужалығы техникаһы һатып алғанда лизинг тауарын 12 айҙан һуң ғына һатып алыу шарттары аныҡлана.

КӨНАУАЗ



# ҠУШТАУ ЙӘШӘЙӘСӘК!

● **Рәсәй Тәбиғәт ресурстары министрлығы Ҡуштауҙа төбәк әһәмиәтендә һаҡланған биләмә булдырыу башланғысын хупланы.**

"22 августа Рәсәй Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың Ҡуштауҙа төбәк әһәмиәтендә һаҡланған тәбиғәт биләмәһе булдырыу тураһындағы тәҡдиме менән хатын алды. Министрлыҡ был йәһәттән булышлыҡ итергә әҙер", - тип белдерә "РИА Новости" РФ Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы һылтанмаһына таянып. Киләсәктә был һаҡланған биләмә федераль әһәмиәттә булдырылыуы ла ихтимал тип билдәләнә ведомствола.

● **Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров 24 августа Башҡортостан Хөкүмәтендә үткән оператив кәңәшмәлә Башҡортостандың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығына "Башҡортостан сода компанияһы"ның дәүләт пакетын алыу буйынса килешеүҙе тикшерергә ҡушты.** "БСК" менән бәйле ваҡиға етди борсолоу тыуҙыра. Ошо шарттарҙа мин был предприятие эҙмешы өсөн яуаплылыкты үҙебеҙгә алырға тейешлегебеҙ хаҡында ҡарар ҡабул иттем, сөнки акционерҙар - физик шәхестәр менән аңлашылмаусанлыҡ барлыҡҡа килде. Улар иҫәп тотҡан сеймал базаһы (Ҡуштау) юҡ. Артабан нисек үҫешергә икәнен үҙебеҙ уйларға тейешбеҙ"."Министрлыҡта юридик төркөм барлыҡҡа килде, тикшереү бара. Мәғлүмәт күләме бик ҙур, күп документтарҙы өйрәнергә кәрәк. Проблеманы хәл итеү варианттарын тиҙ арала бирербеҙ", - тине Наталья Полянская.

● **Ҡуштау буйынса ҡарарға яуап итеп, "БСК" Башҡортостан Хөкүмәтенә үҙенең дәғүәләрен ҡуя башланы.** "Башҡортостан сода компанияһы" етештереү күләмен ҡыҫҡартырға, хеҙмәтсәндәрҙе эштән ебәрергә һәм быйыл Башҡортостандың социаль маҡсатлы программалары фондына 600 миллион һум түләп еткермәҫкә ниәтләй. Быға яуап итеп, Башҡортостан сәнәғәт министры Александр Шельдяев шулай тип билдәләне: "Беҙҙә БСК-ның проблемаһын хәл итерлек, сеймалдың альтернатив сығанағын нисек эшләү мөмкинлеге бар. Шуға күрә БСК-ның топ-менеджментына шантажды туктатырға тәҡдим итәбеҙ. Беҙҙенсә, БСК һөҙөмтәле эшләй ала һәм эшселәр һанын ҡыҫҡартмаҫҡа ла була. Бында эш - акционерҙарҙың килем менән бүлешергә теләмәүендә. Беҙ предприятиеның сығымын анализланыҡ һәм маҡсатһыҙ тотонолған сығымдарҙы асыҡланыҡ..."

● **"Башҡортостан сода компанияһы"на бик күп эҙбиз ятҡылыҡтары тәҡдим иттек, ләкин предприятие етәкселәрен быларҙың бер варианты ла ҡәнәғәтләндермәне, - тине күп йылдар геология хеҙмәтендә етәксе булып эшләгән Башҡортостан Башлығы кәңәшсеһе Рәсих Хәмитов "Башинформ"да журналистар менән осрашыуҙа.** Уның билдәләүенсә, әле Шахтауҙағы запас та байтаҡ, 1994 йылда Геология буйынса дәүләт комитеты Шахтауҙың аҫҡы өлөшөндә 127 метр тәрәнлектә разведка эштәре үткәргән. Экспертизалар ундағы запастың 200 миллион тонна тәшкил итеүен раҫлаған. Өҫкө өлөштә тағы шул хәтлем запас барлығы асыҡланған. Ләкин предприятиеның яңы етәкселәре был эштең күп сығымлы булыуын, сеймалды һыуһыҙландырыуҙың ҡиммәткә төшөүен күҙҙә тотоп, башҡа эҙбиз ятҡылыҡтары эҙләүҙе талап иткән. Уларҙың талабына яуап итеп, предприятиеға башҡа ятҡылыҡтар тәҡдим ителгән, ләкин БСК етәкселеге уларҙың алыҫлығын сәбәп итеп, бер вариантты ла ҡабул итмәгән.

**"БАШИНФОРМ" материалдарынан.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

**Рәсәй Президенты Владимир Путин тура эфирҙа үткән ил Хөкүмәте агзалары менән кәңәшмә барышында башҡорт шихандарына бәйле ваҡиғалар тураһында үҙ фекерен белдереп, БСК тапҡан аҡса төбәкте үҫтереүгә инвестицияланмай, тип билдәләне.**



- Халыҡты эш урыны мәсьәләһе борсой, әлбиттә, ләкин был ғына түгел. Рухи байлыҡ, тәбиғәт, тирәяҡ мөхитте һаҡлауға бәйле мәсьәләләр ҙә борсой уларҙы. "Башҡортостан сода компанияһы"ның контроль пакеты айырым шәхестәрҙеке. Компания тарафынан эшләп алынған аҡсалар үҫешкә инвестицияланмай тиерлек, төбәктә ҡалмай. Былтыр, 45 миллиард һумлыҡ дөйөм төшөм алынһа ла, инвестиция маҡсаттарына 2,5 миллиард һум ғына бүленгән. Аҡсалар ҡайҙа? Офшорҙарҙа. 2018 йылда дивиденд 12,3 миллиард һум булған - был саф табыштан 106 процент тәшкил итә. 2019 йылда иһә саф табыштан 107 процент тәшкил иткән. Аҡсалар ҡайһы бер акционерҙар йәшәгән урындарға, Кипрҙағы иҫәптәргә, Францияға, Швейцарияға китә. Ҡайҙа теләйһең, шунда йәшәргә мөмкин, әлбиттә, беҙ иркеле ил. Ләкин һеҙ Рәсәйҙә аҡса эшләйһегеҙ икән, үҙ предприятиеларығыҙҙа эшләгән кешеләр тураһында, яңы эш урындары булдырыу тураһында уйларға кәрәк. Бындай хәлдәргә, ғөмүмән, иғтибарҙы көсәйтергә кәрәк. Контролһеҙ-ниһеҙ аҡса ағыуы был - бына шундай күнелһеҙ күренеш", - тине Президент.

Бынан тыш, ул Рәсәй Хөкүмәтенә Башҡортостан етәкселеге менән берлектә был хәл менән шөғөлләнергә, шулай уҡ прокуратурага дәүләт пакетының юҡҡа сығыуына сәбәпсе булған килешеүҙең законлылығын тикшерергә ҡушты.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә хакимиәт башлығы Өлфәт Мостафин ҡала тәьминәте ойошмаларына 1 сентябргә торлаҡ йорттар һәм мәктәптәргә йылы һыу бирергә ҡушты һәм коронавирус пандемияһы һәм миҙгелле грипп ауырыуҙары сәбәпле ҡаланың социаль учреждениеларына сентябрь уртаһында уҡ йылылыҡ бирелеүе мөмкин, тип хәбәр итте. Шулай уҡ медицина учреждениелары урынлашҡан торлаҡ йорттарға ла йылылыҡ иртәрәк биреләсәк.

✓29 августан Өфөлә көҙгө ауыл хужалығы йәрминкәләре башлана. Йәрминкә 12 традицион майҙанда һәм фермерҙарҙың даими йәрминкәһе өсөн тәғәйенләнгән 6 урында ойошторола. Ял көндәрендә уҙғарылған ауыл хужалығы йәрминкәләре 27 декабргә тиклем үтәсәк.

✓Өфөлә 2631 автобус, 134 троллейбус һәм 85 трамвай пассажирҙар ташый. Бөтә йәмәғәт транспортында ла пассажирҙарға шәхси хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре тураһында белдереүҙәр эленгән, водителдәр һәм кондукторҙар ҙа быларҙы мотлаҡ үтәргә тейеш. Шулай уҡ ҡараңғыла юл хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатында 30 октябргә тиклем йәйәүлеләр үткәүелдәре эргәһенә 99, юлтранспорт осраҡтары йыш теркәлгән урындарҙа 98 консоль тибындағы светодиод яҡтыртҡыс һәм хәрәкәт датчиктары булған юл тамғалары ҡуйыласаҡ.

✓Өфөлә Brilliant Talents урам бейеүҙәре буйынса балалар һәм үҫмерҙәр ижады халыҡ-ара конкурс-фестивале онлайн форматта тәүге тапҡыр уҙасаҡ. Конкурста hip-hop, vogue, house, waacking, breakdance, electro, popping, krump, locking, dancehall номинациялары буйынса 5 йәштән алып балалар ҡатнаша ала. Бының өсөн ғариза тултырырға һәм сығышыңды видеоға төшөрөп һалырға кәрәк. Ғаризалар 2020 йылдың 11 октябренә тиклем ҡабул ителә. Уның сиктәрендә ҡатнашыусыларға оҫталыҡ дәрестәре һәм түңәрәк ҡорҙар ҙа ойоштороласаҡ.

✓Өфөлә 24-31 августа тиклем "Йәйәүле" юл-транспорт фажиғәһен иҫкәртеү операцияһы уҙҙы. Өфө ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре ҡала халҡын юл ҡағиҙәләрен боҙмаҫҡа саҡырҙы. Ведомство мәғлүмәттәренә ярашлы, һуңғы 7 айҙа Өфөлә йәйәүлеләрҙе тапатыуҙың 268 осрағы теркәлгән, һөҙөмтәлә 12 кеше һәләк булған, тағы ла 269 кеше йәрәхәттәр алған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Алда беҙҙә ябай булмаған һынауҙар көтә. Йөҙәрләгән мең бала ябыҡ биналарға киләсәк. Беҙҙә тик тәртип кенә ҡотҡарасаҡ. Уҡыусылар менән бергә һеҙҙең дә бик үк ҡатмарлы булмаған хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәүегеҙ шарт.***



МӘҒАРИФ

**Ошо көндәрҙә баш ҡалала республика педагогтарының август кәңәшмәһе булып үтте. Кәңәшмәлә 9 фекер алышыу майҙансығы эшләне, 2 мeңдән ашыу кеше видеобәйләнеш буйынса ҡатнашты. Кәңәшмәлә цифрлы белем биреү мөхите маҡсатлы моделен индереү, балаларға өҫтәмә белем биреүҙең технологияһы һәм йөкмәткеһен яңыртыу, уҡыусыларҙың хәүефһеҙлеге һәм дистанцияла уҡыған осорҙа психологик сәләмәтлеге, белем биреүҙең ике һәм күп теллелеге шарттарында Башҡортостандың туған һәм дәүләт телдәрен үҫтереү кеүек көнүҙәк темалар күтәрелде.**

# ВАҠЫТЛЫСА ҒЫНА...



## ситтән тороп уҡыу һәм уҡытыуҙар

Рәсәйҙең күп төбәктәре өсөн актуаль булған туған телдәрҙе һәм дәүләт телдәрен уҡытыу мәсьәләһе күтәрелгән майҙансыҡта Саха-Яҡут һәм Тыва республикалары, Мәскәү белгестәре лә тәжрибә уртаҡлашты. "Һәр телде өйрәнеү икенсе берәй телде аңлау һәм өйрәнеүгә этәргес булырға тейеш, тип иҫәпләй Герцен исемендәге РДПУ профессоры Елизавета Хамраева. "Һайлап алыу мөмкинлеге ҡуптәрҙе ауыр хәлгә ҡуйҙы, туған теле икәү булған кеше ҡайһыныһына өҫтөнлөк бирергә тейеш? Эйе, туған тел бөрәү генә тиһәләр ҙә, әгәр ҙә атаәсәнең телдәре төрлө икән, балаға ҡайһыныһын төплөрәк өйрәтеүҙе һайлау кәрәк һуң? Бынан тыш, мәктәптә туған телде уҡытыуға 1 сәғәт бүленеүе лә фекер алышыуҙы талап итә. Туған телде уҡытыу яйға һалынған төбәктәр өсөн 1 сәғәт аҙ, ә теле тарихта ҡалған кешеләр өсөн был да кәрәк түгел. Донъя тәжрибәһенә күҙ һалырға, уҡытыу методикаһын яңыртырға кәрәк", - ти Елизавета Хамраева.

Билдәләнеүенсә, әлеге көндә Башҡортостанда йәмғеһе 1027 мәктәптә тиклем белем биреү учреждениеһында 244 950 бала тәрбиәләнә. Шуларҙың 454-ендә (был 43,6 процентты тәшкил итә) уҡытыу балаларҙың туған телендә алып барыла һәм унда 21 меңдән ашыу бала шөғөлләнә. Бынан тыш, туған телен белмәгән 20 меңдән ашыу бала өсөн 1057 туған телде өйрәтеү төркөмө эшләй. Был турала кәңәшмәнең туған телдәргә арналған фекер алышыу майҙансығында ҡатнашыусыларға БР Мәғарифты үҫтереү институтының мәктәпкәсә белем биреү кафедраһы доценты Зәкиә Нафиҡова мәғлүмәт еткерҙе һәм тәрбиә эше туған телдә алып барылған балалар баҡсаларын заманса техника, интерактив ҡоралдар менән тәьмин итеүҙе һораны. "Беҙгә мәктәпкәсә белем биреү усаҡтарында туған телде уҡытҡан һәм өйрәткән тәрбиәселәр һәм педагогтар араһында айырым республика конкурсы үткәреү кәрәк", - тип йомғаҡланы һүҙен Зәкиә Ғәлиәхмәт ҡыҙы.

Башҡортостан педагогтарының август кәңәшмәһенә йомғаҡ "Торатау" Конгресс-Холл бинаһында яһалды, унда республика Башлығы Радий Хәбиров, РФ Федераль йыйылышы Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитет рәйесе Лилиә Ғүмәрова, БР мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин, Рособрнадзор етәксеһе урынбаҫары Борис Чернышов, БР Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Андрей Назаров, БР Хөкүмәте Премьер министры урынбаҫары Фәнүр Йәғәфәров ҡатнашты. "Белем биреүҙең цифрлы үҙгәреше: традицион белем биреүҙең киләсәге һәм яңы мөмкинлектәре" темаһына арналған кәңәшмәлә мәғариф киләсәге тураһында һүҙ барҙы.

- Ул мәлдә һөҙөмтәле программа һәм тейешле методик тәжрибә булмауға ҡарамаҫтан, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә дистанцияла уҡытыуға күстеҙ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, көндән-көн онлайн дәрестәр һаның арттыра барҙығыҙ. Бының өсөн һеҙгә бик рәхмәтлемен, - тине кәңәшмәне асып Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Алда беҙҙе ябай булмаған һынауҙар көтә. Йөҙәрләгән мең балалар - мәктәпкәсә йәштәгеләрҙән алып студенттар, һәм 165 меңгә яҡын тәрбиәсе, уҡытыусы һәм башҡа хеҙмәткәрҙәр ябыҡ биналарға киләсәк, ауырыу көсәйеүенә әҙерләнергә тейешбеҙ. Беҙҙе тик тәртип кенә ҡотҡарасаҡ. Уҡыусылар менән бергә һеҙҙең дә бик үк ҡатмарлы булмаған хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәүегеҙ шарт.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ...

# СОВЕТ МАЙҘАНЫНДА...



**Өфөнөң Киров районы хакимиәтендә Совет майҙанын яңыртыу һәм шул территорияла заманса йәмәғәт урыны булдырыуға ҡағылышлы һорауҙар буйынса ҡала халҡы менән осрашыу ойошторолдо. Уны Киров районы хакимиәте башлығы Илвир Нурдәүләтов уҙғарҙы.**

Осрашыу барышында өфөләр төҙөкләндерелгән урында быға тиклем үҫеп ултырған ағастар ҡырҡып ташланыуы сәбәпле борсолоуҙары тураһында һөйләне. Муниципалитет өсөн төҙөкләндереү эштәре һәм инфраструктураны яҡшыртыу барышында ҡаланың йәшелләген һаҡлап ҡалыу өҫтөнлөклө. Өфөнөң баш архитекторы Олег Байдин әйтеүенсә, Совет майҙанында эштәр башланғанда бында үҫкән ағастар биологтар тарафынан тикшерелгән, иҫке һәм ауырыуҙары асыҡланған. Шуға күрә улар урынына яңы ҙур булып үҫә торған ағастар ултыртып, территорияны йәшелләндереү ҡаралған. Артабан был яңыртылаcаҡ урындың башҡа аспекттары буйынса һөҙөмтәле фекер алышыу ойошторолдо. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, проектҡа ярашлы Совет майҙанында Миңлеғәли Шаймораtовҡа һәйкәл ҡуйыласаҡ, уның алдында төҫлө, музыкаль "коро" фонтан эшләнә. Майҙанды төҙөкләндереләләр һәм яңы ағастар ултыртыласаҡ. Йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән юл боллард - юлды автоматик ябыусы бағаналар менән сикләнәсәк. Пушкин урамы яғынан уларҙы кәрәк саҡта төшөрөп тә буласаҡ. Төҙөкләндереү барышында шулай уҡ майҙан, Совет һәм Пушкин урамдарындағы юлдар ҙа яңыртыла. Урамға терәлеп торған скверҙарҙы ла матурлайҙар (1-се музыкаль мәктәп һәм М.Аҡмулла исемендәге БДПУ алдындағылары). Унда эскәмйәләр, урналар, фонарҙар ҡуйыла.

ҠЫҪҠАСА

# БУРЫСЫНДЫ ТҮЛӘ

**✓Башҡортостанда ташлама менән файҙаланыусы 92 мең кешенең торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн бурысы бар һәм улар сентябрҙә айлыҡ компенсация алмаясаҡ, тип хәбәр итә БР Хөкүмәте премьер-министр урынбаҫары Ленара Иванова.** Уның әйтеүенсә, ташлама менән файҙаланыусыларҙың 42 процентының ресурс менән тәьмин итеүсе ойошмаларға биш һәм унан күберәк ай буйына түләнмәгән бурыстары бар. "Ресурс ойошмалары тарафынан торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр менән бәйләнеш порталына тейешле мәғлүмәттәрҙе ваҡытында индермәү, дөрөҫ йә тулы булмаған мәғлүмәт биреү граждандарға Берҙәм компенсация (ЕДК) аҡсаһын да ваҡытында түләү мөмкинлеген бирмәй",- тине ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры. Республикала торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә айлыҡ аҡсалата компенсация түләүҙең яңы тәртибе ошо йылдың 1 июленән ғәмәлдә.

**✓Республика райондары һәм ҡалаларында йорт алды территорияларын һәм подъездарын, урамдарҙы, квартал араларын һәм тротуарҙарҙы дезинфекциялау дауам итә. Коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймау өсөн ошо маҡсатта эшмәкәрлек алып барған идара итеү компанияларына һәм ойошмаларына бюджеттан аҡса бүленә.** "Башфармация" аша муниципалитеттарға 15 мең битлек, комбинезон, бирсәткә, 10 мең пар итек һәм күҙлек, 2 мең һиптергес һәм 16 мең литр дезинфекция сараһы бүленгән. Ул муниципалитеттарҙың дезинфекциялау ихтыяжын йыл һуңынаса ҡәнәғәтләндерергә етә, сөнки шыйыҡлатып ҡулланғанда, унан 15 миллион литр дезинфекция сараһы алырға була. Башҡортостан Республикаһының "Госжилнадзор" ойошмаһы йорттарҙы дезинфекциялауҙы даими күҙәтеп тора. Шулай уҡ республиканың Торлаҡ-коммуналь хужалығы министрлығы вәкилдәре лә тикшереүҙәр үткәрә. Көн һайын республика буйынса 2 меңдән ашыу ихата һәм 15 меңдән ашыу подъезд дезинфекциялана.

**✓14 августан пассажирҙарға ҡала автобус транспортында йөрөү һәм багаж өсөн түләү хаҡы берҙәм транспорт картаһы менән иҫәпләшеүселәр өсөн 20 һумдан 23 һумға арттырылды.** Ҡулаҡса йә банк карталары менән түләүселәргә йөрөү хаҡы элекке 25 унынына 28 һум тәшкил итәсәк. Тиҙ йөрөүсе һәм экспресс режимда эшләүсе автобустарҙа бер яҡҡа юл хаҡы 34 һум буласаҡ. Был хаҡтар ошо йылдың 31 декабренә тиклем ғәмәлдә булһа, 2021 йылдың 1 ғинуарынан билет хаҡы тағы ла бер һумға артасаҡ. Ҡала яңы һәм муниципаль-ара маршруттар буйынса бер пассажир өсөн бер саҡрымға билет хаҡы элеккеcә - 2,50 һум ҡалһа, багаж өсөн бер урын - 20 һум. Өфө мэрияһында йәмәғәт транспортында юл хаҡтарының үҙгәреүен пандемия менән бәйле пассажирҙар ағымы кәмеүе, яғыулыҡтың ҡиммәтләнеүе һәм иҫкергән транспорт саралары яңыртыу менән бәйле аңлаталар.

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Үт ҡыуығы

❖ Үт ҡыуығындағы таштарҙы бөтөрөргә ҡыяр һуты ярҙам итә. Ҡыяр һутын бер ай дауамында көн һайын яртышар литр эсергә кәрәк. Ҡыярҙан ике көнгә етәрлек һут әҙерләп, һыуыҡтыста һаҡлап эсергә була. Әммә тоҙ ҡушырға ярамай. Башта дауаланыу өсөн эсһәгеҙ, һуңынан үт ҡыуығында таш барлыҡҡа килеүен иҫкәртеү өсөн ҡулланырға. Операция талап итгән осраҡты ла өс йыл эсендә дауаларға була.

### Лимон

❖ Йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына бәйле ауырыуҙарҙы иҫкәртеү, ҡан тамырҙарын таҙартыу һәм йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн түбәндәге эсыл буйынса әҙерләнгән ҡатышманы йылына 2 тапҡыр ҡабул итергә кәрәк. Ғәҙәттә яҙ һәм көҙ дауаланалар. Дауаны әҙерләү өсөн 3 лимонды йыуып, ҡоротоп һөртөргә һәм ҡабығына таҙартылмаған көнбағыш майы һөртөргә. Шунан 200-әр грамм әстерхан сәтләүеге, йөҙөм, күрәгә, ҡара емеш (чернослив), 250 грамм бал, дарыуханала һатылған 1-әр һауыт гөлйемеш сиробы һәм энәлек төнәтмәһе кәрәк була. Емештәрҙе һәм лимонды ит турағыста ваҡлап, өҫтөнә бал, гөлйемеш сиробы һәм энәлек төнәтмәһе ҡойорға. Ҡатышманы яҡшы бутарға, ҡара быяланан эшләнгән һауыттарға һалырға. Ундай һауыт табылмаған осраҡта ябай банканы фольгаға төрөргә һәм һыуыҡтыста һаҡларға. 10 көндән шифалы ҡатышма әҙер була, уны көн һайын ас ҡарынға 1 ҡалаҡ ашарға. Әҙерләмә бөткәнсе дауаланырға.

### Быуын шеше

❖ Төрлө быуын шештәренән (артрит) мәрүәр сәскәһе (бузина), кесерткән япрағы, петрушка тамыры һәм тал ҡайырыһын тигеҙ миҡдарҙа алып, төнәтмә яһап эсергә була. 1 ҡалаҡ ваҡланған йыйылмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5 минут талғын утта тоторға, һыуытырға һәм һөҙөргә. Көнөнә ике стакан төнәтмә эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

***✓ 1 сентябрҙә Белем көнөнә арналған тантаналы сарала бөтә уҡыусылар ҙа ҡатнаша алмай. Традицион байрам тик беренсе синыф уҡыусылары һәм сығарылыш 9-сы, 11-се синыфтар өсөн генә үткәрелә.***



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Көньяҡ-көнбайышта теге йәки был кимәлдәге стилләштереү менән үҫемлек биҙәктәре өҫтөнлөк иткән. Күпселек осраҡта предмет формаһына яраҡлаштырылған ҡатмарлы орнаменталь композициялар булған. Һуғыштан һуңғы ун йыллыҡ эсендә көньяҡ-көнбайыш территорияһына барған сәнғәт белгестәре һәм энографтар боронғо әйберҙәрҙе күп осратҡан, һуңғы осорға ҡарағандары ла элекке традициялар эҙен һаҡлаған. Элмә теҙеменән контурлы орнаментлы ҡайыу өлгөләре айырылып торған: таҫтамал, салфетка, ҡулъяулыҡ, һирәк осраҡта стена һәм мейестең өҫкө яғын биҙәгән ҡорғандар. Музейҙарҙа аҡ туҡымала сигелгән әйберҙәр күп, бындай ҡайыуҙар һары һәм ҡыҙыл ерлектә лә башҡарылған. Үҫемлек орнаменты бик ныҡ стилләштерелгән. Япраҡтар кәкерсәктәр менән сиратлашып китә, һабаҡтары суҡтар менән барып бөтә. Таҫтамал остарында урынлашҡан гөлләмәләр йәки ҡыуаҡтар өҫтән йәки аҫтан талғын бөгөлөп торған сылбыр йәки ваҡ ҡыуыҡтар теҙмәһе формаһындағы ҡайма менән сикләнә һәм элмә һыҙаты менән уратып ҡуйыла. Рәссам Г.И. Мөхәмәтшин Дәүләкән районы Буранғол ауылында 1960 йылда төшөрөп алған аҡ салфетканың уртаһында эске яғына япраҡтар, емештәр һәм мөгөҙгә оҡшаш кәкерсәктәр, япраҡтар менән уратылған ҙур сәскәләрҙән торған тигеҙһеҙ оя биҙәктәр ҡайылған түңәрәк эшләнгән. Быларҙан тыш нәҙек ҡайма менән уратылған ерлектә мосолманлыҡ символдары - ай һәм йондоҙҙар сигелгән. Элмә һыҙаты ашъяулыҡтарҙың киң ҡаймаларын ҡайығанда ла ҡулланылған.



*Рис. Стр. 164. Һауыт-һаба салфеткалары (Дәүләкән районы Буранғол ауылы; Күгәрсен районы 1-се Юлдыбай ауылы). Г.И. Мөхәмәтшин һүрәте. 1960; 1958*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*МӘҒАРИФ*

# ВАҠЫТЛЫСА ҒЫНА...

## ситтән тороп уҡыу һәм уҡытыуҙар



**(Башы 5-се биттә).**

Әйткәндәй, мәктәптәрҙә санитар-эпидемиология талаптары үтәлешен медицина инспекторҙары тикшерәсәк. Был эш Башҡорт дәүләт медицина университеты һәм медицина колледждарының һуңғы курс студенттарына йөкмәтелә. Ә бына юғары уҡыу йорттары эшенә килгәндә, бакалавриат һәм магистратураның беренсе курс студенттары ғына дәрескә йөрөүе ҡаралған, ҡалғандар дистанцияла белем алыуын дауам итәсәк. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: быйыл Башҡортостан вуздарында бюджет урындары 1500-гә артҡан, 2021 йылға тағы ла 2 мең урын биреү ҡаралған. Коронавирус пандемияһы сәбәпле республиканың иҡтисади хәле шәптән булмаһа ла, быйыл 5 яңы мәктәп һәм 24 балалар баҡсаһы үҙ ишеген аса. Бынан тыш, быйыл Стәрлетамаҡ һәм Нефтекама ҡалаларында ике полилингваль мәктәп эшләй башлай.

- Донъя кимәлендәге Евразия фәнни-белем биреү үҙәген булдырыу беҙҙең юғары белем биреү өлкәһенең өмөтө, - тине сығышы һуңында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Был мәсьәләлә мин Рәсәй Президенты менән дә кәңәшләштем. Рәсәйҙең фән һәм юғары белем министры Валерий Фальков та Өфөгә килгәнендә беҙҙең вуздарҙың ҡаҙаныштарына һоҡланыуын белдергәйне. Шуға хәҙер беҙгә ошо юғары статусты алыу өсөн көрәшергә кәрәк.

Артабан кәңәшмәлә ҡатнашыусылар Рәсәйҙең мәғариф һәм фән министры Сергей Кравцовтың видео мөрәжәғәтен тыңланы. Ул күптәрҙе борсоған һорау - мәктәптәрҙе тулыһынса дистанцияла уҡытыуға күсереү тураһында ҡуйыртылған хәбәргә асыҡлыҡ индерҙе. "Тулыһынса дистанцион белем биреүгә күсеү мөмкин түгел. Мәктәп бер ҡасан да был аҙымға бармаясаҡ, - тип белдерҙе Сергей Сергеевич. - Бер ниндәй ҙә дистанциялағы дәрестәр традицион белем биреүҙе алмаштыра алмай, был өлкәләге бөтә эшләп табылғандар ни бары уға өҫтәлмә. Хәүефһеҙ видеокәңәшмә бәйләнеше, техник йыһаздар - барыһы ла традицион белем биреүгә ярҙам итеү маҡсатында эшләнә. Ауыл мәктәптәрен техник йыһазландырыу эшен атҡарып сығырға торабыҙ". Сергей Кравцов шулай уҡ белем усаҡтарында тәрбиә биреү милли өҫтөнлөккә әүерелеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм Рәсәй мәғариф министрлығы ҡарамағында Педагогия советы ойоштороласағы, унда илдең һәр төбәгенән берәр уҡытыусы ағза булып инәсәге тураһында әйтте.

Республика педагогтарының август кәңәшмәһендә БР мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин да үткән уҡыу йылы буйынса йомғаҡтар яһаны һәм киләһенә пландар менән уртаҡлашты: "Цифрлы белем биреү мөхите" проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә республиканың 101 мәктәбе кәрәкле ҡорамалдар аласаҡ. Бынан тыш, 2021 йылда һөнәри белем биреү усаҡтарында WorldSkills Russia талаптарына яуап биргән ҡорамаллы 67 заманса оҫтахана эшләнә. Яңы уҡыу йылында тәү сиратта балаларҙың һәм педагогтарҙың хәүефһеҙлеген, сәләмәтлеген һаҡлау мөһим. Был маҡсатта дезинфекция саралары һәм ҡорамалдарға Башҡортостан бюджетынан 184,5 миллион һум аҡса бүленде", - тине Айбулат Вәкил улы.

Республика педагогтарының август кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең халыҡ уҡытыусыһы Лиза Әһәҙуллинаның беренсе уҡытыусыға арналған һәйкәл асыу тураһындағы тәҡдимен хуплауын белдерҙе. Яҡын киләсәктә ул баш ҡаланы биҙәйәсәк һәм, моғайын да, беҙгә уҡытыусыларҙың 2020 йылда күрһәткән хеҙмәт ҡаҙаныштарын хәтерләтеп торор. Ә инде цифрлы белем биреү мөмкинлектәре киләсәктә уҡытыусыларҙы тулыһынса алмаштырасаҡ, тип яңғыраған күҙаллауҙар тәжрибәлә яраҡһыҙ булып сығыуын төбәк кенә түгел, ил кимәлендә лә яҡшы аңлайҙар. Республика педагогтарының быйылғы август кәңәшмәһендә был асыҡ сағылды.

### Теманы дауам итеп...

Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә республиканың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин коронавирус пандемияһы шарттарында белем биреү усаҡтарының яңы уҡыу йылына әҙерлеге тураһында һөйләне.

**Мәктәпкә бөтә кластар ҙа бара.** Быға тиклем республиканың бөтә белем усаҡтары эшмәкәрлеген ғәҙәти режимында башлай, тип әйтелгәйне. Әлеге көндә төбәктә 1310 дөйөм белем биреү ойошмаһында 520 176 бала уҡый.

**Тантана бөтәһе өсөн түгел.** 1 сентябрҙә Белем көнөнә арналған тантаналы сарала бөтә уҡыусылар ҙа ҡатнаша алмай. Традицион байрам тик беренсе синыф уҡыусылары һәм сығарылыш 9-сы, 11-се синыфтар өсөн генә үткәрелә. Яңы уҡыу йылында 55 мең бала 1-се синыфҡа бара.

**Яңы уҡыу йылы - яңы талаптар.** Коронавирус инфекцияһы таралыуын киҫәтеү өсөн мәктәптәрҙә түбәндәге талаптар үтәлергә тейеш:

- Һәр синыфҡа физик культура, физика, химия, информатика, технология дәрестәренән тыш, башҡа предметтарҙы уҡытыу өсөн айырым бүлмә тәғәйенләнә.
- Мәктәптә дәрес һәм тәнәфестәр теҙмәһе балалар коридорҙа бер-береһе менән тап килешмәҫлек итеп төҙөлә: бер синыф тәнәфестә саҡта ҡалғандары уҡый.
- Дәрестәр 5 минутҡа ҡыҫҡартыла.
- Уҡыусылар һәм уҡытыусылар айырым ишектәрҙән инеп сыға, учреждениеның запас ишектәренә тиклем асыҡ булырға тейеш.
- Мәктәптәге бөтә өлкән йәштәгеләр өсөн битлек кейеү - ҡәтғи талап.
- Мәктәпкә ингәндә бөтә уҡыусыларҙың температураһы тикшерелә.
- График буйынса синыф бүлмәһе һәм коридорҙарҙы елләтеү, уларҙы дезинфекция саралары менән таҙартыу - мотлаҡ.
- Балалар күпләп килгән урындарҙа - ашхана, спорт залы, коридорҙарҙа - һауа таҙартҡыс ҡорамалдар урынлаштырылырға тейеш.

**Бөтә студенттар ҙа көндөҙгө бүлектә уҡымай.** Республиканың ҡайһы бер студенттары быйыл дистанцияла белем аласаҡ. Уҡыу йорттарына колледждарҙың беренсе һәм һуңғы курстары, вуздарҙың бакалавриат һәм магистратуралағы беренсе курс студенттары ғына йөрөйәсәк. Башҡа курс студенттары 1 ноябргә тиклем өйҙән уҡый. Быйыл республика колледждарында 93,9 мең студент, юғары уҡыу йорттарында 97,9 мең йәш кеше белем аласаҡ.

**Балалар баҡсаһын бөтәһе лә аса.** 1 сентябрҙән республиканың барлыҡ мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары асыла. Быға тиклем тик дежур төркөмдәр генә эшләне. Башҡортостанда йәмғеһе 1027 балалар баҡсаһы бар, уларҙа 244950 бала йөрөй. Коронавирус инфекцияһы таралыуын киҫәтеү маҡсатында был учреждениеларҙа ла ҡәтғи санитар-эпидемиология талаптары үтәлергә тейеш:

- Ингәндә балаларҙың температураһы тикшерелә.
- Көн һайын бина бүлмәләре, уйынсыҡтар, уйын ҡорамалдары дезинфекция саралары менән еүешләп йыйыштырылырға тейеш, генераль йыйыштырыуҙы аҙнаһына бер тапҡырҙан да кәм үткәрмәҫкә, даими рәүештә ҡулдарҙы махсус антисептиктар менән эшкәртеү, һауаны таҙартыу һәм бүлмәләрҙе елләтеү атҡарылырға тейеш.
- Ашхана һәм аҙыҡ-түлек блоктары хеҙмәткәрҙәре мотлаҡ битлек һәм бирсәткәләр кейергә тейеш.
- Мөмкин булған тиклем төркөмдәге балалар һаны кәметелә.
- Төрлө төркөм балалары үҙ-ара аралашырға тейеш түгел, шул иҫәптән тышта уйнарға сыҡҡанда ла.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

**✓ Башҡорттар үҙҙәренең үҙаллы ханлыҡтарын иғлан итә, Күсем хан тоҡомонан булған Көсөк хан, Морат хан, Ибраһим хан, Ырыҫмөхәммәт хандар Башҡорт иле хакимдары итеп танылa.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЙЫЛАН ЫРЫУЫНАН,

## боронғо башҡорт затынан беҙ



Һөҙөмтәлә башҡорттар 7 йылға һуҙылған ҡаршылыҡ күрһәтеү хәрәкәтен башлап, ихтилалға күтәрелә. Тарихсылар белдереүенсә, ошо ихтилал башҡорт халҡы өсөн иң уңышлыларҙан һанала: алыш-ҡырылыштарҙа байтаҡ ил улдары, ҡаһарман башҡорт яугирҙары һәләк булһа ла, башҡорттар быға тиклем күрелмәгән һөҙөмтәгә өлгәшә, Иван Грозный заманынан ҡалған килешеү шарттары ҡайтанан тергеҙелә, башҡорт иле Россия империяһының ярым бойондороҡһоҙ бер өлөшө итеп танылa. Былдай статусты уҫаллығы менән дан алған Петр I бирмәгән хәлдә лә, ул батша хакимиәтен башҡорт халҡы күтәргән шарттар менән риза булырға мәжбүр итә. Әлбиттә, был еңеү еңел генә бирелмәй.

**Бына ул саҡтағы ваҡиғалар хроникаһы.**

**1707 йылда** Йөрәктау янында П. Хохловтың 1300 кешенән торған Өфө полкы Күсем Түләкәев етәкселегендәге ихтилалсылар (аҫаба башҡорттар, мишәрҙәр, татарҙар, сыуаштар, сирмештәрҙән ойошторолған яугирҙар отряды) менән 10 көн дауамында барған бәрелештәрҙә тар-мар ителә, 400 һалдат әсирлеккә алына, байтағы һәләк була, ә Хохлов үҙенең ярандары менән Табын ҡәлғәһенә ҡасып китә.

Ошо уҡ йылдың октябрь айында С. Аристов һәм И Риддерҙың драгун һәм һалдат полктарына ҡаршы һуғыштар уңышлы бара, улар башҡорттар йәшәгән территорияға бер нисек тә баҫып инә алмай. Ә тархан Алдар Иҫәкәев етәкселегендәге башҡорт ихтилалсылары хатта Ҡаҙанды штурмлау маҡсатында көнбайышҡа табан хәрәкәт итеп, байтаҡ ҡына ауылдарҙы һәм ҡәлғәләрҙе ҡулға төшөрә. Ошо легендар башҡорт батыры яугирҙары рәттәрендә Йылан олоҫоноң арҙаҡлы юлбашсылары Исмәғил мулла (3 мең кешелек отряды менән) һәм Мәскәү Уразаев (2 мең яугир) ҡурҡыу белмәй алыша. Йылан башҡорттарынан Күсем һәм Уразай батырҙар дан ҡаҙана. Кама аша сығып, ихтилалсылар Алабуға, Минзәлә, Сарапул ҡәлғәләрен ҡамап ала, Чистополь ауылын, Илбахты монастырын, Зәй ҡәлғәһен штрумлап ала. 1708 йылдың 1 ғинуарында Ҡаҙан ҡалаһына хәүефле хәбәрҙәр килә: "...воры башкирцы пригород Заинск выжгли и людей порубили и идут большим собранием и под Новошешминск".

**1709 йылда** Петр батшаға хатында Ҡаҙан губернаторы П.М. Апраксин ихтилалсы башҡорттар тураһында ошолай тип яҙған: "О тех башкирцах доношу тебе, государю: народ их проклятый, многочисленный и военный да безглавный, никаких над собою начал, хотя б так, как на Дону, подобно атаманы, и таких не имеют".

Батша хакимиәте, Петр I сит илдәр менән ҡатмарлы һуғыштар алып барғанлыҡтан, башҡорт ихтилалдарын баҫтыра алмай. Ошо осорҙа башҡорттар Мәскәүгә яһаҡ түләүҙән дә ҡотола. Башҡорттар үҙҙәренең үҙаллы ханлыҡтарын иғлан итә, Күсем хан тоҡомонан булған Көсөк хан, Морат хан, Ибраһим хан, Ырыҫмөхәммәт хандар Башҡорт иле хакимдары итеп танылa. Тап ошо осорҙа рәсми документтарҙа Башҡорт Урҙаһы (Башкирская Орда) термины ҡулланыла башлай.

**1727 йылда** Петр Беренсененең үсмер ейәне Петр II коронацияланa, Башҡорт иленең 4 даруғаһынан ошо тантанала 31 кешенән торған делегация ҡатнаша. Был ваҡиға башҡорттарҙың ҡайтанан рус подданствоһын таныуы итеп ҡабул ителә. Башҡорт хәлдәрен ҡатмарландырмау маҡсатында 1728 йылда Петр II махсус указға ҡул ҡуя, был сәйәси аҙым йәш батша исеменән идара итеүсе Юғары Совет тарафынан башҡарыла. Ошо указға ярашлы, Өфө провинцияһы Ҡаҙан губернаһынан айырылып, Сенаттың айырым ведомствоһы ҡарамағына тапшырыла. Ошо указда Йылан олоҫоноң арҙаҡлы башҡорто Йәркәй Ейәнсуриндың исеме телгә алына: "Указали Мы, по челобитью присланных от вас выборных челобитчиков, башкирцов Яркея Янчурина с товарищи, в помянутую [Уфимскую] провинцию послать воеводу, Нашего бригадира Петра Бутурлина и быть той провинции в особливом ведомстве Нашего Сената, и о всяких делах писать ему и требовать Нашего указа от того Сената, а Казанскому губернатору той провинции не ведать". Яңы воевода Петр Бутурлинға айырым наказ бирелә: "башкирцам и прочим иноверцам никакого озлобления и обид и налог отнюдь никому никаких не чинить". Башҡорттар өсөн элекке килешеүҙәрҙә ҡаралған шарттар тергеҙелә: "... и во всем поступать по данным вам от Предков Наших Великих Государей жалованным грамотам".

Пугачев етәкселегендәге яуҙарҙа Салауат Юлаев отрядтарында Йылан олоҫонан сыҡҡан күренекле етәкселәрҙә ҡатнаша: Йәркәй Ейәнсуриндың ейәне, старшина Бикҡол Нурбәкин (хәҙерге Илеш районы Йәркәй ауылынан), Мөслим Айытов, Сөләймән Миңлеғолов, Балтас Сәйетов (Борай районы Туҡран ауылынан), Әптекәй Мәскәүев (Илеш районы Мәскәү ауылынан), Моратшах Сыртланов, Миңдекәй Әбделғазин (Туймазы районы Бишенде ауылынан), тархан Солтанғол Тименәйев (Шаран районы Тархан ауылынан).

Хәҙерге ваҡытта йылан ырыуы башҡорттарының вариҫтары Башҡортостандың Бишбүләк, Борай, Дүртөйлө, Йәрмәкәй, Илеш, Ҡалтасы, Туймазы, Саҡмағош, Шаран һәм Благовар райондары ауылдарында йәшәй. Йылан башҡорттарының боронғо ҡәрҙәштәре - ҡайлыларҙың бик бәләкәй генә өлөшө айырым аймаҡтар рәүешендә юрматы башҡорттары составына ҡушылып киткән.

2013 йылда Рәсәй медицина фәндәре академияһының Медик-генетик ғилми үҙәге һәм Башҡортостандың Гуманитар тикшеренеүҙәр институты ғалимдары тарафынан Борай һәм Йәрмәкәй районында йәшәүсе йылан ырыуы вәкилдәренең ниндәй гаплотөркөмдәргә ҡарауы асыҡланды. Был ырыу кешеләрендә ике гаплотөркөм өҫтөнлөк итә: R1b-M73 һәм N1c-M178.

Күрһәтелгән гаплотөркөмдөң беренсеһе тамъян һәм меркет ырыуҙарына ла хас булһа, икенсеһе мең, түңгәүер, уран, үҫәргәндәрҙә йышыраҡ осрай.

1917 йылғы Бөтөн Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу материалдарына ярашлы, XX быуат башында Йылан олоҫо территорияһына ҡараған 136 ауылда 62 мең тирәһе аҫаба башҡорт йәшәгәне билдәле. Башҡортостандың хәҙерге Бишбүләк районында йылан ырыуы башҡорттары нигеҙләгән 3, Йәрмәкәйҙә - 19, Туймазыла - 30, Шаранда - 11, Саҡмағошта - 15, Илештә - 18, Дүртөйлөлә - 12, Борайҙа - 25, Ҡалтасыла 2 ауыл булған. 1859 йылғы X ревизия материалдарында хәҙерге Татарстанға ҡараған территорияла Исерғәп, Баулы, Ҡыҙыл Яр, Тумбарлы ауылдарында шулай уҡ йылан ырыуы башҡорттары көн иткән.

Бөгөн Көнбайыш Башҡортостанда ошо данлы йылан ырыуы башҡорттарының вариҫтары йәшәй. Беҙгә билдәле булған йылан башҡорттары ауылдары исемлеген һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.

**Борай районында:** Таубашбаҙраҡ, Оло Баҙраҡ, Силасау, Туҡран, Бикмәт, Салҡаҡ, Ҡайынлыҡ, Сәйетбай, Сәйет-Көрйә, Таңатар, Айыт, Байсака, Меңле, Ваныш-Алпауыт, Ҡарайерек, Кузбай, Ҡоҙаш, Абзай, Абдулла (Көсөкбай), Бостанай ауылдары.

**Ҡалтасы районында:** Күгәрсен, Нарат ауылдары.

**Дүртөйлө районында:** Исмаил, Әлкәш, Араптан, Шишмә, Һикәләкүл, Етембәк, Йосоп, Миңеште, Кәнгеш, Яңы Кәнгеш (Көйөк), Барғыҙбаш, Барғаты ауылдары.

**Илеш районында:** Рсай, Янтуған, Дөмәй, Иҫке Дөмәй, Үрнәк, Йонны, Буралы, Йәркәй (Йылан), Үрге Серекҡүл, Түбәнге Серекҡүл, Этәй, Теләпән, Тәжәй, Ляшты, Ишҡар, Сәйетҡол, Иғмәт, Абдулла ауылдары.

**Саҡмағош районында:** Тайнаш, Балаҡ, Яңы Балаҡ, Ҡаран, Яңы Дөмәй, Әхмәт, Рафиҡ, Тамъян, Сөрмәт, Яңы Сөрмәт, Ҡарьяуҙы, Яңы Ҡайынлыҡ, Иҫке Боҫҡаҡ (Боҫҡаҡ Ҡуян), Мәскәү (Иҫке Мәскәү) ауылдары.

**Туймазы районында:** Бәйрәкәтүбә, Үрге Бишенде, Зәйет, Илсембәт, Көкребаш, Ҡарамалы, Тимер, Ҡарат, Мәксүт, Иҫке Туймазы, Түмәнәк, Уяҙытамаҡ, Яҡшый, Япрыҡ, Исмаил.

**Йәрмәкәй районында:** Әбделкәрим, Абдулла, Аҙналы-Ҡарамалы, Атамҡул, Исламбахты, Ҡулбай, Ҡыҙылъяр, Рәтамаҡ, Сүлле, Сүллисат, Һыуыҡҡул, Сөйәрмәт (Һайран), Тарҡаҙы, Шах, Яңы Шах ауылдары.

**Шаран районында:** Шаранбаш-Кенәз, Дүрмән, Ямаҙыбаш, Салмалы ауылдары.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Аҙағы. Башы 31-34-се һандарҙа).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар артҡа сигенмәй

Сержант Дауыт Хафизов 6 немец һалдатын үлтерҙе, дошмандың станоклы пулеметын юҡ итте һәм яраланған хәлендә һуғыш аҙағына тиклем үҙ подразделениеһының башында торҙо. Өлкән сержант Хәләф Юлдашев ҡара-ҡаршы алышта 4 немец һалдатын үлтерҙе.

Өлкән лейтенант Тереғолов, политрук Низамов, лейтенант Ғиниәтуллин, политрук Мостафин, лейтенант Гәрәев, старшина Нарбеков, ҡыҙыл армеецтар Абдуллин, Мәксүтов, Ғарипов, Ғәлимов, Яҡупов, Ғатауллин, Киямов, Дәүләтгәрәев, Вахитов, Мөхәмәтдинов һәм башҡа күптәр һуғышта үҙҙәрен батыр тоттолар. Командование күп боецтарҙы һәм командирҙарҙы хөкүмәт наградаһына билдәләне.

Беҙҙең арала бер генә артҡа сигенеүсе лә, бер генә паникер ҙа һәм Тыуған иленә хыянат итеүсе булманы, тип беҙ ғорурлыҡ менән әйтә алабыҙ.

Гитлерсы фашистар Советтар Союзы халыҡтарын, шул иҫәптән башҡорт халҡын, немецлаштырырға һәм уларҙы фашист кеше ашаусылар ҡулына бирергә теләйҙәр. Ләкин был барып сыҡмаç. Башҡорт атлылары Советтар Союзын фашист баҫҡынсыларынан азат итеү өсөн һуңғы тамсы ҡанын бирергә, кәрәк була икән, бөтә ғүмерен бирергә әҙер. Боевой иптәштәребеҙҙең үлеме өсөн беҙ дошмандан аяуһыҙ үс аласаҡбыҙ. Ҡайҙа осратһаҡ, шунда дошманды ҡырасаҡбыҙ.

Беҙ, ҡәҙерле иптәштәр, Тыуған ил өсөн барған һуғышта һәләк булған боецтарҙың һәм командирҙарҙың ғаиләләрен айырыуса иғтибар һәм хәстәрлек менән солғап алыуығыҙҙы һорап һеҙгә мөрәжәғәт итәбеҙ. Бер үк ваҡытта һеҙгә, һәр ҡайһығыҙ үҙенең хеҙмәт посында Тыуған илебеҙҙең тылын тағы ла ныҡыраҡ нығытығыҙ, фронтҡа көн һайын күберәк ярҙам күрһәтегеҙ, арымай-талмай фронт өсөн ҡорал, һуғыш припастары, продукттар әҙерләгеҙ, тип мөрәжәғәт итәбеҙ. Заводта ҡорамалдарҙы, тимер юл һәм һыу юлы транспортын тәүлек әйләнәһенә файҙаланығыҙ, уңышты урып-йыйыуҙы һәм башҡа ауыл хужалығы эштәрен боевой рәүештә үткәрегеҙ.

Беҙҙең боевой эштәребеҙҙе үткер күҙ менән күҙәтеп барыуығыҙҙы беҙ беләбеҙ һәм башҡорт халҡының беҙгә тапшырылған байрағын ныҡ тотасаҡбыҙ, тип һеҙҙе ышандырабыҙ. Беҙҙең территориябыҙға бәреп ингән фашист баҫҡынсыларын аяуһыҙ ҡырасаҡбыҙ.

Совет халҡының беҙҙең союздаштарыбыҙ булған башҡа бөйөк державалар халыҡтары менән дуҫлыҡта, бөтә донъяла фашизмды еңеү байрағын ҡаҙаясаҡ ваҡыт алыҫ түгел.

*Часть командиры Шайморатов*
*Часть комиссары Нәзиров*
*Батальон комиссары Абдуллин"*

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Тарихи Башҡортостан ерлегендә археологтар тарафынан асылған Арҡайым һәм уға оҡшаш тиҫтәләгән "ҡаҙылма ҡаласыҡтар" билдәле булып, ошо территорияның "ҡалалар иле" тигән символик атама алыуы ла үтә фәһемле.*



# АУЫЛДАРЫБЫҘ

## улар бит милләт бишеге, ейәр ризығыбыҙ сығанағы,

**Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда социология, политология, лингвистика, демография һәм башҡа ижтимағи-гуманитар фәндәр өлкәһендә тикшеренеүҙәр алып барыусы ғалимдарҙың урбанизация (ҡалалашыу) проблемаларына ҡарата иғтибары бермә-бер көсәйҙе. Был - заманса күренеш, һәм ул башҡорт халҡына, уның яҙмышына туранан-тура ҡағыла. Әммә ошо йүнәлештә халыҡ ҡарамағына сығарылған бөгзе бер гипотезалар, уй-фекерҙәр һәм һығымталар менән бер нисек тә килешеп булмай. Был яҙмам ошо мөһим проблемаға арналған.**

### Һөйләнгәне - әкиәт, яҙылғаны - хәҡиҡәт

Боронғо башҡорттар өсөн ҡала тормошо бөтөнләйгә ят булмаған. Был факт мәҙәни мираҫыбыҙҙың нигеҙе - ауыҙ-тел ижадында, йәғни фольклорҙа асыҡ сағылыш тапҡан. Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә, улар ниндәй генә фантастик сюжетҡа ҡоролмаһын, йыш ҡына әкиәт геройының ҡалаға килеп урынлашыуы, унда барған хәлвәҡиғаларҙа әүҙем ҡатнашып, күп ауырлыҡтар, һынауҙар аша үтеп, дошмандарын еңеүгә өлгәшеүе хаҡында бәйән ителә. Мәҫәлән, "Әминбәк" әкиәтенең геройы ҡалаға барып, яҙыу оҫталығына, скрипкала уйнарға өйрәнә, сатраш (шахмат) уйынын үҙләштерә. Шул һөнәрҙәре уға төрлө һынау-хәлдәрҙә үтеп, ҡала хакимы булып китергә лә мөмкинлек бирә.

Бынан бик күп быуаттар элек, тарих төпкөләндә, ата-бабаларыбыҙҙың исемдәре киң билдәле ҡалалары булыуы хаҡында яҙма сығанаҡтарҙа теркәлгән мәғлүмәттәр бар. XII быуатта Сицилияның норман короле Рожер II һарайында йәшәгән ғәрәп географы әл Иҙриси ул замандағы халыҡтар, уларҙың илдәре тураһында киң һәм бай мәғлүмәт туплап, "Донъя гиҙеүҙә хушһынғанға йыуаныс" исемле энциклопедик характерҙағы ҙур хеҙмәт яҙа. Был китапта боронғо башҡорттар тураһында ла шаҡтай ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирелгән. Беҙҙең өсөн бына нимә мөһим: бынан 850 йыл элек һәм унан да әүәлерәк башҡорт халҡы Европала үҙ иле (территорияһы), хужалығы, ғәскәре, ҡалалары, үҙенсәлекле теле булған үҙаллы халыҡ рәүешендә билдәле була.

Әл Иҙриси яҙмаларында бына ниҙәр бәйән ителә. "...Ә тышҡы басджирттар иленә килгәндә, уға Ҡаруҡийа, Нәмджан һәм Гүрхан ҡалалары ҡарай. Был ҡалаларҙа йәшәүселәр, үҙҙәренә етерлек кимәлдә сауҙа һәм һөнәрселек менән шөғөлләнеп, үҙ көндәрен үҙҙәре күрә. Был илдәр үңдырышлы, мул үҫемлекле һәм мал көтөүҙәре күп.

Нәмджан ҡалаһы - ҙур булмаған сәскә атыусы ҡаласыҡ. Уның менән төркиҙәрҙән булған бер кеше идара итә. Уларҙа власты атанан улға тапшырыу ғәҙәте игелекле эштәре һәм ябай халыҡҡа, арҙаҡлы заттарға яҡшы мөнәсәбәтле булыуҙары арҡаһында өҙөлмәй килә. Был ҡала Суҡан тип аталған йылға буйында урынлашҡан. Был ҡаланан көнсығышта Арджика тауында баҡыр рудниктары бар, унда меңдән ашыу кеше эшләй. Унда баҡыр күп табылып, Хуваразм еренә, Шаш (Ташкент. - **Ред.**) иленә һәм гуз иленең яҡын өлкәләренә алып барыла. Был ҡаланан шулай уҡ төлкө һәм әл бабр (Ҡондоҙ. - **Ред.**) тигән йәнлек тиреләре сығарыла, улар йылға буйлап Хазар диңгеҙенә тиклем алып барылып, бында һәм Дайламала юғары хаҡҡа һатыла. Был ҡалала балсыҡтан төрлө нәмәләр, шул иҫәптән юғары сифатлы һәм тиҙ ватылмай торған көршәктәр яһала. Был йылғаның ярҙарында төрлө төҫтәге ҡиммәтле таштар осрай, улар араһында лазурит күп. Нәмджан ҡалаһы кешеләре үҙҙәре өсөн төп аҙыҡ булған балыҡты бик ҙур таһыллыҡ һәм сослоҡ менән тота. Тотолған балыҡтың күберәк өлөшөн, һаҡлау өсөн тәмләткестәр һибеп, тоҙлап, караптарға тейәп, Хазар диңгеҙенә алып төшәләр, яр буйлап Исил ҡалаһына һәм башҡа урындарға тиклем барып етеп, һатыу итәләр, йәниһә үҙҙәре телөгәнсә тотоналар.

Нәмджан ҡалаһынан Гүрханға тиклем һигеҙ күсем ер. Был Аскутийа ере төркиҙәренең күп халыҡлы ҙур ҡалаһы. Ул Табаристан диңгеҙенә ҡойған Исил йылғаһынан төньяҡ тарафта урынлашҡан. Ҡала яҡшы төҙөкләндерелгән, тирә-яғы эшкәртелгән, бында ҡайны саҡта күрһәтелгән йылға буйлап, сауҙагәрҙәр һәм сәйәхәтселәр килеп йөрөй. Бында Аскутийа төркиҙәре хакимы йәшәй, уның ҡарамағында күп һанлы яугирҙар, ҡорамал һәм ҡоралдар, күп ҡәлғәләр, эшкәртелгән ерҙәр бар. Был илдә һөнәрселек таҫарҙары һәм сәнғәт әйберҙәренән тик көнкүреш өсөн кәрәклеләрен генә эшләмәйҙәр, шулай уҡ улар яһаған әйәр һәм ҡоралдар шул тиклем күркәм һәм камил - бындайҙар төркиҙәрҙең башҡа бер илендә лә етештерелмәй. Гүрхан ҡалаһынан Ҡаруҡийаға тиклем Анхадара йылғаһы буйлап һигеҙ көнлөк юл, ә ҡоронан - көнбайышҡа табан ун алты күсем. Ҡаруҡийа - ағас ҡоролмаларҙан һәм кейеҙ тирмәләрҙән торған матур ҡала. Уға ерҙәре бынан ун алты күсем арала булған булғарҙар йыш һөжүм итеп тора, һәм улар әлмисактан бирле бер-береһе менән даими һуғышып йәшәй.

Эске басджирттар иле үҙәге менән тышҡы басджирттар иле үҙәге араһы ун бер күсем ер. Үҙенең ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса басджирт халҡы төрки-булғарҙарға оҡшаш. Эске басджирттарҙың ҡалаларынан Мастр һәм Ҡастрҙы атап була. Был ике ҡала ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр бында һирәк килә. Унда бер кемдең дә булғаны юҡ, сөнки урындағы халыҡ илдәре аша үтеп сығырға теләүсе бөтә сит ил кешеләрен үлтереп тора. Был ике ҡала Исилгә ҡойған йылға буйында урынлашҡан".

### Башҡорт күңеле - далала

Тарихи Башҡортостан ерлегендә археологтар тарафынан асылған Арҡайым һәм уға оҡшаш тиҫтәләгән "ҡаҙылма ҡаласыҡтар" билдәле булып, ошо территорияның "ҡалалар иле" тигән символик атама алыуы ла үтә фәһемле. Был башҡорттарҙың күпселеге далаларҙа, тау-урмандар араһында малсылыҡ, һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ, ҡортсолоҡ һәм башҡа үҙ замаһаны шөғөлдәрен үҙләштереп йәшәгән хәлдә лә, уларҙың урта быуаттарға тиклем үҙ ҡалалары ла булыуын раҫлаусы ышаныслы дәлил булып тора.

Билдәле булыуынса, бер-бер артлы ҡабынып торған яуһөләкәттәр, яулап алыу һуғыштары, халыҡтарҙың элегерәк йәшәгән ерҙәренән башҡа тарафтарға күсеп китеүе арҡаһында боронғо башҡорт ҡалалары бөлгөнлөккә төшә, емертелә, тора-бара уларҙан тик харабалар ғына ҡала. Уралға һәм уға яҡын төбәктәргә ерекkән башҡорттар башҡаса ҡала-ҡәлғәләр төҙөмәй, үҙҙәренең йәшәү рәүешенә ярашлы, ҙур булмаған ҡышлауҙарҙа һәм йәйләүҙәрҙә көн итеүҙе хуп күрә. Тарих фәндәре докторы, профессор Роза Буканова билдәләүенсә, башҡорттар өсөн ҡәлғә-крепость төҙөү зарурлығы булмай: дошмандары һөжүм иткәндә халыҡ тау-таш араларында, урман шырлыҡтарында йәшеренеп торор урындар таба. Ошондай йәшәйеш традицияға әйләнеп, XX быуат башына тиклем һаҡланып ҡала.

### Сит илдәрҙә солтан булғансы…

XIX быуаттың икенсе яртыһынан XX быуат баштарына тиклемге осорҙа ауыл ерлегендә көн иткән башҡорттарҙың шәхси хужалыҡтары билдәле сәбәптәр арҡаһында хөртәйә бара, еренән яҙған байтаҡ ғаиләләр бөлгөнлөккә төшә, башҡорттар араһында фәкирлек көсәйә. Ерһеҙ ҡалған йәшерәк башҡорттар ситкә китеп, байҙарға, сауҙагәргә ялланып, артелдәргә барып ҡушылып көн итергә мәжбүр була. Мәҫәлән, 2-се Әйле олоҫонан Иҙрис ауылы башҡорто Ғималетдин Минһажев та (БАССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың халыҡ артисы) ауылын ташлап, Златоуст ҡалаһына йүнәлә, бер барыняға күсер булып хеҙмәт итә.Тап шул дәүерҙә башҡорт мөхитендә "зимагорлыҡ" төшөнсәһе барлыҡҡа килә - ҡалаларға сығып китеп, тәмәке тартып, араҡы эсеп, аҙып-туҙып йөрөүсе башҡорттарға шундай атама тағыла. Әммә башҡорттарҙың күпселеге, йәшәү шарттары үтә насарайған хәлдә лә, ауыл ерлеген ташлап китергә ашыҡмай.

1897 йылғы Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ярашлы, илдә барлығы 1 321 363 башҡорт телле кеше теркәлгән булһа, уларҙың 3151-е генә Өфө ҡалаһында йәшәй. XX быуат башында Рәсәй империяһының башҡа ҡалаларында йәшәүсе башҡорттар хаҡында, образлы итеп әйткәндә, иҫәпкә бар - һанға юҡ, тип әйтеп булыр ине. 1920 йылда иһә Өфөлә ни барыһы 1200 башҡорт теркәлә. Илде тетрәткән инҡилаб, граждандар һуғышы һәм быуаса күрелмәгән асыҡ трагедияһы башҡорттарҙың дөйөм һанын икеләтә ҡыҫҡарта.

### Их, Өфө ҡалаһы, йәмле Иҙел буйында

Совет осоронда мәҙәни революция һәм индустриялаштырыу процестарында башҡорт халҡы ла бик әүҙем ҡатнаша. Элекке Ырымбур һәм Өфө губерналары ҡалаларында башҡорт йәштәре лә күберәк күренә башлай, башлыса, улар уҡыу йорттарында белем алыу, совет төҙөлөштәрендә ҡатнашыу ниәте менән ҡалаларға йүнәлә. 1926 йылда Өфөлә 4632 башҡорт теркәлһә, 1939 йылда уларҙың дөйөм һаны 15 400-гә етә. Бөйөк Ватан һуғышына тиклемге осорҙа 1-се быуын ҡала башҡорттарынан, совет (коммунистар) власы принциптарына һәм талаптарына ярашлы, ер-яны гуманитар-ижади интеллигенция ҡатламы үҫеп сыға. Шулай уҡ тап шул йылдарҙа һәм унан һуңғараҡ осорҙа башҡорт зыялыларынан төүге фән һәм техника өлкәһе белгестәре формалаша. Башҡорт халҡының мәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерерлек милли театрҙар, филармония барлыҡҡа килә, әҙәбиәт, музыка, һынлы сәнғәт йылдам үҫешә. Ошо быуын башҡорттарының халҡыбыҙ мәҙәниәтенә индергән өлөшөн баһалап бөткөһөҙ.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Башҡортостанға байтаҡ ҡына эвакуацияланған заводтар килтерелә, уларға урындағы халыҡтан, шулай уҡ башҡорттар араһынан байтаҡ ҡына йәш егет-ҡыҙҙар йәлеп ителә. Артабан нефть һәм химия индустрияһы предприятыларына эшкә килеүселәр араһында башҡорттар ҙа күбәйә бара. Был ҡала башҡорттарының интенсив үҫешенә төп сәбәп була. Мәҫәлән, 1939 йылдан 1959 йылға тиклем Өфө башҡорттарының һаны 15 мең самаһына артып, 30 321 кешегә етһә, артабан 30 йыл дауамында 90 меңгә күбәйеп, 1989 йылда 122 026 кешегә етә (өфөләрҙең 11,3 проценты). Артабанғы 20 йыл арауығында баш ҡалабыҙҙа милләттәштәребеҙ тағы ла 50 меңгә артып, 2010 йылғы иҫәп алыу материалдарында 172 794 башҡорт кешеһе теркәлә.

### Ҡалалашыу - оҙайлы процесс

Был осорҙа бөтөн Башҡортостан ерлегендә лә шундай уҡ үҫеш динамикаһы күҙәтелә. 1926 йылда Башҡорт АССР-ында ни бары 11700 самаһы ҡала башҡорто йәшәһә, 1939 йылда уларҙың һаны, 3 тапҡырҙан ашыуға артып, 40 меңләп тәшкил итә. 1959 йылда ҡала башҡорттары 100 меңдән ашһа, совет дәүеренең артабанғы 3 тиҫтә йылында, артҡандан-арта барып, 1989 йылда 365 391 башҡорт ҡала кешеһе статусына эйә була. 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдарына ярашлы, республикабыҙҙа йәшәүсе башҡорттарҙың 40,6 проценты, йәғни 475 948 кеше ҡалаларҙа теркәлгән.

Юғарыла килтерелгән статистика материалдары һуңғы 100 йыл дауамында Башҡортостан ерлегендә барған урбанизация, йәғни ҡалалашыу процестарын айырым асыҡ күрһәтеп, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлил булып тора. Ғөмүмән, урбанизация халыҡтар йәшәйешенең, уларҙың цивилизацион үҫешенең төп йүнәлешен билдәләүсе феномен: Европа халыҡтары өсөн ул күптән үтелгән этап булып, хатта ғилми даирәләрҙә лә әллә ни ҡыҙыҡһыныу уятмай. Беҙ, башҡорттар, ҡала мөхитен үҙләштереү йәһәтенән фекер йөрөткәндә, үтә лә йәш халыҡбыҙ (архаик замандарҙа йәшәгән боронғо ҡала башҡорттарын бер нисек тә иҫәпкә алып булмай: беҙҙең тарихи хәтеребеҙҙә, фольклор мираҫында сағылыш тапҡандарынан башҡа, бер ниндәй ҙә тере мәғлүмәт ҡалмаған шул). Әммә, икенсе яҡтан ҡарағанда, был халҡыбыҙ алдында әле ғәмәлгә ашырылмаған, әммә мауыҡтырғыс һәм һөҙөмтәле перспективалар булыуын да аңлата бит. Ҡалалашыу - тиҙ башҡарыла торған ижтимағи күренеш түгел, ул оҙайлы күсеш барышында, быуындар алышыныуы менән ҡуша килеп, халҡыбыҙҙың цивилизацион үҫешен билдәләйсәк. Ошо

✓ *Һөҙөмтәлә үҙ ауылында ҡот таба алмағандар күпләп сит-ят тарафтарға китә. Һис сер түгелдер: Башҡортостанда бөгөн бер ниндәй ҙә интенсив урбанизация юҡ, уны күптән инде "интенсив вахтовизация" алыштырҙы.*



процестарҙың совет осоронда башланған өлөшө лә беҙгә бик мөһим һәм ҡиммәтле тәжрибә бирҙе. Тап ҡала мөхитендә формалашҡан яңы быуын зыялыларыбыҙ тарафынан боронғо мәҙәни мираҫыбыҙ баҫма, кино-, видео-, электрон сығанаҡтарҙа теркәлде, халҡыбыҙҙың мәҙәни, рухи һәм интеллектуаль үҫеше өсөн өр-яңы мөмкинлектәр асылды. Әммә ошо ҡатмарлы ижтимағи күренешкә һылтанып, төптән уйланылған һәм тәрән фекерле, күп яҡлы анализ эшләмәйенсә, ашығыс, өлгөрөп етмәгән, хатта хаталы һығымталар эшләмәһәк ине. Ошо аҙмам аша шәхсән бер нисек тә килешә алмаған, әммә төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарында киң таралыу тапҡан ҡайһы бер фекерҙәр хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтеп китер инем.

# Йәшәһен - телебеҙ үә илебеҙ терәге



## Ҡалалы Башҡортостан - совет осоро емеше

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда урбанизация процестарын ғилми күҙлектән ҡарап, ошо юҫыҡта барлыҡҡа килгән проблемалар буйынса байтаҡ тикшеренеүҙәр уҙғарылды, фәнни-ғәмәли конференциялар ойошторолдо, күп һанлы мәҡәләләр, ғилми баҫмалар сығарылды. Бигерәк тә ҡала башҡорттарына арналған тикшеренеүҙәргә өҫтөнлөк бирелде. Был тәбиғи - республикабыҙ, халҡыбыҙ тормошонда барған үҙгәрештәр ижтимағи-гуманитар фәндәрҙә объектив сағылыш табырға тейеш. Әммә ғалимдарыбыҙ бер мөһим фактҡа иғтибар итеңкерәмәйенсә, һуңғы осорҙа ниндәйҙер айырыуса интенсив барған, тиҙләтелгән урбанизация хаҡында яҙырға әүәҫ булып китте. Эйе, республикабыҙҙа бындай ижтимағи процестар күҙәтелде, әммә башҡорттарҙың сағыштырмаса тиҙ арала ҡалаларға күсеп китеүе ҡасан булған һуң? Бөгөн бындай процестар дауам итәме һуң, әллә бәғзе бер ғалимдарыбыҙ күптән түгел булып уҙған ваҡиғаларҙы ни сәбәптәндер бөгөнгә итеп күрһәтергә тырышамы?

Һандар алдашмай, статистика материалдарына күҙ һалайыҡ. 1926 йылда БАССР тулыһынса тиерлек аграр республика - ҡалаларҙа бар халыҡтың ни барыһы 8,8 проценты йәшәй. Индустриялаштырыу сәйәсәте һөҙөмтәһендә Башҡортостандың ҡала халҡы 1959 йылда 38,7 процентҡа етә. Артабанғы 20 йыл эсендә республикабыҙ ҡалаларында йәшәүселәрҙең һаны тағы ла 900 меңгә артып, 1979 йылда бар халыҡтың 56,8 процентын тәшкил итә, элекке саф аграр төбәк юғары үҫешкән нефть-химия сәнәғәте үҙәктәренең береһенә әйләнә. Бына ҡасан булып үткән ул интенсив ҡалалашыу процестары! СССР-ҙа 80-се йылдарҙа иҡтисади-сәйәси торғонлоҡ хөкөм һөрһә лә, урбанизация темпы ныҡ һүрелмәй әле - 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса Башҡортостан ҡалалары халҡының дөйөм һаны 2,5 миллиондан артып китеп, барса халыҡтың 63,8 процентын тәшкил итә.

## Заман башҡа - заң башҡа

СССР тарҡалыу менән бергә Башҡортостанда быға тиклем дөрләп янған урбанизация усағы һүнеп ҡалғандай була. Әлбиттә, ҡала халҡы ла бөтөнләйгә артмай тормай, әммә был артым һис бер иҫ китерлек түгелдер. Ҡала халҡының һан яғынан абсолют иҫәбе арта биргән хәлдә лә, уның ауылдарҙа йәшәүселәр менән сағыштырмаса нисбәте үҙгәрешһеҙ ҡала тиерлек. Статистика беҙгә тап ошо сетерекле хәлдә асыҡтан асыҡ күрһәтә лә инде: 1989 йылда республикабыҙ халҡының ҡалаларға тура килгән өлөшө 63,8 процент булһа, 2002 йылда - 64,0 процент, 2010 йылда - 60,4 процент. Башстаттың һуңғы мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостанда 2019 йылдың 1 ғинуарына ҡала халҡы 62,26 процент тәшкил итә. Иғтибар итегеҙ: был һандар һуңғы 30 йыл арауығындағы хәлде күрһәтә. Ҡайҙа булған һуң йылдам урбанизация, был бит торғаны менән демографик стагнация күренеше? Ни эшләп ғалимдарыбыҙ совет осоронан һуң күҙәтелгән ошондай факттарҙы иҫәпкә алмай икән, шуныһы ғәжәп.

Бәғзе ғалимдарыбыҙ Башҡортостандағы ҡала халҡының кәмеүен 2004-2005 йылдарҙа ҡала тибындағы ҡасабаларҙың статусы үҙгәртелеп, унда йәшәүселәрҙең ауыл кешеләре иҫәбенә индерелеүе менән аңлатырға тырыша. Тик быны ла шул уҡ статистика бизмәненә һалып үлсәргә кәрәктер бит. Баҡтиһәң, ошондай үҙгәреш исемлегендә барлығы 38 ҡасаба булып, унда йәшәүсе 180 372 кеше ҡала кешеһе статусын юғалтҡан (улар үпкәләмәһендәр инде: ысынбарлыҡта был ҡасабаларҙа бер ҡасан да ҡалаларға хас ижтимағи-гуманитар инфраструктура булманы). Был совет осоронда ҡала һәм ауыл араһындағы айырманы бөтөрөү лозунгыһының бер уңышһыҙыраҡ сағылышы ғына булғандыр ул. Һүҙ юҡ, тәү ҡарамаҡҡа был ҙур ғына һан булып тойола. Әйҙәгеҙ, шартлы рәүештә уларҙы 2010 йылдағы ҡала халҡы иҫәбенә өҫтәйек тә, ҡала/ауыл халҡы нисбәтен иҫәпләп сығарайыҡ. Ул саҡта ҡала халҡы 64,8 процент булыр ине - ә 2002 йылда ла ул 64,0 процент ине бит! Нисек кенә һанаһаң да, үҫеш юҡҡа иҫәп.

## Йәшәһен башҡорт ауылдары!

Бәлки, әле килтерелгән мәғлүмәттәр башҡорт халҡына ҡағылмайҙыр, тип уйлаусылар барҙыр. Алдараҡ башҡорттарҙың күпләп ҡалаларға килеү осоро 1959 йылдан алып 1989 йылға тиклем дауам итеүен билдәләп үткәйнек. Әлбиттә, 90-сы йылдарҙа ла ҡалаға килеп төпләнеүсе башҡорттар байтаҡ булды, быныһы хаҡ. Әммә, әлеге лә баяғы тигәндәй, ҡала/ауыл башҡорттарының нисбәте совет һәм унан һуңғы осорҙаға урбанизацияның төп күрһәткесе икәнлеген онотмайыҡ. Бына ул һандар теҙмәһе (процентларҙа): 1959 йыл - 13,6/86,4; 1970 йыл - 19,7/80,3; 1979 йыл - 28,2/71,8; 1989 йыл - 42,3/57,7; 2002 йыл - 42,4/57,6; 2010 йыл - 40,6/59,4.

Күҙе менән күргәндең аҡылына ишара: совет осороноң һуңғы 3 тиҫтә йылында ҡала башҡорттарының ауылдыҡылар менән сағыштырмаса нисбәте 3 тапҡырға артҡан. Ә һуңғы 20 йылдағы һандар үҙҙәре үк күҙебеҙгә төртөләп тормаймы ни - 42,3 - 42,4 - 40,6? Хәҙерге ауыл башҡорттары шулай "шәп" итеп ҡалалашамы әллә, ғалимдарыбыҙ шулай һөйләгәс? Алдараҡ әйткәнебеҙсә, ҡала тибындағы элекке ҡасабаларҙа йәшәүсе аҙ һанлы башҡорттарҙы иҫәпкә алған хәлдә лә, ҡала башҡорттарының проценты шул 43-тән әллә ни артмаҫ ине. Элекке замандарҙағыса, 1 Май демонстрацияһына сығып, "Йәшәһен башҡорт ауылдары!" тип һөрәнләргә генә ҡала беҙгә.

## Элек ҡыйын инеме, әллә хәҙер анһатмы?

Ҡоро һандарҙан торған статистика материалдары демографик процестарҙың ысынбарлыҡтағы динамикаһын асыҡларға мөмкинлек бирә, улар нигеҙендә объектив һығымталар ҙа эшләргә була, әммә улар янынан-яны һорауҙар ҙа тыуҙыра. Төп һорауҙы мин бына нисек ҡуйыр инем: "Ни өсөн Совет Башҡортостанында башҡорттар күпләп ҡалала төпләнә алды, ә һуңғы 30 йыл дауамында башҡорт урбанизацияһы торғонлоҡ кисерә?"

Ошо һорауға яуап табыуы әллә ни ҡыйынлыҡ тыуҙырмайҙыр. Совет осоронда, бигерәк тә 70-се - 80-се йылдарҙа, ҡалаға килеүсе башҡорт ошо яңы мөхиттә һис шикһеҙ үҙенә урын таба ала ине. Завод-фабрикаларға, төрлө өлкәләргә ҡараған предприятиеларға, ойошмаларға эшселәр, хеҙмәткәрҙәр күпләп талап ителде, ғилми-педагогик кадрҙар, ижади интеллигенция, медицина хеҙмәткәрҙәре лә үҙҙәренә тәғәйен эш таба алды. Фатирһыҙҙар өсөн дөйөм ятаҡтар төҙөлә ине, күпмелер эш стажы булғандар бушлай фатир алды. Бына ошолар элекке ауыл кешеһенә ҡалаға килеп, ерегеп китер өсөн етерлек шарт булды ла инде. Ә бәғзе бер ғалимдарыбыҙ, күҙ ҙә йоммай, ауылдан ҡалаға күсеп килеүсе башҡорт уның өсөн "ят һәм дошман" булған мөхиттә юғалып ҡала, үҙен иркен тоторлоҡ "кәштә" таба алмай йөҙәй, йәнәһе, шуның арҡаһында престижһыҙ урындарға ғына иҫәп тота ала, тигән һығымталар эшләй. Улар хатта мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, башҡа бюджет ойошмаларында эшләүселәрҙе лә, үҙҙәре юғары тип һанаған фән бейеклегенән тороп, ниндәйҙер бер "түбән каста" исемлегенә индереүҙән дә тартынмай. Ошо яңы быуын урбанистары, һис бер нигеҙһеҙ һәм дә шикһеҙ, "аграр мәҙәниәтенән" ситләшкән яңы ҡала башҡорттары ҡала мөхитендә үҙ мәҙәниәтен булдыра алмай, тип, уларҙан ниндәйҙер маргинал, люмпенлашҡан төркөм яһарға ла йөьрәт итә. Шундай шарттарҙа меңәрләгән элекке ауыл башҡорттары ҡала мөхитенә нисек итеп яраҡлаша алған да, төрлө урындарҙа, төрлө вазифаларҙа эшләп, дан вә хөрмәт ҡаҙана алған икән? Ә бит башҡорт ауылдарынан ҡалаға күсеп, билдәлелек алған ошондай шәхестәрҙе һанай китһәң, гәзит биттәренә лә һыйҙырып булмаҫ ине.

Бөгөн башҡортто ҡала һис тә ҡосағын йәйеп ҡаршы алмай. Эш урындарын табып та була ул, уныһы етерлек. Йәшәр өсөн торлаҡ та кәрәк бит. Бушлай фатир алыу совет осороноң тамам онотолған бер ҡаҙанышы ғына булып ҡалды, ятаҡтар юҡ хәҙер. Һатып алам, тиһәң, миллионлаған һум аҡса кәрәк. Ҡалаға килеүсе кеше фатирында байтаҡ аҡса түләп йәшәргә мәжбүр. Ә был ғаилә бюджетына күтәрә алмаҫлыҡ йөк булып ята. Эйе, хәҙерге ваҡытта ауыл башҡортона ҡалаға юл ябылған тиерлек инде. Алдараҡ күрһәтелгән һандар тап ошо хаҡта һөйләй. Һөҙөмтәлә үҙ ауылында ҡот таба алмағандар (бының үҙ сәбәптәре бар), исмаһам, бер аҙ аҡса йүнләйем, тип, күпләп сит-ят тарафтарға китә, йәиһә вахта ысулы менән эшләүҙе ҡулайыраҡ күрә. Һис сер түгелдер: Башҡортостанда бөгөн бер ниндәй ҙә интенсив урбанизация юҡ, уны күптән инде "интенсив вахтовизация" алыштырҙы.

**ШУЛАЙ ҘА...**

**Миҙалдың да ике яғы бар, тиҙәр халыҡта. Кемдер ҡалалашыуҙа милләт перспективаһын күрергә тырыша, бәғзеләребеҙ бының киреһенә һис бошонмай, сөнки ауылда ла заманса тормош ҡороу мөмкинлеге бар, тип иҫәпләй. Ысынлап та, дәүләтебеҙ тарафынан ғәмле үә кеше йәнле реформалар ғәмәлгә ашырылып, ауыл кешеһененең заманса тормош ҡора алыуына тейешле шарттар тыуһа, ауылдарыбыҙ йәшәр ҙә, йәшәрер ҙә ине. Эйе, ауылдарыбыҙ йәшәһен инде, ул бит милләт бишеге, ейәр ризығыбыҙ сығанағы, телебеҙ үә илебеҙ терәге.**

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

**✓ Доң-доң-доң! Бығаса күҙҙәрен дә асырға йыбанып ятҡан Дим йылмая-йылмая ҡорғанын асты. Тик тәҙрә аша Гөл нуры түгел, полиция машинаһының мигалка нуры күҙгә салынды.**






Өфө -ғәжәп ҡала. Үҙенең йөҙәрләгән йыл тарихы эсендә ул Рус дәүләтенең иң көнсығыш нөктәһе лә, Коминтерн үҙәге лә булып өлгөрә. Яҡын-тирәләге ауылдарҙы берләштергән ҡала әле лә булһа бисҭәләргә бүленеп, уларҙың үҙенсәлеген һаҡлай. Ике быуат элек төҙөлөп, ҡыйшайып бөткән ағас өй янында егерме ҡатлы таш һәм быяла йорт тороуы аптырарлыҡ түгел. Өфө - тарих һаҡсыһы. Был ҡала урамдары әле һаман ағас ҡырҡыусы Ириада Чижованың модалы итек тауыштарын, Аксаковтарҙың уйланыуҙарын, Бабичтың йылмайыуын, Долорес Ибаррури сығыштарын, Рәми Ғарипов ярһыуын һаҡлай...

Католиктар үҙәге Ватикан булһа, Рәсәй мосолмандары үҙәге булған Өфө үҙ эсенә 1700 Ватиканды һыйҙыра, әммә шул уҡ ваҡытта ун ике йыл буйына бер мәсетте төҙөп бөтөрә алмай. Был ҡаланы кәмһетеү түгел, сәҡрымдарға һуҙылған тығындары ла, ямғырҙан һуңғы бәшмәк кеүек үҫкән рэперҙары ла Өфөнөң ҡабатланмаҫ йөҙөн булдыра. Ул йөҙҙө һәр кем үҙенсә күрер. Кәйефенә ҡарап баш ҡала урамдарында Һомайғошто ла, шүрәлене лә осратырһың. Берәүҙәр Өфөнө тиң күрмәй ситкә күсә, икенселәре бында илһам ҡанаттарында осоп килеп һуңғы төйәген таба. Тау башында балҡыған был ҡала шул тауҙан тәгәрәтеп төшөрөп йәрәхәтләүе лә, Салауаттың атына ултыртып иркәләтеүе лә ихтимал. Миллиондан ашыу кеше йәшәгән ер, бер-береһен ғүмерҙә осратмаҫаҡ егет һәм ҡыҙҙарҙы бер подъезда йәшәтә ала...

Эйе, Өфө - тарих һаҡсыһы. Миллионлаған яҙмыш тарихы, ҡыуанысы, ҡайғыһы бында аяҡ аҫтында ятҡан ташта, стена булып ҡатҡан ташта, ҡәбер өҫтөн баҫҡан ташта яҙылған. Мин Өфөгә ғашиҡ. Һеҙ ҙә уны яратырһығыҙ тип, ышанам.

* * *

Дим трамвай рельстары буйлап атлап, ҡуртымға йәшәгән йорт ҡапҡаһына барып төртөлдө. Ҡойоп үткән ямғырҙан һуңғы ағас өй ҡарайып, тағы ла ҡотһоҙораҡ ҡиәфәткә ингән. Ҡыйыҡ булып хеҙмәт иткән тутыҡҡан ҡалай ҡыйыҡ елгә бөгөлөп, ҡунағын сәләмләп ҡуйҙы. Си Цзиньпин урамында йәшәүе еңелдән түгел. Ҡапҡа артынан ғына бында таңдан алып трамвай йөрөй, ул үткән саҡта люстра ғына түгел, иҙән таҡталары ла ритайымға төшә. Етмәһә, Өфө тауҙарҙа нигеҙләнгән, биллаһи бында метро түгел, фуникулерҙар төҙөү отошлораҡ.

Урамдың нисек урынлашыуына ҡарап, автомобиль менән дә йортоң алдына килеп етә алмаҫһың. Үҙ торошо менән Си Цзиньпин урамы бөлгөнлөккә төшкән ауылды хәтерләтә. Совет осоронда уны перспективаһыҙ тип атарҙар ине. Тау битләүендә теҙелгән шәхси йорттар ҡаршылағы уба башында үҫкән күп фатирлы яңы йорттар менән күҙгә-күҙ ҡарашып ултыра. Икеһе лә бер-береһен күрмәскә тырыша, әммә Димгә ул ҡәҙерле, сөнки төнгә йондоҙҙарҙы шул йорттағы фатирҙарҙың уты алыштырған.

Фәлән ауылдағы кеүек үк Си Цзиньпин тотҡондарының да үҙ иҫтәлекле урыны бар. Тик был ерҙе туристарға күрһәтмәҫһең, урындағылар үҙҙәре лә уны онотторға һәм күрмәскә тырыша, әммә бакса артында киңәйеп ятҡан бысраҡ күлгә иғтибар итмәй булмай. Күл - матур һүҙ, әммә уға артыҡ хәрефтәр өҫтәлеү менән күләүеккә әйләнеүен онотмаҫҡа кәрәк.

Бер нисә йыл элек күп ҡатлы йорттар менән бергә ҡалҡа башлаған йырындағы бысраҡ һыу бөгөн шәхси милексәләр һәм төҙөлөш компанияны араһында ҡупҡан низағ сәбәпсеһе. Күлгә аҡҡоштар эйәләнә - бер хәл, уның да баҡалар йәшәүе күңелдә ҡыра. Ауылдағылар (шәхси йортта йәшәүселәрҙе шулай атарға булдым) компания хужаһының кәрәгенә бирергә шат булыр ине лә, замдар артына йәшенгән эшҡыуарҙы ҡайҙан табырһың? Эшҡыуар ҙа был йорттарҙы емереп, үҙенекен төҙөр ине, халыҡ аҡсаһын күп һорай, кеме бөтөнләй күсергә риза түгел. Бына шулай: берәүҙәре сереп барған йорттарына, икенселәре һимерә барған кесәһенә йәбешеп йәшәй бирә.

Дим тупһаһын шығырлатып йортона инде. Өй эсендә тыштағы кеүек үк ҡурҡыныс күренеш түгел. Ни бары кухня һәм бер бүлмәнән ғибәрәт торлаҡ бай өләсәй көнкүрешен хәтерләтә. Бында сылтыр шишмә моңон һаҡлаған гәлсәр сервис төпләнгән сервант та, тышлыҡты тишеп сыҡҡан пружиналар буйынса кешенең нисек ултырыуын билдәләп булған ҡәнәфи ҙә, калейдоскоп һүрәтен мәңгеләштергән келәм дә бар. Гипстан яһалған Ленин бюсы ғына етмәй, ҡалғанында Дим - өлгөлө пионер. Һәм һәр намыҫлы пионер кеүек, ул иртәһен физик күнегеүҙәр эшләп, ә кистәрен киләһе көнгә тамаҡҡа бешереп үткәрә. Башҡаларға оҡшамаған бер генә йолаһы бар. Көн һайын киске ун бер тулғас, ул өйөнөң утын өс тапҡыр һүндереп, кире тоҡандыра. Аҙаҡ йырын аша ҡаршылағы убала урынлашҡан күп ҡатлы йорттоң дүртенсе ҡатындағы бер тәҙрәнән ошондай уҡ яуап килә. Гөлдөң яуабы. Шул уҡ Гөл фекеренсә, Дим менән улар иң яҡшы дуҫтар. Рәйес Түләктә нисек әле: "Ике дуҫтың береһе ҡол була"? Был осраҡта Дим - Гөл һипкән нур ҡоло. Көнө-төнө шул нурҙа наҙланып йәшәр ине лә, һәр яҡшы егет кеүек үк, ул- мәңгелек дуҫ ҡорона ингән әҙәм.

Гөл менән дуҫлыҡ Димгә файҙаға ғына. Йыш осраҡта ҡыҙ трамвай туҡталышына сыҡҡан саҡта Димдең тәҙрәһен шаҡып, уны уятып ҡуя. Уянмай ни! Аҙна үтеү менән теләһә ниндәй будильник тауышына өйрәнеп була, ә күңелгә хуш ҡыҙҙың туҡылдатыуына нисек йоҡлап ҡалмаҡ кәрәк? Ҡайһы саҡ Дим үҙе иртәрәк тороп, туҡталышҡа барған Гөлгә тәҙрә аша сәй яһап бирә. Ярым шаяртыуҙарға ҡоролған әңгәмәнән тыш, иртәнсәк кәйеф булдырырға башҡа бер ни кәрәкмәй ҙә.

Был кистә лә Дим ун бер тулыу менән ут менән шаярып алды, тик өсөнсөгә лампочканы тоҡандырыу менән ул үҙе кире һүнергә ашыҡты. Түбәлә үҫкән "грушаның" нәҙек ҡылы бындай ҡыҙыу егеттең ялҡынлы сәләмәнә түҙмәне. Өҙөлдө. Теге ярҙан яуап килгәс тә Дим ут йүнәтергә тотондо. Лампочка соландағы тумба тартмаһының береһендә бар, шикелле...

Үҙ уйҙарына сумған Дим күл яғынан килгән ҡысҡырыуҙы баштан уҡ ишетмәне, шикелле. Ул шымып ҡалғас ҡына ниҙәндер һиҫкәнә башланы. Бер нисә секундтан һуң ҡысҡырыу ҡабатланды. Өсөнсөгә ул тағы ла ярһыуыраҡ яңғыраны. Сусҡа һуйғандарын ишеткәнегеҙ бармы? Тауыш шундайға оҡшаған. Уның ҡыҙҙыҡылымы, малайҙыҡымы икәнен дә билдәләп булмай. Ҡараңғылыҡта тумбочка аҡтарған Дим урынында ҡатып ҡалды. Был саҡта уның тәнендәге ҡан да йөрөшөнән туктағандыр, бәлки. Ярты минуттан һуң тауыш тынды, уны күрше-күлән эттәренең өрөүе алыштырҙы. Ә Дим был кисен лампочкаһын алыштырмайынса йоҡларға ятты...

Доң-доң-доң! Ишеккә шаҡыу менән тәҙрәгә шаҡыу нимәһе менән айырыла? Тәҙрәнеке - нығыраҡ йәнгә тейә. Айырыуса, иртәнсәк. Дим форточкаһын асып, Гөлдө сәләмләне.

- Тағы бер минут, һәм был иртәң мине күрмәйенсә башланыр ине. Нинә шулай оҙаҡ йоҡлайһың? Туҡылдатып тороп бармаҡтарым ауыртып бөттө.

-Һаумыһығыҙ, Тамара инәй! - Дим, күрһәң, кемгә һәм кем туҡылдатҡанын асыҡларға сыҡҡан күршеһе менән иҫәнләште. - Ниңәлер, бөгөн ҡаты йоҡлағанмын, төнөн күҙ ҙә йома алмай яттым шул,- егеттең хәтеренә үткән кистәге тауыштар төштө.

- Сәй тәҡдим итеп торма, былай ҙа һине уятам тип оҙаҡ тороп ташланым. Трамвай ҙа килә, бөгөнгө беренсе параға һуңларға ярамай. Пока! - Гөл рюкзагын ҡулына алып йүгереп китте. Бахыр студент, шәмбе көн беренсе дәрескә бара.

Тамара әбей аяғы аҫтына өс тапҡыр төкөрөп, ҡапҡаһына ниндәйҙер үлән бәйләмен элеп ҡуйҙы. Дим артыҡ күҙәтеүҙәргә бирелмәй, ҡорғанын тартып, кире әүен баҙарына юлланды. Төнөн ысынлап та йоҡо теймәне шул.

Доң-доң-доң! Карауат янындағы ултырғыста ятҡан яңы лампочка иҙәнгә тәгәрәп төшөп ярылды. Доң-доң-доң! Бығаса күҙҙәрен дә асырға йыбанып ятҡан Дим йылмая-йылмая ҡорғанын асты. Тик тәҙрә аша Гөл нуры түгел, полиция машинаһының мигалка нуры күҙгә салынды. Ҡояш байый, был әҙәмдәр ҙә байырға килгәнме икән?

- Һаумыһығыҙ, участка полицияһы Ахунйәнов. Был һеҙҙең йортоғоҙмо?

- Эйе, әй, юҡ. Мин бында ҡуртымға йәшәйем.

- Исемең кем һуң?

- Дим.

- Ҡара, Дим, кисә киске ун бер тирәһендә нимә эшләнең? Бында булдыңмы?

- Эйе, йоҡлай инем.

- Әле нимә эшләнең? Оҙаҡ асмаының.

- Әле лә йоҡлай инем,- Дим бер аҙ уңайһыҙланып ҡуйҙы.

- Сәйер, бик сәйер... Йоҡланым, тиһең. Йоҡо аралаш бер ниндәй ҙә тауыштар ишетмәнеңме? Бәлки, кемдер ҡысҡырғандыр?

- Юҡ, мин кисә бер тәүлек эштә булғандан һуң арып ҡайттым да шунда уҡ  йоҡларға яттым. Бер нәмә лә ишетмәнем. Ә нимә булды?

- Ҡаршылағы күп фатирлы йортта йәшәгән 12 йәшлек малай юғалған. Беҙ, ғәҙәттә, өс көн үтмәйенсә кеше юғалыу тураһында ғариза ҡабул итмәйбеҙ, әммә бөгөн һинең өйөң тапҡырында ғына, күлдә уның кейем кисәктәре табылды. Яҡын-тирәләге йорт хужалары киске ун бер тирәһендә ҡысҡырыу ишеттек, тиҙәр. Ә һин, тимәк, ишетмәгәнһең?

- Әйттем бит, ишетмәнем...

- Индерәһеңме, өйөңдө ҡарап сығырға ине.

- Рәхим итегеҙ!

Лейтенант аяҡ кейемен сисеп тормай, бүлмә уртаһына үтте. Офоҡ артына йәшенә башлаған ҡояш яҡтыһы күҙҙе ауырттыра. Ахунйәнов ут тоҡандырырға тип һүндергескә баҫты. Люстраның яуабы юҡ.

- Утһыҙ ултыраһыңмы әллә? - тине ул ҡайышына эленеп торған фонарикты ысҡындырып.

- Эйе, кисә лампочканың ҡылы өҙөлдө, бороп ҡуйырға яңыһын әле алманым.

Ахунйәнов фонарик менән яҡтыртып, күҙе менән бүлмәне тентеүен дауам итте. Бер-ике тапҡыр карауат янында ярылып ятҡан лампочкаға ҡарап-ҡарап алды ла, Димгә боролоп өндәште:

- Ҡарале, минең телефон номерын яҙып ал, бер-бер хәл булһа, шунда уҡ шылтыратып хәбәр ит. Бында минең күҙ-ҡолағым бул.

Лейтенант номерын яҙҙыртҡас та, хушлашмайынса, өйҙән сығырға итте. Ишек төбөндә ниҙер хәтерләп туҡтаны ла, кире боролоп, өҫтәлдә ҡағыҙ ҡалдырҙы. Баяғы малайҙың фотоһы һәм ҡылыҡһырламаһы. Дим уға ҡарамаҫҡа тырышып, брошюраны сүп-сар кәрзиненә ташланы.

Бөтөнләй ҡараңғылай башланы. Яҡындағы көнкүреш тауарҙары магазинына барып етеп, яңы лампочка алырға кәрәк. Ә бәлки, солан тумбочкаһында тағы берәү барҙыр? Юҡ, Дим уны асып та торманы. Уға тышҡа сығыр өсөн һылтау кәрәк. Былай ҙа ҡасандан бирле саф һауа һулағаны юҡ. Асыҡтырған да, бешеренә башлаһаң - төн етә, ә лампочка үҙенән-үҙе янып китмәҫ.

Эңер. Офоҡ был мәлдә ғәжәп төҫтәргә буялып, төрлө сүрәттәргә инә. Ҡаршылағы ике күп ҡатлы йорт булмаһа, күренеш тағы ла матурыраҡ булыр ине. Уң яҡтағы, төҙөлөп бөткәне һәм кешеләр йәшәгәне, инде үҙ уттарын тоҡандырған, ә һулдағы - әле төҙөлөп бөтмәгәне, тәҙрә булырға тейешле урындан ҡояш нурын үткәреп, пейзажға ниндәйҙер йәм өҫтәй, тип әйтергә була. Дим ишеген бикләп, боролоу менән ҡолап китә яҙҙы, тупһа төбөндә генә Тамара әбей артыш яндырып өшкөрөнөп йөрөй. Си Цзиньпин урамында ҡапҡа, ҡоймалар тыш яҡтан ғына бар ул. Ә урам эсендәгеләре күптән сереп бөткән, кемелер бөтөнләй төҙөмәгән. Тау битләүе бит, унда былай ҙа йөрөүе ауыр, баҡса сәсеү тураһында һүҙ ҙә юҡ. Шуға күрә күршеләр ҙур коммуна кеүек йәшәй.

- Тамара инәй, нимә эшләйһегеҙ ул?

- Айналайым! Айналайым! - әбей тотҡан артыш ботағын солан ярығына ҡыҫтырып ҡуйҙы. - Төнгә ҡарай ҡайҙа сығып бараһың?

- Лампочка алырға ине, шуға магазинға сыҡтым.

- Оҙаҡ йөрөмә, был һаҫыҡ күлгә албаҫты эйәләгән. Үҙем күрҙем, шунда сәсен тарап ултыра ине. Теге малайҙы ла шул күкрәге менән баҫып үлтергән. Һиңә ҡыҙ ҡиәфәтенә инеп яҡынлаһа, өйөңә индерә күрмә! Яңғыҙҙарҙы ярата ул. "Ҡайҙан килдең, шунда кит!" тип ҡысҡыр. Мине һораһа, өйҙә юҡмын, уны күрмәнем, тиң. Барыбер ишек асмайым. Кисә башта миңә килеп киткәйне. Әбей көсһөҙ, тип уйлағандыр.

Ҡарсыҡ үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә өйөнә табан атланы. Дим көлмәскә тырышып, Тамара менән ризалашты, әммә ул арты менән боролғас та артышты һүндерергә тотондо. Эсе тәмле, әлбиттә, әммә уты таҡта соланға күсеп ҡуймаһын. Бындай күрше менән йәнәш торғанда дүрт күҙ менән тирә-йүндә ҡарарға кә-

рәк, йолаларын үтәйем тип, янғын сығарып ҡуймаһын. Албаҫты, имеш. Цивилизация етеү менән барлыҡ мифик заттар күптән ҡаланан тайған инде. Ололар быны шайтандарҙың техник прогрестан ҡурҡыуы менән аңлата. Дим фекеренсә, боронғо ышаныуҙарҙы фән һәм логика юҡ иткән. Әммә ҡайһы саҡ ҡала урамдарында ниндәй генә персонаждар осрап ҡуймай.

Бынау урамда йәшәгән кәнтәйҙе генә алайыҡ. Дим ҡапҡа артына сығыу менән уны күреп ҡалды. Быҙау ҙурлығындай аҡ этте нисек күрмәҫһең? Быуаҙ сағында ул бөтөнләй йыуанайып китә. Бәлки, ул да берәй ен-пәрей малылыр? Дим бында бер йыл йәшәй, ә кәнтәй хужаһын һаман асыҡлай алмай, ул йә бер өй алдында, йә икенсе өй алдындағы ағас төбөндә ята. Эт һирәк өрә, әммә өрә башлаһа, янына килеүе лә, урамда йөрөүе лә ҡурҡыныс була. Уның башында ниҙәр булғанын белеп булмай бит. Бөгөн, ярай, шым ята. Дим ҡулдарын кеҫәһенә тығып, сауҙа үҙәге яғына атланы.

Көҙҙөң сағыу мәле. Ағастарҙың япраҡтары тулыһынса һарғайған, әммә ергә ҡойолмай, ҡупшы ғына булып тора бирәләр. Ботаҡтар араһында йәшенгән прожекторҙар ҙа шундай уҡ һарғылт нур һибә. Японияға кешеләр сакура сәскә атҡан мәлгә барып хайран ҡалһа, Си Цзиньпин урамына көҙөн килеүселәр шулай уҡ ғәжәпләнеүен тыя алмаҫ.

Димдең уйҙарында күрше әбейҙең хәбәре уралды. Бит донъяға уның күҙлегенән ҡараһаң, Өфө урамдарында ысынлап та мифик заттарҙы осратырға мөмкин. Киске ваҡытта парк буйлап йүгерергә сыҡҡан ҙур мускуллы ир торғаны менән алпамыша, ә күптән түгел янғын һөҙөмтәһендә буш ҡалған ярым емерек йорт янында торған аҡ плащлы ҡарт - шул өй эйәһе.

Был кисен Димгә осраған ҡатын айырыуса әкиәттәге әҙәмдәрҙең береһенә оҡшаған ине. Әйтерһең дә, күл параллель донъяға ишек асҡан һәм хәҙер унан теләһә кемдәр иреккә сыға. Фастфуд һатҡан кафела ултырған ҡарсыҡ тураһында һүҙ. Ябай ҡарсыҡ түгел ул, торғаны менән убыр. Урынды ишек төбөнән алғанға һәр инеүсе һәм сығыусы менән иҫәнләшеп ултыра. Ашарға алыусыларҙы ла йылтыр күҙҙәре менән оҙатып, уларға ниндәйҙер һүҙ өндәшә: "Эх, йәштәр, ҡалай тәмле нәмә ашайһығыҙ", "Ҡана, бургер төргән ҡағыҙҙы ялап ҡуяйым", "Миндә лә май булһа, ошолай тәмле бешерә беләм". Һуңғы һүҙҙәр Димгә ҡарап әйтелгәйне. Егет унан ерәнеп ҡуйҙы: бахыр, асығып ултыралыр, тик мин барыбер бүлешмәйем. Убыр күпмелер ваҡыт Димгә ҡарап, уның сәйнәгәнен күҙҙәре менән йотоп ултырҙы, аҙаҡ йәштәр бушатҡан өҫтәлдә ятҡан ҡалдыҡтар яғына юлланды. Аппетит боҙолдо, әлбиттә, әммә Димдең ашҡаҙанына үлмәҫлек ризыҡ төштө, сәфәрҙе дауам итергә кәрәк. Лампочка алырға сыҡты бит.

Сауҙа үҙәгендәге "Барыһы ла 50 һумға" тигән ерҙән әйберен алғандан һуң, Дим иғтибарын күрше кибеткә йүнәлтте. Бында ҡорал һаталар. Ул йыш ҡына эсенә инеп, төрлө бысаҡ, пистолеттар ҡарарға ярата. Кеҫәлә аҡса бар, әлбиттә, әммә уйынсыҡ өсөн меңәрләгән һум ҡалдырыу, нисектер, дөрөҫ тойолмай. Тик бөгөн икенсе осраҡ. Кисәге ҡысҡырыу тауышын һәм өй тапҡырында табылған малай кейеме тураһындағы уйҙарҙан һуң Дим үҙенә пистолет алып ҡуйҙы. Был модель мөмкин тиклем ысын ҡоралға оҡшаған һәм көслө тауыш сығара. Яраламаһа, ҡурҡытыр. Исмаһам, быҙауға оҡшаш кәнтәй янынан үтеүе ҡурҡыныс булмаҫ.

Егет, яңы һатып алған әйберҙәре менән ҡайтырға ашыҡты. Киске ун бер тулмаҫ борон лампочканы алыштырып, теге йоланы үтәй һалырға кәрәк. Был бит ябай процедура түгел, ә минең менән барыһы ла яҡшы, хәйерле төн, һин яңғыҙ түгел, тигәнде аңлатҡан өс мөһим һөйләмде еткереү ысулы. Быны ҡаршылағы йорттоң дүртенсе ҡатында ла өс тапҡыр ут һүнеп, өс тапҡыр кире янды. Барыһы ла яҡшы, барыһы ла, ғәҙәттәгесә. Ә кисәге малай һыу инергә уйлаған да, сисенгәс, берәй эттән ҡурҡып ҡасып киткәндер. Әгәр ҡысҡырыу бөгөн ишетелһә, Дим мотлаҡ сығыр. Хәҙер пистолетлы булғас, ул теләһә кемгә ярҙам итә ала. Албаҫтыны ла үҙе баҫтырыр.

Төн тыныс үтте, киләһе көн дә ғәҙәттәгеләренән айырылманы. Шул уҡ дүрт стена һәм шул уҡ Дим. Дүшәмбе иртәһе генә ҡалғандарына оҡшаманы. Был таңда ла тәҙрәгә Гөл шаҡылдатты, тик элекке кеүек бармаҡтары менән түгел, ә йоҙроғо менән. Егет шунда уҡ смирно баҫты. Ҡорғанды асҡанда Гөл ҡысҡыра башлаған ине. Уны теге аҡ эт ҡурҡытҡан. Яман өрә шул. Дим ҡыҙҙы өйөнә индереп, сәй эсерҙе, тынысландырҙы һәм улар бергә туҡталышҡа сыҡты. Ҡояш теләр-теләмәҫ кенә офоҡтан күтәрелеп килә. Был мәл, ғәҙәттә, һыуыҡ була, йәштәргә оҙаҡ өшөп торорға тура килмәне. Кискеһен дә күрешеп, бергә ҡайтырға һүҙ ҡуйышҡас, һәр кем үҙ туҡталышында сыҡты. Гөл - уҡыуға, Дим - эшкә.

Димгә лә ҡайһы берҙә университетҡа барып күренеү ҡамасауламаҫ ине. Ул бит магистратураға хәрби хеҙмәткә бармаҫ өсөн инде, ә былдай мөнәсәбәт менән ул тиҙ ҡыуылып, туфлиһын берцыға алыштырыр. Бында ла уны бер ни тотмай кеүек, көнө буйы аяғүрә тороп, һирәк ингән клиентҡа теге йәки был техника тураһында һөйләү матур перспективалар вәғәҙә итмәй. Аспирантураға инеп, фән кандидаты ла булырға уйы юҡ. Ни бары Гөл һәм өмөт.

Дим түҙемһеҙлек менән кис етерен көтөп алды. Ниһайәт, улар Гөл менән осрашып, бергә ҡайтырға тейеш. Туҡталышта бит уларҙы эт көтә, ә егет ҡыҙ алдында бер йәндән дә ҡурҡмай. Тик магазинға инеп, сосиска алырға кәрәк, эт осраһа - уға, осрамаһа, Димгә булыр.

Йәштәр бер-береһен "Башҡортостан" ҡунаҡханаһы алдында тапты. Әгәр осрашыуҙар үткәрергә икән, тик был майҙанда, сөнки был ҡунаҡханала үҙ замаһында ниндәй генә юғары вазифалы ҡунаҡтар һәм эмигранттар булмаған, ә ҡаршылағы концерт залында беренсе башҡорттар ҡоролтайы ла, суверенитетты ҡабул итеү ултырышы ла уҙған. Өфөнөң иң етди урыны был, ә ғашиҡтарға мин Ленин урамының Коммунистик урамы менән киҫешкән ерендә осрашырға кәңәш итер инем. Бында бит "ноленсе километр". Әгәр тормош юлын бергә үтергә икән, ул тап ошонда башланырға тейеш.

Өфө кистәре айырыуса матур. Ҡояш байыу менән мең төрлө фонарҙар ҡабына, уларҙың нуры тарихи биналарҙы яҡтыртып, иң йылы атмосфера тыуҙыра. Ҡараңғы таш йорттарға килешә, һәр хәлдә, ҡала үҙәгендә. Картинаны тулыландырып, кешеләр йөрөй. Гөл бер-ике размерға ҙурыраҡ кеүек тойолған ҡара пальто кейгән, муйынына шарф ураҡан, сәсе ялбыр, ә аяғында ҡыҙыл кеды. Элек былдай өҫ кейеме менән аяҡҡа мотлаҡ итек йә туфли кейгәндәр, ә хәҙер өйҙә нимә табылды, шуны эләктер ҙә, тышҡа сыҡ. Хәйер, бында ла үҙ матурлығы бар...

Дим Гөлгә ҡасандыр ятлаған шиғырҙарын уҡый, тик бына бәлә, ул һәр әҫәрҙең йә башын, йә аҙағын ғына иҫләй, шуға ла ваҡыты-ваҡыты менән шымып ҡала һәм улар артабан тынлыҡта атлауын дауам итә. Тик ҡыҙ быны һиҙмәй ҙә, ул бар иғтибарын телефонына йүнәлткән, күрәһең, мөһим нәмә ҡарай.

- Сәләм, һөйөклөм, һине һағынып та өлгөрҙөм, - Гөлдөң оҙон тынлыҡтан һуң беренсе һүҙҙәре яңғыраны. Арыуыҡ юл үтеүҙәренә ҡарамаҫтан, Дим был өндәшеүгә шат ине.

- Сәләм! - тине ул.- Мин дә һине һағынып өлгөрҙөм. Гөл егеткә аптыраулы ҡараш ташлап, телефонының экранын күрһәтте. Унда видеошылтыратыу аша бәйләнешкә ингән элемтәсе йөҙө күренде. - Таныш бул, был - Дим. Ул мине оҙата, иртәнсәк бер эт ҡурҡытты, тип һөйләгәйнем бит. Дим шул туҡталыш янында йәшәй. Һин дә таныш бул, был минең егетем - Марат. Беҙ уның менән ай тирәһе осрашабыҙ. "28 көн" тигән яуап ишетелде телефондан...

Артабанғы юлда Дим бөтөнләй шымып ҡалды. Уйлана торғас, бөтә шиғырҙарҙың да онотолған юлдары иҫкә төштө. Тик Гөлгә былай ҙа күңелле ине, ул ҡолаҡсындарын тағып, Марат менән аралашыуын дауам итте. Егет йәнәшәләге йорттарға ҡуйылған таҡтаташтарҙы уҡый башланы. Бына был йортта Сергей Довлатов тыуған, ул йортто яҙыусы "Ундервуд"та соло баҫҡан саҡта бер тапҡыр булһа ла иҫенә төшөргәнме икән? Ә был йорттоң таҡтаташында 40-сы йылдарҙа һөргөнгә ебәрелгән Эстонияның тәүге президенты Константин Пятс тороуы хаҡында яҙылған. Ҡыҙыҡ, беҙҙең герой һөргөнөн Эстонияла үткәргән, ә эстондарҙыҡы - беҙҙә. Тик Пятсты герой тип атап буламы икән? Ул бит диктатура яҡлы кеше. Ошо уйҙарға сумған Дим Аксаков урамындағы туҡталышҡа барып етеп, трамвайға ултырыуын да, Си Цзиньпин урамына барып етеүен дә һиҙмәй ҡалды.

Ҡайтыр юлда эт осраманы, шуға ла Гөл юлын яңғыҙы дауам итте. Дим ун бер тулғанын көтөп, өс тапҡыр ут һүндереп, уны кире ҡабыҙҙы ла, яуап алып, ноутбугына төбәлде. Гөл иминаман ҡайтып еткән, ярар.

**(Дауамы бар).**

*ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП*



# НӘФСЕ. ЙӨРӘК. РУХ.

## Рух

**3.** Суфыйсылыҡ ғилемендә нәфсе рухты биҙәрлек кимәлдә камил булырға тейеш, тип әйтелә. Шул уҡ ваҡытта рух күркәм итеп биҙәлмәйенсә тороп, нәфсе камил булмаясаҡ, тип тә әйтелә. Бары тик бер үк ваҡытта нәфсене камиллаштырғанда, йөрәкте таҙартҡанда һәм рухты биҙәгәндә генә кеше маҡсатына тиҙерәк ирешәләр. Шул уҡ ваҡытта нәфсеһенә тамам ҡол булғандарҙың юлына Иблес үҙҙәренә оҡшаған уҡытыусы, өйрәтеүсе сығарып, икеләтә ҡол яһай. Ундайҙар "остаз"дарының теләһә ниндәй фарманын тормошҡа ашырырға әҙер кимәлгә етә һәм ул ғәмәлде Аллаһы Тәғәлә ҡушыуы тип иҫәпләй.

**4.** Рух тәриҡәт юлы күкрәген имеүсе һәм матди донъянан азат бойондороҡһоҙлоҡ һөтөн эсеүсе сабыйға оҡшаған. Рух - ул кешенең матди донъяға бәйле сифаттарынан азатлығы. Ундай кеше Аллаһы Тәғәләгә яҡынлай. "Ҡайҙа ғына ҡараһам да, Аллаһы Тәғәләне күрәм", тигән бер суфый.

**5.** Рух һәм мөхәббәт бер бөтөн булып олғашҡанда мөхәббәт рухты алмаштыра. Рух үҙен ҡайҙа ғына эҙләһә лә, тик мөхәббәт таба.

**6.** Мөхәббәт - ул Берҙәмлек рухы ғәскәре башлығы. Әгәр ҙә ул йөрәктә үҙ ҡыуышын ҡорһа, теләк хужаларын, нәфсе эгоизмын юҡ итә.

Мөхәббәт - ул илаһи тартылыу көсө. Әгәр ҙә ул йөрәккә юл тапһа, йөрәкте Аллаһы Тәғәлә менән тоташтыра.

Мөхәббәт - Берҙәмлек еренән осоп килеүсе ҡойон, ул йөрәктең күп төрлөлөк көлөн һәм ҡоромон осороп алып китә.

Мөхәббәт тик үҙен ҡабул итергә әҙер булғандың ғына йөрәгендә ярала.

Мөхәббәтте ҡабул итергә әҙерләнеүсе кеше был тойғо унаң саҡырыуын ҡабул итһен өсөн йөрәгенән тоғролоҡ һеперткеһе менән теләктәр көлөн һәм ҡоромон һепереп түгергә тейеш.

Йөрәктең мөхәббәткә әҙерләнеүе - тәриҡәт юлы, ҡабул итеүе - хәҡиҡәт юлы.

Мөхәббәте булмаған йөрәк - йөрәк түгел, шул уҡ ваҡытта мөхәббәт һәр бер йөрәккә килмәй.

Мөхәббәт йөрәккә үҙе килә, уға өйрәнеп булмай. Әгәр ҙә йөрәк нәфсенән таҙарған булһа, мөхәббәт килеүен шундуҡ тоя. Мөхәббәт нәфсе һәм теләк ҡоло булған йөрәккә түгел, янып көлгә әйләнгән йөрәккә килә. Мөхәббәт өсөн ғашиҡ кешенең һәр төрлө бәйҙәрҙән азат булған ихлас йөрәге һәм рухы талап ителә.

**7.** Теләк ҡоло булған кеше суфый була алмай, сөнки мөхәббәт менән нәфсенең бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ. Мөхәббәт - йәшәйештең алхимияһы.

## Тәрән аң

Рух камиллығы тәрән аңға алып килә. Тәрән аң рухтан да юғарыраҡ. Тәрән аң - фәрештә интеллекты, ул рух менән генә ҡабул ителә. Тәрән аң өсөн асылған донъя рухтан һәм йөрәктән йәшеренгән, сөнки ул донъя Аллаһы Тәғәлә биләмәһе.

Ғашиҡ булған кеше менән Хоҙай араһында тәрән һәм йәшерен сер бар, тиҙәр. Шуға күрә тәрән аң тураһында ғашиҡ булған кеше һәм Аллаһы Тәғәлә генә белә, тиҙәр. Ә серле аң хаҡында тик Аллаһы Тәғәлә генә белә. Тәрән аңдағы мәғлүмәтте һүҙ менән аңлатып булмай. Тәрән аңды өс төргә бүләләр:

**1.** Башҡаларҙан йәшерелгән тәрән аң. Унын өс шарты була:
- хеҙмәт итеү ҡағиҙәләрен белеү;
- башҡаларҙың хоҡуғын таныу;
- башҡаларға зыян килтермәү.

Был шарттарҙы үтәмәгән кеше аңын йәшерә алмай.

**2.** Фәрештәләрҙән йәшерелгән тәрән аң. Унын өс сифаты була:
- ҡабул итеүсенең йөрәге киңәйеүе;
- Аллаһы Тәғәлә алдында яуаплылыҡтан ҡасыусыларҙың аҡланыуҙарын ҡабул итмәү;
- Аллаһы Тәғәлә йомартлығы алдында баш эйеү.

**3.** Үҙ-үҙендән йәшерелгән тәрән аң.

Йөрәк түрендәге аң кимәленә еткән суфыйҙар камиллыҡтың иң юғары нөктәһендә. "Мин хәҡиҡәттең үҙе!" тигән Халладж, ә Баязит "Минә дан. Иң юғары кимәлгә ирештем!" тип ҡысҡырған.

**(Аҙағы. Башы 12-се һанда).**

✓ *Скандинавса атлау менән шөғөлләнгәндә организмдың 90 процент мускулдары хәрәкәткә килә, һөҙөмтәлә кеше остеохондроздан, сколиоздан, үпкә сирҙәренән, һимереүҙән, ревматоид артриттан арына.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛА ТАПҠАС...

## әсәйҙәр аҡыллана

■ Ғаиләлә бала тыуғандан һуң йоҡо туймау, бала ҡарау менән бәйле эштәр әсәнең аҡыл һәләттәренә кире йоғонто яһай тигән ҡараш йәшәй. Әммә ғалимдар быныӊ тап киреһен иҫбат итә: бала тапҡандан һуң ҡатын-ҡыҙҙың мейеһе үҫешә башлай икән. Яңы тәр мәғлүмәттәр, яуаплылыҡтың артыуы һәм әсәлек инстинкты баш мейеһе күҙәнәктәренең үҫешенә килтерә. Америка психологик ассоциацияһы ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, бала тыуғандан һуң 3-4 ай үткәс тә баш мейеһенең ҡарарҙар ҡабул итеүгә, тойғолар өсөн яуап биреүгә яуаплы бүлектәренең күләме ярайһы уҡ ҙурая. Белгестәр әйтеүенсә, оло кешенең бындай ҡыҫҡа ваҡыт эсендә баш мейеһе үҙгәрә алмай. Тимәк, хәстәрлекле әсәйҙәр көндән-көн аҡыллана бара, ти улар.

■ Көн һайын ашханала тукланып йөрөү организм өсөн зарарлы, тип иҫкәртә Лондон университеты ғалимдары. Оло кеше өсөн көндәлек тоҙ дозаһы 6 грамдан артмаҫҡа тейеш, ә ҡайһы бер ашханаларҙа уның күләмен ике тапҡырға арттырып һалалар. Ғалимдар 500-ҙән ашыу кафе һәм ашхананы тикшергәндән һуң, бер тәрилкә ашта тоҙҙоң бер ҡап чипсыға ҡарағанда 99 процентҡа күберәк булыуы асыҡланған. Тоҙҙо артыҡ ҡулланыу ҡан тамырҙарына кире йоғонто яһай һәм һөҙөмтәлә йөрәк ауырыуҙарына килтереүе ихтимал. Тикшеренеүселәр аҙыҡ-түлеккә иғтибарлыраҡ булырға һәм йышыраҡ өйҙә ашарға тәҡдим итә.

■ Фисташка сәтләүеген күптәр үҙенсәлекле тәме өсөн үҙ итә. Был сәтләүек йөрәкте күп сирҙәрҙән дә һаҡлай икән. Джорд Мейсон университеты кардиологтары белдереүенсә, фисташка организмда "насар" холестерин бүленеп сығыуын тотҡарлай, шулай уҡ йөрәктең ишемик ауырыуы барлыҡҡа килеүен 9 процентҡа кәметә. Табиптар көн һайын был сәтләүек ашаған кешеләрҙә тикшергәндән һуң уларҙың организмында холестерин кимәле 12 процентҡа кәмеүен асыҡлаған.

■ Британия ғалимдары ҡыҙыҡлы тәжрибә үткәргән. Ир-егеттәргә төрлө ҡатын-ҡыҙҙарҙың фотоларын күрһәткәндәр һәм аралаһынан иң матурын һайлап алырға ҡушҡандар. Күптәр тән ауырлығы ҡабул ителгән норманан ауырыраҡ ғүзәл заттарҙы һайлаған. Был матурлыҡ идеалдары артынан ҡыуып, үҙҙәрен аслыҡ менән яфалаған ҡатын-ҡыҙҙарға бер иҫкәртеү булып янғыраһын ине, ти улар.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, тәбиғи рәүештә уяныу будильникка ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Быныӊ өсөн бер үк ваҡытта йоҡларға ятып, бер үк ваҡытта торорға ғына кәрәк. Ә ҡапыл уяныу организм өсөн оло стресс. Будильникты һүндереп, тағы йоҡлап китеү шулай уҡ насар, сөнки йоҡлап китергә ярҙам итеүсе гормондар уянырға ярҙам итеүселәре менән буталып бөтә, ә бынан кеше үҙен тағы ла насарыраҡ тоясаҡ.

■ Олоғайған һайын кешене йоҡоһоҙлоҡ борсой башлай. Израилдең Хайф университеты ғалимдары был проблеманы хәл итеү өсөн көн режимын боҙмаҫҡа кәңәш итә. Әгәр ҙә йоҡлар алдынан душ инергә ғәҙәтләнеп тә, был тәртипте боҙһағыҙ, мотлаҡ йоҡлай алмай интегәсәкһегеҙ, ти улар.

СӘЛӘМӘТЛЕК МӘКТӘБЕ

**Үтеп барған йәйҙең бер көнөндә Башҡортостан спорты тарихында яңы бит асылды - "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе" исемен йөрөтөүсе башҡорт бәһлеүәне, Рәсәй спортсыһы, пауэрлифтинг һәм армрестлинг буйынса спорт мастеры, 2005 йылдағы "Планетаның иң көслө кешеһе" ярышының вице-чемпионы, йәмәғәт эшмәкәре Эльбрус Ниғмәтуллин Өфөлә скандинавса атлау буйынса клуб асты. Әлбиттә, ҡайҙа Эльбрус - унда ысын тамаша, шоу-программа. Быға халыҡ инде өйрәнеп тә бөткән һәм күптәр тап уның күргәҙмә сығыштарын ҡарар, стронгмэн менән тағы бер тапҡыр һоҡланыр өсөн генә лә килә.**

# ЭЛЬБРУС НИҒМӘТУЛЛИН МЕНӘН...

## скандинавса атлайбыҙ



Тап ошо сараны көткәндәй, 40 градусҡа еткән эҫелек тә ҡапыл һүрелеп, ямғырҙар башланды. Әммә спортсылар өсөн ямғыр ни, буран ни - улар барыһын да һынау һәм тәбиғәттең сираттағы саҡырыуы тип ҡабул итә. Эльбрус Ниғмәтуллиндың яңы асылған клубы өсөн дә был һынау үҫеш нөктәһенең башы ғына булыр тип өмөтләнәйек. Изге ниәтте тәбиғәт тә хуплай бит ул - сара уҙған мәлдә күк кәнсәләре ямғырҙарҙы туктатып торорға бойороҡ бирғән, күрәһең, тап шул мәлдә илаҡ болоттар ҙа күҙ йәштәрен туктатып, ҡараштарын ергә төбәне. Әлбиттә, пандемия осоронда тамашасылар исемлек һәм барлыҡ ҡағиҙәләр буйынса ғына үткәрелде, йыйылыусыларҙың һаны 50 кешенән артманы, теләүселәр инде сараны махсус майҙансыҡтың эсенә инмәй генә күҙәтте.

Йыйылыусылар өсөн сюрпризлар ҙа әҙерләнгәйне: Башҡортостандың иң көслө кешеләренең береһе, стронгмэн Арсен Ҡорбанов 5 тонналыҡ автобусты бер нисә метр һөйрәп алып барҙы, ул ғына ла түгел, хатта икенсе тапҡыр инде автобустың эсенә 10 пассажирҙы ултыртып та йөрөттө. Шулай уҡ ул скандинавса атлау буйынса оҫталыҡ дәрестәре лә ойошторҙо: тамашасылар бер аҙ ғына ваҡытҡа булһа ла үҙҙәрен ошо спорт төрөндә һынап ҡараны, күнекмәләр башҡарҙы, сәләмәт тормош алып барыусылар сафына табан тәүге аҙымдарын яһаны.

Был көндә Эльбрус Хәмит улы нигеҙҙә сәхнәлә һәм тамашасылар араһында булды, сөнки күргәҙмә сығыштарҙы, күнекмәләрҙе уның командаһы ағзалары башҡарҙы. Сараның төп сәбәпсеһе теләүселәр менән фотоға төштө, йыйылыусылар һәм журналистар менән ихлас аралашты. Мөмкинлекте беҙ ҙә ҡулдан ысҡындырманыҡ һәм батырыбыҙға бер нисә һорауыбыҙҙы төбәнек.

➔ **Һеҙ республикала, Рәсәйҙә генә түгел, хатта донъяла билдәле шәхес, ни өсөн ҡапыл ғына үҙегеҙҙең йүнәлешегеҙҙе үҙгәртеп, скандинавса атлауҙы пропагандаларға һәм популярлаштырырға ҡарар иттегеҙ, ул һеҙҙе нимәһе менән ылыҡтырҙы?**

- Мин йүнәлешемдә үҙгәрттем тип әйтмәҫ инем, бары тик үҙ ҡыҙыҡһыныуымдың, күнекмәләремдең спектрын ғына киңәйттем. Дөрөҫөн әйткәндә, һуңғы биш-алты йылда скандинавса атлау менән ныҡлы шөғөлләнәм. Уның ярҙамында артыҡ ауырлығымдан ҡотолдом, тағы ла сыҙамлыраҡҡа әйләндем. Хәрәкәтсән булып киттем. Шулай уҡ элекке йәрәхәттәремде дауаланым. Даими йәшәү урынымды Өфөгә алмаштырыуым был йүнәлештәге эшмәкәрлегемде икеләтә үҫтерҙе, яңы мөмкинлектәр асты. Скандинавса атлау - ул сәләмәтлек өсөн иң ҙур бонус. Күптәргә спорттың айырым төрҙәре менән шөғөлләнеү тыйылһа йәки улар быңдай мөмкинлеккә эйә булмаһа, бында иһә кардио күнекмәләр менән балалар ҙа, ололар ҙа, хатта иң оло йәштәгеләр ҙә шөғөлләнә ала.

➔ **Тимәк, һеҙҙең өсөн скандинавса атлау спорт төрө генә түгел, ә дауалау физкультураһы ла?**

- Былтыр Рәсәйҙең ул ваҡыттағы Премьер-министры Дмитрий Медведев күрһәтмәһе буйынса ул Бөтә Рәсәй спорт төрҙәре исемлегенә индерелде. Шулай уҡ күнекмәләр һәм ярыштар үткәреү өсөн трассалар булдырыу һәм уларҙы сертификациялау, ярыштарҙы Рәсәйҙәге спорт саралары планына индереү бурысы ла ҡуйылды. Скандинавса атлауҙың спорт төрҙәре исемлегенә индерелеүенең тағы бер яғы бар - ярыштар һөҙөмтәләре һәм ҡуйылған нормативтарҙы үтәгән уңышлы спортсыларға "Рәсәйҙең спорт мастеры", "Халыҡ-ара класлы спорт мастеры", "Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры" исемдәре бирелеүе мөмкин.

Уның организмға ыңғай йоғонтоһо хаҡында үҙемдең миҫалымда әйтеп киттем инде, шуға күрә мин был төрҙө спорт та, дауалаусы аэробик күнекмә тип тә атар инем. Шәхсән үҙем уның икенсе вариантына өҫтөнлөк бирәм һәм үҙенсәлеген шунда күрәм, сөнки скандинавса атлау менән шөғөлләнгәндә организмдың 90 процент мускулдары хәрәкәткә килә, һөҙөмтәлә кеше остеохондроздан, сколиоздан, үпкә сирҙәренән, һимереүҙән, ревматоид артриттан арына, арҡаның һәм муйындың хроник ауыртыуҙары һ.б. бөтә.

➔ **Өфөлә скандинавса атлауҙың бер нисә клубы эшләп килә. Һеҙ улар менән танышмы һәм хеҙмәттәшлек итәһегеҙме?**

- Эйе, уларҙың ҡайһы берҙәре менән танышмын. Осрашыуға, фекер алышыуға һәр саҡ асыҡмын һәм шатмын. Ҡайһы бер ваҡыт күнекмәләребеҙҙе бергәләп тә үткәрәбеҙ. Әммә беҙ берберебеҙгә ҡамасауламайбыҙ тип әйтә алам, сөнки төбәк етәкселегенең фекеренсә, спорт менән һәр кем шөғөлләнә алырға һәм ул һинең йортондоң эргәһендә генә булырға тейеш. Беҙ халыкты сәләмәт тормош алып барыуға, физик культура, был осраҡта скандинавса атлау аша даими шөғөлләнеүгә мөмкин тиклем күберәк ылыҡтырырға тейешбеҙ. Шуға күрә проектты тормошҡа ашырыу барышында тағы ла яңы клубтар асыу, теләүселәр өсөн бушлай күнекмәләр үткәреүҙәр ҡаралған.

➔ **Өфөлә спорттың барлыҡ төрҙәре буйынса ла ярыштар, фестивалдәр үткәрелә. Башҡортостанда скандинавса атлауҙы үҫтереү буйынса ниндәй пландарығыҙ бар, власть органдары менән ҡеүәтле Башҡортостан командаһын һәм ныҡлы база булдырыу буйынса һөйләшеүҙәр алып бараһығыҙмы?**

- "Эльбрус Ниғмәтуллин менән скандинавса атлау мәктәбе" - тап ошо спорт төрөн үҫтереүҙә беренсе аҙым инде. Бында мин төп йүнәлеште халыкты күпләп саф һауала даими күнекмәләргә йәлеп итеүҙә күрәм. Был - диванда гаджеттарға текәлеп ултырыуға ҡарағанда файҙалыраҡ һәм үҙенсәлеклерәк шөғөл - аралашыу һәм сәләмәтлегеңде нығытыу мөмкинлеге. Шуға күрә Өфөлә генә түгел, Сибай, Нефтекама, Учалы, Стәрлетамаҡ, Белорет һ.б. ҡалаларҙа ла оҫталыҡ дәрестәре, күнекмәләр үткәргә ниәтләйбеҙ. Әйткәндәй, күнекмәләр бушлай, хатта таяҡтары булмағандарға ҡуртымға таяҡтар ҙа биреп торабыҙ. Шулай уҡ әгәр скандинавса атларға өйрәнергә теләүселәр 10 кеше йыйыла икән, районлдарға ла сығыу мөмкинлеге бар.

➔ **Һеҙ һәр йыл республикала уҙғарылып килгән ярыммарафон һәм марафондарҙа ҡатнашаһығыҙ. Быйыл ниндәй сифатта ҡатнашасаҡһығыҙ - йүгереүсе булараҡмы, әллә скандинавса атлаусы булараҡмы?**

- Быйыл, моғайын да, скандинавса атлаусы булараҡ ҡатнашырмын, сөнки былтыр Халыҡ-ара Өфө марафонының 5-се юбилей сараһында баш ҡаланың таяҡтар менән атлаусылары беренсе тапҡыр ҡатнашты һәм быйыл да был традицияны дауам итергә, уны артабан үҫтерергә кәрәк тип уйлайым.

➔ **Рәсәйҙә скандинавса атлау федерацияһы эшләп килә, улар менән бәйләнештә тораһығыҙҙыр?**

- Эйе, уның президенты Сергей Мещеряков менән осраштыҡ, хеҙмәттәшлек тураһында һөйләштек, киләсәккә уй-хыялдар, пландар менән бүлештек.

➔ **Хыял тигәндән, бөгөнгә иң ҙур хыялығыҙ ниндәй?**

- Өфөнөң һәр икенсе кешеһе минең күнекмәләргә бер тапҡыр булһа ла килһен ине.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләнә.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ӨЛӘСӘЙЛЕ ҒҮМЕР МИҘГЕЛДӘРЕ

**"Атаң барҙа - ил, атың барҙа юл таны" тигән әйтемдең мәғәнәһе бик ҙур. Борон-борондан халҡыбыҙ ер-һыу атамаларына, уларҙың килеп сығыу тарихына ҙур иғтибар бүлгән. Минең өләсәйем дә беҙгә был тәңгәлдә ҙур тәрбиә бирҙе. Бер аҙ тамаҡ ялғарлыҡ аҙыҡ ала ла, арҡаһына дәү киндер тогон артмаҡлап, беҙҙе, ейән-ейәнсәрҙәрен, күрше-тирә балаларын эйәртеп, ер-һыу танытырға алып сыға торғайны.**



Тау эргәләтеп кенә Тутинәй сабыны аша Арҡаға йәки Мәмбәтһыпы буйлап Һаҡҡарағайҙы үтеп, Шәмәй һаҙы аша Ҡарагисеү буйына төшәбеҙ. Бәләкәй йылға аша Заһиҙә үҙәгенән Элгеләүгә күтәреләбеҙ. Йылға буйында балтырған, шыма көпшә, ҡаҡы, тауҙа йыуа, ҡуҙғалаҡ өҙөп, иҫке ауыҙға яңы аш, ауырыуым булһа, тиҙерәк ҡас, тип һамаҡлай-һамаҡлай ашайбыҙ. Был тәбиғәт тәғәмдәрен һаҡ ҡына, тамырына зыян итмәй генә, ерлоҡлоҡ ҡалдырып өҙөргә ҡуша торғайны өләсәйем. Йөрөгән еребеҙҙәге һәр ҡалҡыулыҡтың, түңгәктең, инештең атамаһы нисек килеп сыҡҡанын һөйләй. Уларҙың һәр береһендә башҡорт халҡының боронғо йәшәйешен күрергә, сырамытырға мөмкин. Кәбән һалғанда Бибихәснә өләсәйебеҙ бала тапҡанын, уны ҡотоҡта йыуындырғанын да ошонда беләбеҙ. Үрге һәм Түбәнге Әүжән урыҫтарының мал көтөүен, 1914 йылдарҙа алтын эҙләгән заводчиктарҙың ауылды яндырыуын, Шәмсетдин олатайҙың нисек итеп дегет ҡайнатыуын да тәфсирләп һөйләй ине.

Күскәнҡарағай, Күкһыуатылған, Ирек ҡотоғо, Симун, Күҙгәнәк, Алтынмөйөш яландары, Шәмәй һаҙы тип аталған урындар ҙа бер быуатлыҡ тарих һаҡлай. Күп ер-һыу атамалары заманына ҡарап үҙгәреп тә бөткән инде. Өләсәйем һөйләгән ошо ваҡиға күңелдә әле һаҡлана: һуғыш ваҡытында ауылдың бер нисә ҡатын-ҡыҙы илеккә, йәғни ҡыр кәзәһенә һунарға сыға. Ҡырағай хайуандарҙы баҫтырып, арытып, һуғып, һуйып алып ҡайтып, бөтә ауылға таратып бирәләр. Ул ерҙе беҙ бала саҡта "Кәзә һуйған ер" тип йөрөтә торғайнылар. Хәҙер унан оло юл үтә. Үткән быуаттың 50-60-сы йылдарында бесән мәлендә үҫмер малайҙар ат йөҙҙөргән күлдән әле бер нәмә лә ҡалмаған. 85-90-сы йылдарҙа ул тирә һаҙмат булып, ҡарағат күп була торғайны. Тора-бара был күл эргәһендәге яланға бойҙай түгелеп, Буҙайғырбатҡандан Бойҙайғүленә әйләнде.

Өләсәйем йыш ҡына: "Беҙҙән һыу ҙа ҡасыр инде. Алтын тапап, һыу эҙләрҙәр, тип яҙылған анауы минең ҡалын китабымда", - ти торғайны. Ул үҙе бер класс та уҡымаһа ла, гәрәпсә, башҡортса уҡый белә ине. Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева әҫәрҙәрен яратты. Һорағандарға доғалар яҙып бирҙе. Үлән, доға менән дауалау һәләте лә бар ине. Биш намаҙын ҡалдырмай уҡыны.

Ә һыуға килгәндә, ысынлап та, ҡаса башлаған ул. Мәһәҙей ауылы тирәһендәге үрҙә атап кителгән шишмә-йылғалар юҡ. Һыу булмағас, үҫемлектәре лә ҡорой. Ҡыҫыр ерҙәр күбәйә. "Юлһыҙ ерҙә йөрөм булмаған кеүек, һыпылар ҙа, юлдарын таҙалап, асып тормаһаң, үпкәләп, ер аҫтына ҡаса", тип эргә-тирәһен таҙалатып, ҡый-ғыпырын бер ергә өйҙөрөп ҡуя торғайны ҡәҙерле кешебеҙ. Булған ниғмәттең ҡәҙерен белергә кәрәклеген тыҡып ҡына торҙо.

Ер-һыу танырға сыҡҡанда иң көтөп алынғаны - берәй матур урынға туҡтап, өләсәйҙең тоҡсайындағы теге тәмле икмәктә елек-емешкә ҡушып ашау ине. Ял иткәндә лә тик ултырмайбыҙ. Мәҫәләлән, бармаҡтарҙы эшләтәбеҙ: "Башбармаҡ бура бурай, урта бармаҡ утын яра, һуҡ бармаҡ һуған әрсей, сығанағы сығып ҡаса, сәтәкәйе сәпәкәй итә", тип уйнайбыҙ. Оҙон тынлы, оҙон ғүмерле булыр өсөн: "Етегән тигән ете йондоҙҙо ете уратып әйтһәм, һауап була", - тип бер тынала әйтергә тейешбеҙ.

Ялға туҡтағансы өләсәйемдең тоғо кәрәкле үлән, япраҡ, сәскә менән тулған була ине. Ҡайтҡанда Элгеләүгә һуғыларға тырышабыҙ. Йылдың дүрт миҙгелендә лә унда үҫкән ҡарағастарҙан һағыҙ сәйнәргә була. Уны алыр өсөн өләсәйҙең йәтеш кенә бәкеһе бар. Ул күрһәткән ерҙән үҙебеҙгә таҙа итеп, ҡабығын ҡушмай ғына соҡоп алабыҙ. Һағыҙҙы ауыҙҙы шапылдатмай, иплә генә сәйнәргә тейешбеҙ. Оҙаҡ сәйнәргә ярамай: тел иҙелеүе, яңаҡ талып, тартышыуы бар.

Ҡайтҡас, үләндәрҙең киптергәнен киптереп, быҡтырғанын быҡтырып, тоҡсайҙарға һалып, соландағы, келәттәге урҙаға элеп ҡуя. Беҙ уларҙы тышынан еҫкәргә ярата торғайныҡ. Диндар өләсәйебеҙ ил-йортҡа тыныслыҡ, йәнтәнебеҙгә сәләмәтлек, һәр кемебеҙгә күркәм холоҡ-фиғел, эш-аш бәрәкәте һорап, аҡ намаҙлығына баҫһа, беҙ эргәһендә шым ғына ултырабыҙ. Беҙгә лә ризыҡ-тәғәме өсөн рәхмәтле булырға ҡуша. Бөгөн ошоларҙы иҫләп, өләсәй беҙгә бик ҙур тормош мәктәбе биргәнлеген, уның менән үткәргән ваҡыттың иң бәхетле миҙгел булыуын аңлайым...

**Фәнүзә ИШБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**

ШАНДАУ

# ҺӘР ЯУЫЗЛЫҠҠА...

## хөкөм бар



**Лена Абдрахманованың "Әжерен ҡайтарып тора" тигән мәҡәләһен уҡығас, шул теманы дауам итеп, күңелдә йөрөгән бер хәлде бәйән итмәксемен. Был тарихта әҙәмдәр мөнәсәбәте түгел, ә кешенең йәнлеккә ҡылған ҡылығы һүрәтләнә.**

Бер инәй ҡаланан килгән үҫмер ейәненә эттәрен үлтерергә ҡуша. Туранан-тура ҡушмай, әммә бынан бер нисә йыл элек көсөк көйө килеп юлығып, хәҙер кәрәкмәй булып сыҡҡан этте ҡайҙа итергә белмәүен ҡат-ҡат ҡабатлай, "Күп ашай, ныҡ ҙурайҙы ла китте, бәйле тороп уҫалланды, яҡын барырға ла ҡурҡам", тип һөйләнә икән. Ейәне өләсәһенә ярҙам итергә теләп, ике иптәшен саҡырып алып, этте теге донъяға оҙатырға булғандар. Башта эт аҙығына энәләр һалып ашатҡандар. Тик маһмай ҡапыл ғына үлмәгән, ауыртынып, сыйылдап ятып киткән. Малайҙар этте таш менән бәргеләгән. Йәнлек ҡанға туҙған, әммә һаман бирешмәгән. Унан баһрау менән төрткөләгәндәр. Бәйҙә торған мәхлүк тамам хәлһеҙләнгән, тик һаман ҡаршы тора икән. Шулай туҡмай-туҡмай торғас, ҡаршылаша алмаҫлыҡ булғас, ихатанан ситкә сығарып аҫҡандар...

Был юлдарҙы уҡыуы ла ауырҙыр, аңлайым, әммә ысынында шулай булған. Ҡарап торған һәм тәфсирләп һөйләгән шаһиттары ла балалар булып, улар түкмәй-сәсмәй еткерҙе. Бахыр эт, ниһайәт, был ҡанһыҙ ҡулдарҙан ҡотолоп, йәне күккә осҡандыр инде...

Был тарихтың дауамы бар. Шул хәлдән һуң бер нисә йыл үткәс, әлеге малайҙар егет булғас, теге ейәнде бик ныҡ туҡмап, язалап үлтереп китәләр. Тикшереүселәр ғәйепләләрҙе таба алмай. Әммә, ишетеүебеҙсә, егетте тәнә буйына үлмәгән килеш язалағандар. Ерләүселәр, йән ере ҡалмағайны, танырлыҡ түгел ине, тип һөйләнә. Шул ваҡыт ауылдағы уны һәм эт тарихын белгәндәр, һөйләшеп ҡуйған шикелле итеп, "Эт ҡарғышы инде" тигән һығымта яһанылар...

Унан тағы бер миҫал. Бер һунарсы ағай һарыҡтарын тамаҡлаған бүреләрҙең берәүһен тотоп, терелэй тиреһен һыҙырып, ҡапҡа төбөнә бәйләп ҡуя. Бүре күпмелер ваҡыт ҡанһырап ятып йән бирә. Һәм күп тә үтмәй, һунарсы котельнаяла эҫе һыуға бешеп, ана шул үҙе язалаған бүре кеүек, ҡан һауған күҙҙәре менән генә тилмереп ҡарап ятып бәхилләшә. Был осраҡта ла күптәр "Кейекте шул хәтлем язаламаһа була ине, бына ҡөһөрө төштө", тинеләр...

Ошоларҙан сығып (тормошта миҫалдар күп), бар ҡылыҡтарҙың да, яҡшының да, ямандың да, йыһандан шандау алыуын онотмаҫҡа кәрәктер. Донъя хаос хәлендә түгел, ул бер теҙмәгә һәм алыш-бирешкә (яҡшылыҡ-яҡшылыҡ, яуызлыҡ-яуызлыҡ) ҡоролған. Бигерәк тә һинән көсһеҙ булғандарҙы, үҙен яҡлай һәм ҡаршы тора алмағандарҙы ҡыйырһытыу хаяһыҙ һанала. Эт булһынмы, ҡыҙҙармы, ололармы - улар һинең кеүек үк тере йән. Яңылышлыҡтан, сараһыҙҙан осраҡлы хилафлыҡ яһалған икән, язаһын үт, әжерен ҡайтар йыһанға. Әлегә бер яуыз ҙа Аллаһ алдындағы яуаплылыҡтан ҡасып ҡотола алмаған һәм алмаҫ та.

**Ләйсән УРМАНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 36-сы идея
## Ҡыҫалаға - ҡапҡан

Һинә диңгеҙ ҡыҫалалары оҡшаймы? Яңы Англияла йәшәүселәр уларҙы ярата. Ә һин ул ҡыҫалаларҙы нисек тотҡандарын беләһеңме? Уның ҡулайламаһы бик ябай: диңгеҙ ҡыҫалаһы еңел генә эскә үтеп инә, әммә унан сығыуы бик ауыр. Тормошобоҙҙа ла ошондай ҡапҡандар бик күп.

Беҙ, әҙәми заттар, уйламаҫтан төрлө хәлдәргә тарыйбыҙ. Күптәребеҙ, уйлап та тормай, таҙа ҡағыҙ битенә үҙ ҡултамғаһын ҡуйырға әҙер. Ә ғаиләлә килеп тыуған төрлө ығы-зығыларҙың һәм яфаларҙың сәбәбе "файҙалы" килешеү аҫтына үҙ ҡултамғабыҙҙы ҡуйыр алдынан бының ниндәй бурыстар йөкмәтеүе тураһында уйланмауыбыҙға ҡайтып ҡала бит.

Был тормошобоҙҙоң бөтә аспекттарына ла ҡағыла: аҡса займдарына, документтарға ҡул ҡуйыуға, төрлө контракттар төҙөүгә. Күптәр нимәгәлер ҡушыларға ярата. Улар башҡалар өсөн яуаплылыҡ ала, еңел генә никахҡа инеүе лә ихтимал.

Ҡул ҡуйыу, ҡарар ҡабул итеү, "эйе" тип әйтеү, вәғәҙә биреү бик еңел дә ул - уның ҡарауы, һуңынан үтәү, түләү бик ауыр, бик оҙаҡ ҡайғырырға һәм үкенергә тура килә.

Йөкләмә алыу еңел, ләкин уны үтәү ауыр. Ҡайһы берҙә был йөкләмәне алғанда көткән ҡыуанысыбыҙ, киреһенсә, күңел төшөнкөлөгөнә әүерелә. Беҙ күпселеккә, модаға эйәреп, үҙ ғорурлығыбыҙҙы еңә алмай, башҡаларҙан артта ҡалмау өсөн генә уйланмаған ҡарарҙар ҡабул итәбеҙ.

Беҙгә алғараҡ күҙ һалып, үҙ теләктәребеҙҙе теләһә ниндәй юл менән кисекмәҫтән ҡәнәғәтләндерергә түгел, ә киләсәкке көндәрҙе, ҡасан да булһа бурыстарҙы түләүҙе талап итәсәктәрен алдан күрә белергә өйрәнергә кәрәк. Йөкләмә, ярҙам, юғалған ваҡыт - быларҙың барыһы өсөн дә түләргә кәрәк бит.

Беҙ шикле йөкләмәләрҙән алыҫыраҡ ҡасырға тейешбеҙ. Үҙ тормошоңа ентекле ҡараш ташларға, бөтә йөкләмәләргә айыҡ аҡыл күҙлегенән ҡарарға һәм ҡултамғаңды ҡуйырға ашыҡмаҫҡа йәки диңгеҙ ҡыҫалаһы ҡапҡанына башыңды тыҡмаҫҡа кәрәк.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Йәштәрҙе әрләү - ҡарттар гигиенаһының бер мөһим өлөшө: был уның организмында ҡан уйнауға бик ныҡ ярҙам итә.*

*(Логан Смит).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БЕЛӘГЕ ЙЫУАН БЕРҘЕ ЙЫҒЫР, БЕЛЕМЕ БАР МЕҢДЕ ЙЫҒЫР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**34-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Әфтәх. Патриот. Шәкүр. Иғәнә. Үлсәү. Риүәйәт. Реализм. Әкиәт. Әсетке. Леодр. Әсә. Бөрсә. Нужа. Айыу. Ләхет. Гавот. Утҡа. Акихито. Ноҡом. Диктант. Күҙәнәк.

**Вертикаль буйынса:** Роулинг. Иманғолов. Икар. Ата. Пион. Кендек. Әрмәк. Әйтеш. Әруах. Игәт. Крәҫтиән. Томан. Хәтер. Төк. Үтә. Балан. Көбө. Әбүс. Үрт. Әйтем.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Август - Сентябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 31 (12) дүшәмбе | 4:53 | 6:23 | 13:30 | 18:38 | 20:08 | 21:38 |
| 1 (13) шишәмбе | 4:55 | 6:25 | 13:30 | 18:35 | 20:05 | 21:35 |
| 2 (14) шаршамбы | 4:57 | 6:27 | 13:30 | 18:33 | 20:03 | 21:33 |
| 3 (15) кесе йома | 4:59 | 6:29 | 13:30 | 18:30 | 20:00 | 21:30 |
| 4 (16) йома | 5:00 | 6:30 | 13:30 | 18:28 | 19:58 | 21:28 |
| 5 (17) шәмбе | 5:02 | 6:32 | 13:30 | 18:25 | 19:55 | 21:25 |
| 6 (18) йәкшәмбе | 5:04 | 6:34 | 13:30 | 18:23 | 19:53 | 21:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

# БЕР ТОҠ ҺОЛО

Инәйем улын ерләгәндән һуң ҡаты ауырый башланы: аяҡ-ҡулы ҡалтырай, көскә атлап йөрөй, баҫып торғанда ла берәй нәмәгә таяна. Шул саҡ уға танышы бер дауалау ысулы тәҡдим иткән: "Һиңә һоло ғына ярҙам итәсәк. Бер тоҡ һоло ал һәм уны күренгән урынға ҡуй. Көн һайын 3 литр һыуға 9 ҡалаҡ һоло һалып, шуны бер сәғәт талғын утта бешер, төнгөлөккә плитаның ситендә ҡалдыр, шул килеш быҡһын. Көндөҙ күпме теләйһең, шул тиклем ошо төнәтмәне эс. Иң мөһиме, эсеп бөтөр", - тигән.

Инәйем шулай итте лә. Тоҡтоң яртыһы бөтөүгә аяҡ-ҡулы ҡалтырауҙан туҡтаны, аҙымдары ышаныслыраҡ була башланы. Шуға ҡарамаҫтан, тоҡтағы һоло бөткәнсе төнәтмәне эсеүен дауам итте. Инәйем 90-ды үткәнсе йәшәне. Ғүмер буйы шул танышына рәхмәт уҡыны.

Ошо хәлде иҫләп, мин дә һоло менән ҡыҙыҡһынғайным. Һоло В төркөмө витаминдарына, ферменттарға, шифалы минераль матдәләргә бай икән. Уның төнәтмәһе менән, ысынлап та, нервылар системаһын, йөрәкте, бауырҙы, ашҡаҙан-эсәк трактын дауалайҙар. Һоло һаламы төнәтмәһенән ванналар фалиждан, ревматизмдан, дерматиттан ярҙам итә.

**Хәлиҙә НОСРАТУЛЛИНА.**
**Салауат районы.**

*КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ*

# БӨЖӘК ТЕШЛӘҺӘ

**Теш пастаһының шундай файҙалы үҙенсәлектәре барлығын beләһегеҙме?**

- Бөжәктәр тешләһә, яраланғанда һәм күпертке сыҡҡанда ҡуҙғыуҙы баҫа
- Яндырған урындың ауыртыуын баҫа
- Тиренең етешһеҙлектәрен йәшерергә ярҙам итә. Биттәге һытҡыларҙы таҙартҡандан һуң яраланып ҡалған тирене тиҙ уңалта
- Тырнаҡтарҙы таҙарта
- Сәсте һыйпап шымартып һалырға ярҙам итә
- Һарымһаҡ, балыҡ, һуғандың әсе еҫен бөтөрә
- Кейем һәм балаҫты таптарҙан таҙарта
- Бысраҡ аяҡ кейемен таҙарта
- Буялған стеналағы төҫлө ҡәләм һәм фломастер эҙҙәрен бөтөрә
- Көмөш биҙәүестәрҙе ялтырата
- Компьютер дискыларынан сыйылған эҙҙәрҙе бөтөрә
- Инструменттарҙың төймәләрен таҙартыу өсөн ҡулланырға була
- Балаларҙы ашатҡанда ҡулланылған шешәнән килгән насар еҫте бөтөрә
- Көйгән тимер һәм суйын әйберҙәрҙе таҙалай
- Йөҙөү өсөн тәғәйенләнгән күҙлекте боҫландырмай

# ТАБАНЫҢ АУЫРТАМЫ?

**Үксә шпорынан ошондай халыҡ дауалары ярҙам итә:**

- Картуфты эре ҡырғыс, кергәнде - вағы аша үткәрергә. Тигеҙ миҡдарҙа бутап, кәбеҫтә япрағына һыларға һәм ауыртҡан урынға баҫырға. Өҫтөнән полиэтилен ябырға һәм ойоҡ кейергә. Бинт менән бәйләп, түҙемлек еткәнсе тоторға. Был рәүешле 3-7 тапҡыр дауаланыу ҙа етә.
- Берәр балғалаҡ бал һәм керән, 1 мл (10 процентлы) йәки 2 мл йод (5 процентлы) алып, ҡушып болғарға һәм үксәгә һөртөргә. Өҫтөнән полиэтилен ябып, ойоҡ кейергә, бинт менән бәйләргә. Был боҫламаны 3 төн сисмәҫкә, үксә шпоры шул саҡта бөтә.
- Арыш икмәген сәйнәп, төкөрөкләп, бал ҡушырға һәм кәбеҫтә япрағына һалып, үксәгә ябырға. Яҡшылап урап, төнгөлөккә ҡалдырырға. Был рәүешле 5-7 тапҡыр дауаланыу ҙа һөҙөмтәле.
- Ҡара торманы (черная редька) яҡшылап йыуып, ҡабығы менән бергә ҡырғыс аша үткәрергә. Үксәгә май һөртөп, марляға уралған ҡара торманы үксәгә баҫырға, 2-3 сәғәт тоторға. Төнгөгә ҡалдырырға ярамай (!), ныҡ яндыра.
- Бал һәм диңгеҙ тоҙон бер тигеҙ миҡдарға алып бутарға. Аяҡтарҙы алдан һыуға тығып йомшартып алып, марляға һыланған ҡатышманы үксәгә баҫырға. Өҫтөнән полиэтилен ҡаплап нығытырға. 3-7 тапҡыр дауаланыу ҙа етә.

# ТӨШӨНКӨЛӨКТӘН НИСЕК ҠОТОЛОРҒА?

**Көн яҡтылығы, ҡояш нуры етмәү сәбәпле, көҙ көнө, айырыуса ямғырлы, йонсоу көндәрҙә кеше күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүсән. Бер ниндәй эшкә ҡул бармай, эшләһәң дә теләкһеҙ генә башҡараһың. Бер ниндәй сәбәпһеҙ илата, ҡуҙғыта, ярһыта. Унан нисек ҡотолорға?**

**Көндәлек тормошоғоҙға яңылыҡ индерегеҙ.** Бөтә иғтибарығыҙҙы биләп алған, күңелһеҙ уйҙарҙан арындырған ҡул эше, элек яратып башҡарған башҡа төрлө шөғөл булырға мөмкин ул.

**Спорт менән шөғөлләнегеҙ.** Физик күнегеү эшләгән ваҡытта беҙ, теләйбеҙме-юҡмы, мейебеҙ шатлыҡ гормоны эндорфин бүлеп сығара. Тап ошо гормондың аҙ булыуы беҙгә бәхетле булырға ҡамасаулай.

**Ижад итегеҙ.** Һүрәт төшөрөү - психотерапияның бер бүлеге. Ижад күңелһеҙ тойғоларҙан ҡотолорға булышлыҡ итә. Ә уның һөҙөмтәһе, һәр ижади эш кеүек, үҙбаһаны күтәрә.

**Хис-тойғоғоҙҙо үҙегеҙҙә тотмағыҙ.** Үҙенде ҡулда тотоу, ебегәнлегеңде йәки асыуыңды күрһәтмәү кешене тағы ла тәрәнерәк күңел төшөнкөлөгөнә этәрә. Эмоцияларҙы тотоу бомба һымаҡ, ул үҙеңдә шартлауы ихтимал. Үҙен тотоусылар, һалҡын аҡыллылар йыш ҡына невроз, психосоматик ауырыуҙарға юлығыусан. Илағығыҙ килә икән - илағыҙ, ҡысҡырғығыҙ килһә - ҡысҡырығыҙ. Тик кире тойғоғоҙҙо үҙегеҙҙә ҡалдырмағыҙ.

**Үҙегеҙҙе ҡыуандырығыҙ.** Күңелле, матур ваҡыттарҙы яҙып барырға көндәлек башлағыҙ. Һеҙҙе күберәк нимә шатландырғанын асыҡлағыҙ һәм шуға ынтылығыҙ.

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

## КИНОТЕАТРҒА БАРҺАҢ...

**1 сентябрҙән Башҡортостанда кинотеатрҙар эш башлаясаҡ. Был хаҡта республика биләмәһендә коронавирус инфекцияһы таралыуға юл ҡуймау буйынса оператив штаб ҡарарына һылтанып, Мәҙәниәт министрлығы матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.**

Кинотеатрҙар эшмәкәрлеген тергеҙеүҙең мөһим шарты - РФ Роспотребнадзоры тарафынан булдырылған яңы коронавирус инфекцияһы таралыуҙы иҫкәртеү буйынса саралар үткәреүҙе көйләүсе санитар-эпидемиологик талаптарҙы һәм күрһәтмәләрҙе үтәү. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, был битлек режимын һәм 1,5 метр аралыҡ социаль дистанцияны һаҡлау. Был шулай уҡ залда ултыртыу тәртибе, касса, кинобар янында, шулай уҡ залға инеүсығыу урындарында тамашасылар менән хеҙмәткәрҙәрҙең урынына ла ҡағыла. Киносеанстар араһындағы тәнәфес залды елләтеү һәм дезинфекция үткәреү өсөн ярты сәғәттән дә кәм булмаҫҡа тейеш. Тамашасыларға билетты онлайн юл менән һатып алырға, ә инде касса аша алған хәлдә санитар һаҡлыҡ сараларын - битлек кейеү, социаль дистанция һаҡлау тәртибен үтәргә кәңәш ителә. Музей һәм китапханалар бөтөн хәүефһеҙлек сараларын үтәп, штат расписаниеһы буйынса эшләй, тип иҫкә төшөрә Мәҙәниәт министрлығы. Театрҙар бөләкәй төркөмдәр менән йәки онлайн тәртиптә яңы сезонға әүҙем әҙерлек алып бара.

## ҺӘЙКӘЛ НИСЕК БУЛАСАҠ?

**Скульпторҙар генерал-майор, Рәсәй Геройы, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры Миңлеғәли Шаймаратовҡа Өфө ҡалаһының Совет майҙанында ҡуйыласаҡ һәйкәленең эскизын әҙерләне.**

Концепция буйынса монументта легендар генералдың иҫтәлеген генә түгел, ә кавалерия дивизияһы яугирҙарының ҡаһарманлығын да мәңгеләштереү күҙаллана. Генералдан тыш, постаментта һөжүмгә ташланған атлыларҙы һүрәтләгән горельефтар, Миңлеғәли Шаймаратовтың биографияһы этаптарын сағылдырған барельефтар урынлаштырыласаҡ. Дивизия составында һуғышҡан Советтар Союзы Геройҙары фамилиялары бронза таблицаларға сүкеп яҙыласаҡ.

Скульптор Александр Спиридонов билдәләүенсә, һәйкәл һәм постаментты булдырғанда Совет майҙанын уратып алған биналарҙың архитектура үҙенсәлеге һәм стилистикаһы ла иҫәпкә алынған. Монумент арт-деко элементтары менән XX быуаттың 30-50 йылдарындағы неоклассицизм традицияһы буйынса эшләнгән. Постаменттың ташы эргәләге биналарҙың цоколь ҡатлылығына тура килә. Атлы статуя һәм барельефтар Салауат Юлаев һәйкәле эшләнгән Санкт-Петербургтың "Монумент-скульптура" заводында ҡойолған. Уның ауырлығы 18 тонна тирәһе.

## ЙӘШ РЕЖИССЕР ЭШЕ

**Салауат башҡорт драма театрының "Бер, ике, өс..." спектакле "Артмиграция" Бөтә Рәсәй йәш режиссерҙар фестивалендә күрһәтелә. Уны 20 сентябрҙә Мәскәүҙәге "На Страстном" Театр үҙәгендә ҡарарға була.**

Спектаклдә ҡаҙаҡ драматургы Олжас Жанайдаров пьесаһы буйынса Ш. Бабич исемендәге премия лауреаты, Салауат башҡорт драма театрының баш режиссеры Илсур Ҡаҙаҡбаев ҡуйған. Рәсәй театр эшмәкәрҙәре союзы "Артмиграция" фестивален 12-20 сентябрҙә үҙгара. Был конкурсҡа Мәскәү һәм Санкт-Петербург вуздарын тамамлап, илдең төбәк театрҙарында эшләгән йәш режиссерҙар саҡырыла. Йыл һайын фестивалгә Рәсәйҙең төрлө ҡалаларынан 100-гә яҡын ғариза килә. Быйыл баһалама ағзалары Нижневартовск, Салауат, Ҡаҙан, Түбәнге Тагил, Быуа, Һамар, Канск һәм Йошкар-Ола ҡалаларынан йөмғеһе 8 спектаклде һайлап алған. Спектаклдәр "На Страстном" Театр үҙәгендә, Боярские Палаты һәм А.С. Пушкин исемендәге Мәскәү драма театры сәхнәләрендә ҡуйыласаҡ.

## АЙТМАТОВ ӘҪӘРЕ

**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының башҡорт труппаһы Сыңғыҙ Айтматов повесы буйынса "Ал яулыҡлы тирәккәйем" спектаклен сәхнәләштерә.**

Спектаклдең ҡуйыуսы режиссеры Рөстәм Хәкимов, инсценировка авторы Әнгизә Ишбулдина, ҡуйыусы рәссамы Екатерина Сомова. Үткән быуаттың 70-се йылдарында ижад ителгән повесть ваҡытында бөтә СССР халҡы яратып уҡыған, мөхәббәт һәм хыянат тураһындағы әҫәр тормошсанлығы менән йәлеп итә. Спектаклдә Асель ролендә БР-ҙың атҡаҙанған артисы Гөлшат Ғайсина һәм Дания Ғәбәйҙуллина, Ильяс - Вадим Ҡылысов һәм Илгиз Таһиров, Хәҙисә - БР-ҙың атҡаҙанған артистары Гөлбинә Сафуанова һәм Эльмира Саматова, Аселдең әсәһе булып БР-ҙың атҡаҙанған артистары Зифа Дәүләтбаева һәм Зилә Сәйетова уйнай. "Спектакль тамашасыларға илдәге эпидемиологик хәл яҡшырғас күрһәтелә", -тип хәбәр иттеләр М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрынан.

## РӘСӘЙ ЙЫРҘАРЫ

**Кострома өлкәһендә үткән "Песни России" Бөтә Рәсәй фестиваль-марафонында Башҡортостан исеменән "Арғымаҡ" этнотөркөмө сығыш яһаны.**

Сара 21-31 августа уҙғарылды, уның авторы һәм художество етәксеһе - Рәсәйҙең халыҡ артисы Надежда Бабкина. Фестивалдең төп маҡсаты - илдең мәҙәни нигеҙен тәшкил иткән Рәсәй халыҡтарының рухи мираҫын һаҡлау һәм популярлаштырыу. "Был фестивалдә өсөнсө тапҡыр ҡатнашабыҙ. Надежда Георгиевна илдең күп милләтле халыҡтын ижады менән берләштергән иҫ киткес шәхес. "Песни России" сараһы сиктәрендә ҡурай моңо илдең төрлө тарафтарында яңғыраны һәм башҡорт халҡының мәҙәниәтен күп ҡалаларҙа күрҙеләр", - тип тәьсораттары менән бүлеште "Арғымаҡ" төркөмө етәксеһе Ринат Рамазанов. Коллектив тәүге тапҡыр 2018 йылда Ханты-Манси автономиялы округында уҙғарылған фестивалдә ҡатнашҡан. Ә быйлтыр "Песни России" сараһы Башҡортостандағы "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара фестивале сиктәрендә үтте.

*БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК*

## АСАЛАУ ҺӘМ АҪАЛАУ АЙЫРЫЛАМЫ?

**Аллау** - рисунок в крупную горошину

**Алмалау** *(мейәс, урта)* - украшение материала одежды, обуви, головных уборов крупными округлыми узорами

**Алсуҡ** *(туҡ-соран)* - кисть в передней части головного убора кашмау

**Арба** *(күбәләк, мейәс)* - ткацкий станок

**Арҡыры түшәк** *(һаҡмар)*, **арҡыры һүҙма** *(әйек)*, **арҡыры юрган** *(ҡыҙыл, мейәс)*, **түр юрган** - узкое лоскутное одеяло для нар

**Армыт** *(ҡыҙыл, мейәс, урта)* - ветвь косоплётки

**Арт ағасы** *(һаҡмар)*, **арт баған** *(мейәс)*, **арт сөй** - задний шпиль ткацкого станка, на который крепится свитая в жгут основа

**Аса** *(ғәйнә, урта урал)* - квадратный, клетчатый узор на домотканных половиках

**Асабы** *(һаҡмар)* - узор на коже

**Асалау** - делать узоры

**Аҫалау** - ткать узорчатый ковёр

**Аҫалы** *(дим, урта, әйек-һаҡмар)* **биҙәкле**

**Аҫтар** 1) ветошь под подкладку 2) подкладка

**Аҫтарлау** - ставить ветошь под подкладку

**Аяҡтун** *(диалект)* ыштан

**Рәмилә КӘРИМОВА.**

**"Башҡортса-урыҫса туҡыусылыҡ һәм ҡул эштәре терминдары һүҙлеге" китабынан.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ИҢ ЯРЛЫ КЕШЕ КЕМ?

### Аҡса ятраҡан кеше

Толпар тояғы ҡыҙһа, ҡанатланып осор.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле)**

Аңлы кешене теләһә нимәгә инандырып була, аңһыҙҙы ғына нимәгәлер инандырыуы ауыр.

**(Том Стоппард).**

Йәштәрҙе әрләү - ҡарттар гигиенаһының бер мөһим өлөшө: был уның организмында ҡан уйнауға бик ныҡ ярҙам итә.

**(Логан Смит).**

Ир-егет тураһында уның ҡатын-ҡыҙ хаҡында нисек фекер йөрөтөүенән сығып һығымта яһап була.

**(Жилбьер Сесброн).**

Ярлыҡанмай торған берҙән-бер гонаһ - ул ике йөҙлөлөк. Сөнки ике йөҙлө кешенең тәүбә итеүе - үҙе ике йөҙлөлөк ул.

**(Уильям Гэзлитт).**

**Шулай итеп, һораүҙарға Монах Симеон Афонскийҙың аҡыллы яуаптарын ишетегеҙ:**

**Иң яҡшы уҡытыусы? Михнәт.**
**Иң насар уҡытыусы? Рәхәтлек, ләззәт.**
**Иң һирәк осраған сифат? Бирә белеү.**
**Иң яҡшы сифат? Ғәфү итә белеү.**
**Иң ауыры нимә? Өндәшмәү.**
**Белергә тейешле иң мөһим нәмә? Һорай белеү.**
**Иң кәрәкле нәмә? Тыңлай белеү.**
**Иң хәүефле көрәш? Фанатиктарса көрәшеү.**
**Иң насар ғәҙәт? Ғауғасыллыҡ.**
**Иң зарарлы ғәҙәт? Асыҡ ауыҙлыҡ.**
**Иң көслө кеше?**
**Хаҡлыҡты аңларға һәләтле кеше.**
**Иң көсһөҙ кеше?**
**Үҙен иң көслө тип уйлаған кеше.**
**Иң аҡыллы кеше?**
**Үҙенең күңелен аңлаған кеше.**
**Иң хәүефле ятрыу, бәйләнгәнлек?**
**Үҙеңде нык ятрыу.**
**Иң ярлы кеше? Аҡса ятраҡан кеше.**
**Аллаға иң яҡын кеше?**
**Миһырбанлы кеше.**
**Иң көсһөҙ кеше?**
**Башҡаларҙы еңгән кеше.**
**Иң көслө кеше? Үҙен еңгән кеше.**
**Ҡайғыға нисек ҡаршы торорға?**
**Шатлыҡ менән.**
**Михнәтте нисек еңергә? Түҙемлек менән.**
**Сәләмәт йәндең билдәһениндәй?**
**Ышаныс.**
**Ауырыу йәндең билдәһе ниндәй?**
**Өмөтһөҙлөк.**
**Насар ҡылыҡтың билдәһе?**
**Асыуланыу, ярһыу.**
**Изге ҡылыҡтың билдәһе?**
**Күңел тыныслығы.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.

Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**

E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

**Баш мөхәррир** 253-25-44

**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24

**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 28 август 17 сәғәт 00 мин. Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007

Заказ - 679/08

1582218911006